*✓ Ҡурҡып йүгергәндә күргән дошман һине тағы ла нығыраҡ эҙәрлекләйәсәк. Шуның һымаҡ, сир алдында ҡурҡып ҡалһаң, ул һине тағы ла нығараҡ ыҙалаясаҡ. Ҡаршылыҡ булһа, йомшарасаҡ. Сиргә ҡаршылыҡ күрһәтергә кәрәк.*

*(М. Монтень).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4 - 10 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №49 (415)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өсөнсө бала ғына түгел...**

бишенсе, етенсе, туғыҙынсыһы ла мөһим



2

**Баш ҡалабыҙ йөҙөндә...**

ситтәр иғтибарын йәлеп итерлек ҡомартҡылар бар



5

**Вәлиди феномены.**

Беҙгә әле ул кимәлгә күтәрелергә лә күтәрелергә...



8-9

**Атайҙарҙың ирлек абруйын...**

әсәйҙәр тәрбиәләй



12-13

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Блогерҙар менән осрашыу ваҡытында Башҡортостан Республикаһы Президентына, киләһе йылды мәҙәниәт йылы итеп нарыҡларға кәрәк, тигән тәкдим әйтелгәйне. Мәҙәниәт киң төшөнсә, шуға күрә һеҙ ул йылды нисегерәк итеп күрергә теләйһегеҙ?

***Айҙар ХӨСӘЙЕНОВ, яҙыусы, тәржемәсе:*** Башҡортостан Республикаһы суверенитетының 20 йыллығына арналған байрамда ла Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитов үҙебеҙҙә булған мәҙәниәт һәм сәнғәт өлгөләрен Рәсәй һәм донъя кимәлендә күрһәтеү, пропагандалау тураһында әйткәйне. Бик ваҡытлы сара, ни өсөн тигәндә, ситтә генә түгел, хатта Башҡортостанда йәшәп тә, урындағы мәҙәниәт өлгөләрен белмәүселәр бар. Әгәр ҙә беҙҙең республикала йәшәүсе һәр кем йылына беҙҙең берәй яҙыусының һис юғы бер китабын, һис юғы сувенир һатып алһа, бер тапҡыр театрға йә милли киноға барһа, улар беҙҙең сәнғәткә һәм мәҙәниәткә бер аҙымға булһа ла яҡынайыр ине бит. Әгәр ҙә был хәл үҙенән-үҙе килеп сыҡмай икән, уны ойоштороп була. Мин Президенттың блогерҙар менән осрашыуында бер йылды Урал батыр йылы итеп иғлан итеү зарурлығы хаҡында ла тәҡдим индерҙем. Киләсәктә республикабыҙҙа бер йылыбыҙ Урал батыр исеме менән аталыр, тигән өмөттәмен.

***Зөһрә БУРАҠАЕВА, БР һәм РФ Яҙыусылар союздары ағзаһы, "Башҡортостан" киностудияһы мөхәррире:*** Хәҙерге заманда тамашалар иҫ китмәле күп, быуа быуырлыҡ, бары тик тамашасылар етешмәй. Сөнки күп кенә тамашалар тыңлаусының зауығын ҡәнәғәтләндермәй, тәрбиәләмәй, киреһенсә, бындай саралар ысын сәнғәттән һәм мәҙәниәттән күпкә айырыла. Билет хаҡтары 25-50 һум ғына торған тамашаларҙың баһалары хаҡтарынан уҡ күренеп тора. Ҡыҫҡаһы, хәҙер тамашасы ысын сәнғәт, ысын мәҙәниәт менән шау-шоуҙың айырмаһын белмәй, улар буталған. Зауыҡ та буталған. Хәҙерге йәш кеше классик операға йә халыҡ сәнғәте концертына барыр урынға, төнгө клубҡа барып, бик күп аҡсаһын тәләфләй. Беҙгә хәҙер 50-60-сы йылдарҙағыса, "Культураны - массаларға" кеүегерәк сараларҙы яңынан тергеҙергә кәрәк. Эште гипермаркеттарҙа, супермаркеттарҙа сәнғәткә, мәҙәниәткә бәйле анкеталар үткәреүҙән башларға була. Төрлө учреждениеларҙа, предприятиеларҙа, сауҙа нөктәләрендә "Сәнғәт тирмәһе" ойоштороу ҙа маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Мәҫәлән, бер ай буйына "Карауанһарай" сауҙа һарайында Башҡорт дәүләт сәнғәт академияһы айлығы үткәрелә. Унда академияла уҡыусы рәссамдарҙың күргәҙмәһен, уҡыу йорто тарихына бәйле стендтар, социаль рекламалар ҡуйырға мөмкин. Шунда уҡ музыканттар, йырсылар, бейеүселәр тәүлек әйләнәһенә концерт күрһәтә, милли сәнғәт өлгөләре менән таныштыра.

Әгәр ҙә алдағы йыл Мәҙәниәт йылы итеп иғлан ителһә, мин унда тағы ла милли киноға айырым иғтибар бүленеүен теләр инем. Нисек кенә тимәйек, милли кино киләсәгебеҙҙең айырылғыһыҙ төп өлөшө.

***Рөстәм БАҺАУВ, Республика халыҡ ижады үҙәгенең төбәк-ара бәйләнештәр буйынса баш белгесе:*** Ысын сәнғәт менән бизнес ныҡ буталды. Шуға күрә, әгәр ҙә алдағы йыл Мәҙәниәт йылы тип атала ҡалһа, был йылды телевидениела, радиола, сәхнәлә цензура хеҙмәте ойоштороуҙан башларға кәрәк. Эфирҙан һәм сәхнәнән күрһәтелгән һәм яңғыраған программаларҙан һығып алып, барлығы 2-3 номерҙы ғына ысын сәнғәт емеше тип атарға була. Былай барһа, халҡыбыҙҙы сәнғәтебеҙҙән, мәҙәниәтебеҙҙән биҙҙереп бөтәсәкбеҙ. Хәҙерге ваҡытта профессиональ сәнғәт халыҡ сәнғәте кимәленән бик-бик аҫҡа төштө.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

## ИЖАДХАНА

# ТӨРКИӘГӘ БАРЫП...

## был бәйгелә лә беренсе урынға сыҡты

**...Беренсе синыфта уҡып йөрөгән ҡыҙҙы уҡытыусы класс журналын алырға ебәрә. Уҡытыусылар бүлмәһенә инеп, журналды ҡулына алып, ишеккә йүнәлгәндә стеналағы бер картина уның күҙенә салынып ҡала. Ул дәрескә барырға кәрәклеген дә, үҙенең ҡайҙа икәнлеген дә онотоп, туҡымалағы һәр төҫтө, һәр һыҙатты иғтибар менән, ентекләп ҡарай башлай. Салауат районының Лағыр ауылында тыуған Земфира Ғәлимованың (Абдуллина) серле ижад, тылсымлы ҡылҡәләм донъяһына инеүе, бәлки, тап ошо Карл Брюлловтың "Помпеяның һуңғы көнө" тигән картинаһын байҡауҙан башланғандыр.**



Былай ҙа һүрәт төшөрөргә яратҡан ҡыҙға яҙмышындағы артабанғы ваҡиға ла үҙ юлын һайларға этәргес була. Мәктәптең рәсем уҡытыусыһы Ирек Йыһангиров менән Нәҡи Шәрипов бер көн уларҙың өйөнә килеп инә һәм атаһы Әхәт ағай менән әсәһе Фәйрүзә апайҙы ҡыҙҙары Земфираны Өфөгә, Республика художество интернат-мәктәбенә уҡырға ебәрергә өгөтләй башлай. Ата-әсәнең ризалығын алғас, улар бергәләп ҡыҙҙы имтихандарға әҙерләргә тотона, хатта интернатҡа ебәрә торған һүрәтте лә үҙҙәре үк төшөрөп бирә. "Шул тиклем минең баш ҡалала уҡыуымды теләгәндәрме икән, әллә имтихандарҙы тапшыра алмаҫ, ҡаушар тип ҡурҡҡандармы икән, - тип көлөп хәтерләй хәҙер Земфира Әхәт ҡыҙы. - Ә имтихан ваҡытында бирелгән темаға һүрәт төшөрөргә ҡушылғас, ихласлап, кинәнеп китеп эшләнем. Һуңынан имтихан алыусы уҡытыусылар, һүрәт бына шулай булырға тейеш, тип барыһына ла өлгө итеп күрһәтте".

(Дауамы 11-се биттә).

*ИҒТИБАР!*

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫБЫҘ!

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыу алдында. Ятаҡан дуҫың, серҙәшең, фекер уртаҡлашыр баҫмаңа яҙылып ҡалырға ашыҡ.**

➔ Гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Уларға **микротулҡынлы мейес, кеҫә телефоны, сепаратор, электр сәйнүге, үтек** һәм башҡа төрлө матур бүләктәр отторасаҡбыҙ.




Квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 300 кеше "Дини календарь" алып ҡыуанасаҡ.

➔ Әйткәндәй, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

➔ **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**50665** индекслы **"Киске Өфө"** алты айға **330 һум 24 тин, 50673** индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - **360 һум 24 тин** тора.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**



*ИШАРА*

**"Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведевтың Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышына Мөрәжәғәтнамәһе киләһе йылдарға Рәсәйҙәге йәмғиәт тормошоноң бөтә яҡтарын артабан реформалау мәсьәләләрен тикшереү йәһәтенән дәүләт власы һәм урындағы үҙидараның бөтә тармаҡтары һәм кимәлдәре эшмәкәрлегенең перспективалы программаһы булып тора. Дәүләт башлығы яҡын киләсәккә эске һәм тышҡы сәйәсәттең төп йүнәлештәре буйынса позицияһын әйтеп бирҙе", тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев үҙенең ил башлығының Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһе хаҡындағы ҡыҫҡаса аңлатмаһында. Күптәрҙең фекеренсә, Президенттың әсәлек, балалыҡ, тыуым кимәлен арттырыу, тәрбиә һәм белем биреү проблемаларына айырым иғтибар бүлеүе, был йәһәттән саралар проектын тәҡдим итеүе быйылғы Мөрәжәғәтнамәнең төп үҙенсәлеге булып тора ла инде.**



# ӨСӨНСӨ БАЛА ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## бишенсе, етенсе, туғыҙынсыһы ла мөһим

Дмитрий Медведев үҙенең сығышында ғаиләләге "өсөнсө бала феномены" хаҡында ла фекер йөрөтә. Ул был йәһәттән Алтай крайында үткәрелгән социаль рекламаға иғтибарын йүнәлтеп, ватандаштарыбыҙ араһынан Рәсәйҙең данын һәм ғорурлығын тәшкил итеүсе киң билдәле шәхестәрҙең үҙ ғаиләләрендә өсөнсө бала булып тыуыуҙарын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Шунда уҡ уларҙың бер нисәһен атап та үтә, улар: Николай Некрасов, Антон Чехов, Юрий Гагарин, Анна Ахматова, һ.б. "Ошо бөйөк кешеләрһеҙ, уларҙың ижадынан һәм ҡаҙаныштарынан тыш донъя бөтөнләй башҡаса булыр ине", ти Президент.

Артабан Дмитрий Анатольевич өс һәм унан да күберәк балалы ғаиләләргә социаль льготалар булдырыу йәһәтенән яңы закондар ҡабул итеү зарурлығын билдәләне. Атап әйткәндә, ул Иваново өлкәһендәге ғаиләлә өсөнсө бала тыуғандан һуң йорт төҙөү өсөн бушлай ер участкаһы бүлеү миҫалын бөтә ил кимәленә күтәрергә кәрәк, тигән тәҡдим индерҙе. Хуп. Ил башлығының күп балалы ғаиләләргә ярҙам итеү йәһәтенән индергән башҡа тәҡдимдәре лә бик урынлы һәм улар тормошҡа ашырырлыҡ тип уйланыла.

Беҙҙең халыҡта "Бер бала - юҡ бала, ике бала - ярты бала, өс бала - бер бала", тигән һүҙ бар. "Әгәр ҙә 40 йәшеңә тиклем йортоң балалар тауышына тулмаһа, ул тотош мәшхәр менән туласаҡ", тип тә әйткән бер аҡыл эйәһе. Элек-электән беҙҙең милләттә күп бала тыуыу йола, традиция кимәлендә нығынған. Юҡҡа ғына ла "итәк тулы бала" тигән һүҙбәйләнеш барлыҡҡа килмәгәндер. Улай ғына ла түгел, үрсеү күп осраҡта милләтте йәшәтеүсе төп фактор булып та хеҙмәт иткән. Тимәк, төптән уйлап ҡараһаң, һуңғы дүрт-биш быуат һуҙымында милләтте итәк тултырып бала табыусы әсәйҙәр йәшәтеп килә бит. Башҡорт йәштәре ҡоролтайының "кәмендә биш бала" проекты менән сығыш яһауы ла был йәһәттән ҙур башланғысҡа оран һалыу булды, тип тә ышанырға була.

Ил башлығы иғтибар иткән "өсөнсө бала феномены" философия һәм психология фәндәрендә күптән билдәле. Философтар уны "һандың сифатҡа күсеүе", психологтар "доминанта күренеше" тип атай. Уларҙың күп һандағы иҫәпләүенсә, ғаиләлә даһиҙар, ысынлап та, таҡ һандағы 3-сө, 5-се, 7-се, 9-сы, 11-се (артабан) бала булып донъяға килә икән дә. Был күренештең аңлатмаһы ла ябай ғына. Әйтәйек, иң ҡыйыны 1-се балаға тура килә, сөнки уға барыһына ла үҙенә өйрәнергә, донъяны танып белергә кәрәк. 2-се балаға еңелерәк, сөнки ул 1-се бала үҙләштергән әҙер мәғлүмәтте йәһәт кенә үҙенә һеңдерә һәм тиҙерәк үҫешә, әммә 1-се баланан аша һикерә алмай. 3-сө бала иһә, 1-се, 2-се балалар үҙләштергән әҙер мәғлүмәт донъяһына килә. Икенсенән, тормош ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан, көрәштән тора. Шуға күрә балалар араһындағы һәр төрлө антипатия-симпатия шарттарында 1-се бала һәм саҡ 3-сө иң кесе баланы яҡлай, ябайлаштырып әйткәндә, 3-сө бала ата-әсәһенең һәм 1-се баланың "ышығында" үҫә һәм унда кәмһенеү комплексы 2-се балаға ҡарағанда әҙерәк була. Ә инде 5-се һәм 7-се һәм унан да артабанғы таҡ һанлы доминанталарға килгәндә инде, улар ҙа ғаилә демократияһы шарттарында шулай уҡ өҫтөнлөккә эйә булып сыға.

Ҡайһы бер этимологтар урыҫ телендәге "семья" һүҙен "7 мин"дән (семь я) барлыҡҡа килгән тип иҫәпләй. Шул уҡ ваҡытта, әгәр ҙә ғаиләләге балалар һаны өстән дә кәм булһа, ул ғаилә башлыҡтары булған атай менән әсәй милләте, иле өсөн тыуыр шәхесте үҙ-үҙҙәрендә "тыуҙырмай үлтерә" булып сыға. Беҙҙең илдә үткән быуаттың 80-се йылдарынан алып күпселек ғаиләләр барлығы 2 бала менән мөрхәтһенеп йәшәй икән (ундай балалар , асылда, эгоист булып үҫеүсән), милләтебеҙ һәм илебеҙ өсөн күпме талантлы шәхестәребеҙ тыумай ҡалды икән? Улар милләт өсөн меңәрләгән, илебеҙ өсөн миллионлаған. Ә талантһыҙ шәхестәрһеҙ киләсәгебеҙ нисек булыры былай ҙа билдәле.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведевтың Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышына Мөрәжәғәтнамәһе ваҡытлы матбуғатта баҫылып та өлгөрмәҫтән, Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республикабыҙҙа өсөнсө бала тыуған ғаиләләргә йорт төҙөү өсөн бушлай ер участкаһы бүлеү мәсьәләһен әле үк тормошҡа ашыра башларға, быны өсөн тиҙ арала урындағы законды ҡабул итеүҙе тиҙләтергә тәҡдим итте.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔"Башҡортостандың нефть сығарыу һәм нефть эшкәртеү предприятиеларын һатыуҙан килгән ресурстар базаһында ойошторолған дүрт республика Хәйриә фондынан берҙәм структура - "Урал" хәйриә фонды ойошторола. Республиканың тәүге Президенты Мортаза Рәхимов фондҡа етәкселек итәсәк. Фонд средстволарын бүлеүҙең берҙәм сәйәсәтен тормошҡа ашырыу өсөн аҡса бүлеүгә заявкалар Башҡортостан Хөкүмәтендә хуплау үтәсәк. Республика үлсәмдәре буйынса фондта аҡса күп булмаһа ла (63 млрд самаһы), беҙ уларҙы һөҙөмтәле файҙаланасаҡбыҙ",- тип белдерҙе Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтендә булып үткән оператив кәңәшмә барышында.

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов күренекле совет дипломаты һәм ижтимағи-сәйәси эшмәкәр Хәкимов Кәрим Әбдрәүеф улының тыуыуына 120 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. СССР менән ғәрәп-фарсы донъяһы араһында яҡшы мөнәсәбәттәр булдырыуға ҙур өлөш индергән шәхестең юбилей сараларына "Рәсәй һәм ислам донъяһы: үҙ-ара цивилизациялы эш итеү тарихы һәм перспективаһы" халыҡ-ара конференцияһын үткәреү, китап сығарыу, Н. Асанбаевтың "Ҡыҙыл Паша" спектакле буйынса театрлаштырылған тамаша ҡуйыуҙы индереү планлаштырыла.

✔БР Президенты тарафынан республика Хөкүмәтенә Өфөлә һәм республиканың башҡа ҡалаларында транспорт ағымын ҡулайлаштырыуҙың комплекслы программаһын эшләү йөкмәтелде. Билдәләнеүенсә, беҙҙә лә пассажирҙар ташыу өлкәһендә тәртип булдырырға, туҡталыштар эргәһендә йәмәғәт транспортының ҡулай хәрәкәтен ойошторорға, автомобиль туҡталҡаларын күберәк төҙөргә, парковкалау туҡталҡалары менән мәсьәләне хәл итергә кәрәк.

✔Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Рәсәй һәм Башҡортостандан ситтә йәшәүсе ватандаштарыбыҙ менән эшләү комиссияһының киңәйтелгән ултырышы булып үтте. Уны комиссия рәйесе Хәләф Ишморатов алып барҙы. Билдәле булыуынса, милләттәштәребеҙҙең 30 проценты бөгөн республиканан ситтә йәшәй.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# КОНСТИТУЦИЯ БУЙЫНСА ЛИКБЕЗ,

## йәки Һүҙ азатлығы тураһында уйланыуҙар

**Декабрь тыуҙы бит. Алда беҙҙе Конституция көндәре көтә. Ә был ай йылдың һуңғы айы булараҡ ҡына түгел, ә Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда Конституция көндәре менән билдәле. 12 декабрь - Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы көнө, ә 24 декабрь иһә - Башҡортостан Республикаһының Конституцияһы ҡабул ителгән көн.**

Әйтегеҙ әле, йәмәғәт, һуңғы тапҡыр Конституцияны ҡасан асып ҡаранығыҙ? Ә? Ә бит ул бар халыҡтың өҫтәл китабы булырға тейеш. Рәсәйҙең ысын граждандарының, тимәк. Икмәктән айырылмайһығыҙҙыр? Иртән дә, төш тә, кис тә ул тәғәм өҫтәлегеҙҙән өҙөлмәйҙер бит? Конституция ла икмәк кеүек тә баһа. Хатта һыу һәм һауа һымаҡтыр әле. Яттан белергә кәрәк уны. Һәм уны ғына түгел. Ғөмүмән, башҡа закондарҙы ла. Хәтерләйһегеҙме, һалым йыйыусыларҙың "Һалымыңды түлә һәм тыныс йоҡла", тигән рекламаһын? Был юлы ла шулай - закондарҙы белгәндәр генә тыныс йоҡлай ала. Иҫегеҙгә шунда уҡ юл йөрөү ҡағиҙәләре төшәләр? Эйе, уларҙы ла белеү мотлаҡ. Һуңғы ваҡытта бигерәк тә. Ваҡытлы матбуғат саралары Мәскәү урамдарында һәм магистралдәрендә булған ваҡиғалар хаҡында даими яҙып тора. Ундағы водителдәр өсөн йәйәүлеләрҙе бәреп китеү бер ни ҙә түгел, "тығын"дарҙа бер-береһе менән һуғышырға ла әҙәҫтәр, хатта травматик ҡорал менән атышырға һәләтлеләр. Әллә Мәскәү климаты шундай ҡылыҡтарға этәрә, әллә "тығын"дарҙа тороу халыҡты алйыта, әллә баш ҡала һауаһы агрессия бактериялары менән тулған, белмәйһең. Хәйер, тәү ҡарашҡа сәбәпһеҙ агрессияға мәскәүҙәр генә түгел, Өфө халҡы ла эйә. Үткән аҙнала ғына баш ҡала юлдарында билдәһеҙҙәр автомобилдә бер түгел, өс кешене бәреп ҡасты.

Йә, ярай, һүҙебеҙ Конституция хаҡында ине бит. "Ликбез" һүҙен аңлатып үтергә кәрәктер. 1917 йылғы Октябрь түңкәрелешенән һуң Рәсәй империяһы емерек-лектәрендә барлыҡҡа килгән Советтар иле дә хөкөм һөргән наҙанлыҡтан ҡотолоу маҡсатында уйлап сығарылған һәм тормошҡа ашырылған махсус программаның атамаһы ул. Йәғни, "ЛИКвидация БЕЗграмотности". Ул ваҡытта һүҙ халыҡты уҡырға-яҙырға, ҡушырға-алырға өйрәтеү хаҡында ғына бармай. Совет хөкүмәте иң тәүҙә сәйәси, идеологик наҙанлыҡты юҡҡа сығарыу өҫтөндә эш алып бара.

Бөгөн белемһеҙ кеше юҡ һымаҡ. Күпселек юғары белем тураһындағы диплома эйә, фән кандидаттары һәм докторҙары ла бихисап. Урта махсус, урта белемлеләр тураһында әйтһәк тә түгел. Әммә йәмғиәттә барыбер хоҡуҡи нигилизм, йәғни битарафлыҡ көслө. Ни эшләргә һуң, тиерһегеҙ. Яҙырға! Аңлатырға! Төшөндөрөргә!

Бына, мәҫәлән, Рәсәй һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияларының 29-сы статьяларында һүҙ азатлығы тураһында әйтелә. "Һәр бер кешегә фекер һәм һүҙ азатлығы гарантиялана", тиелә унда. Ошондай уҡ рәсланмаларҙы халыҡ-ара документтарҙа ла күреп була. Мәҫәлән, 1950 йылдың 4 ноябрендә ҡабул ителгән Кеше хоҡуҡтары һәм төп азатлыҡтар тураһындағы Конвенцияның 9-сы һәм 10-сы статьяларына ярашлы, һәр бер кеше фекер, намыҫ һәм дин азатлығына һәм үҙ фекерен иректе рәүештә белдереү хоҡуғына эйә. 1966 йылдың 16 декабрендә ҡабул ителгән Граждандар һәм сәйәси хоҡуҡтар тураһындағы халыҡ-ара Пакттың 18-се статьяһында ла ошо хаҡта әйтелә.

Һуңғы ваҡытта һүҙ азатлығы тирәләй айырыуса көслө шау-шыу күтәрелде түгелме шул? Донъя кимәлендә лә, Рәсәйҙә лә. "ВикиЛикс" тип аталған интернет-ресурсында Америка Ҡушма Штаттары дипломаттарының йәшерен һәм бигүк йәшерен булмаған меңәрләгән хаты донъя күрҙе. Бөтә донъя дәүләттәренең етәкселәге үҙҙәре хаҡында Америка дипломаттары ни уйлағанын белде. Һәм улар ғына түгел, Интернетҡа инә алған һәм инглиз теле менән таныш булған һәр бер кеше был сайттағы материалдарҙы уҡыу мөмкинлегенә эйә. Был нимә - һүҙ азатлығымы? Әллә бәйһеҙлекме? Быға тиклем ошо уҡ сайтта Америка Ҡушма Штаттарының Афғанстанда һәм Ираҡта алып барған һуғышы тураһында ҡайһы бер йәшерен документтар баҫылғайны. Хәҙер был сайттың хужаһы Джулиан Ассанжды Интерпол бөтә Ер шары буйлап эҙәрлекләй, Швеция ла уны ҡатын-ҡыҙҙарға бәйләнеүҙә ғәйепләп, енәйәти эш ҡуҙғатҡандар хатта.

Ә бит Америка Ҡушма Штаттары һәм, ғөмүмән, Көнбайыш дәүләттәре һүҙ азатлығы йәһәтенән алдынғы илдәрҙән һанала. Ундағы ваҡытлы матбуғат саралары иректе. Дәүләт органдары уларҙың эшенә ҡыҫылып, журналистарға нимә тураһында яҙырға, ә нимәне яҙмаҫҡа ҡуша алмай. Матбуғат - дүртенсе власть тигән төшөнсә лә Көнбайышта барлыҡҡа килә түгелме? Шул уҡ ваҡытта редакция сәйәсәтенә ярашлы, теге йәки был мәғлүмәт ҡайһы бер ваҡытлы матбуғат сараларында донъя күрмәскә лә мөмкин. Америка Ҡушма Штаттарында һәм, ғөмүмән, Көнбайыш Европаның алдынғы дәүләттәрендә матбуғат менән дәүләт, матбуғат менән йәмғиәт, матбуғат менән шәхес араһындағы бәхәстәрҙе суд аша ғына хәл итәләр.

Илебеҙҙә иһә журналисты яуаплылыҡҡа тарттырып тормайҙар. Кемдәндер йәненә тейерлек материал донъя күрһә, уны йә үлтерәләр, йә йәнә сығырлыҡ итеп туҡмайҙар. Бына шундай хөкөм! Элегерәк - Дмитрий Холодов, Владислав Листьев, Юрий Щекочихин, Пол Хлебников, Анна Политковская, Анастасия Бабурова һәм башҡа бик күп журналистар үҙҙәренең профессиональ бурыстарын үтәгәне өсөн һәләк булғайны. Һуңғы миҫал - "Коммерсантъ" гәзитенең журналисы Олег Кашиндың билдәһеҙҙәр тарафынан туҡмалыуы. Был хаҡта яҙмаған һәм һөйләмәгән ваҡытлы матбуғат сараһы ҡалмағандыр. Ошо ваҡиғаға бәйле, журналистарға һөжүм иткән, туҡмаған, үлтергән өсөн яза сараларын көсәйтергә тәҡдим иттеләр хатта.

Әҡуптән түгел Интернетта Владислав Листьев исемендәге журналистар премияһын тапшырыу тантанаһында уның тәүге лауреаты Леонид Парфеновтың сығышы урынлаштырылды. Ул журналистарҙы һүҙ азатлығынан ситләшеүҙә, журналист булыуҙан туктауҙа ғәйепләп, ҡаты тәнҡитләне. Был сығыш телеэкрандарҙа күренмәне һәм уның күренеүе лә мөмкин түгел ине. Парфенов һүҙҙе тап тележурналистар хаҡында алып барҙы ла инде. Парфеновтың һығымтаһы ҡот осҡос: халыҡтың күп өлөшө журналистикаға (тимәк, журналистарға) мохтаж түгел. Журналистарҙы туҡмайҙар икән, әҙме ни беҙҙә туҡмалғандар, ниндәйҙер репортер арҡаһында нишләп шундай шау-шыу күтәрергә?! Миллионлаған кеше шуны аңламай: журналист үҙенең аудиторияһы өсөн тырыша. Журналисты бит яҙғаны, төшөргәне, йәки әйткәне өсөн түгел, ә уны уҡығандары, ишеткәндәре йәки күргәндәре өсөн туҡмайҙар. Был Парфеновтың һүҙҙәре.

Асылда, һүҙ азатлығы - ул кешенең үҙ уй-фекерҙәрен иректе рәүештә белдерә алыу хоҡуғы ғына. Телдәнме, әллә яҙма рәүештәме - уныһы бигүк мөһим түгел. Тын алыу, һауа һулау һымаҡ. Йәғни, кемдер үҙенең теге йәки был мәсьәлә буйынса тыуған фекерен урам уртаһына баҫып белдерһә, уны иҫәргә һанаясаҡтар. Ә инде ул үҙенең фекерен ниндәйҙер бер системаға һалып, асыҡтан-асыҡ яҙып нәшер итһә, ул журналист. Ғалимдарҙан айырмалы рәүештә, журналист бер ниндәй ҙә яңылыҡ асмай, язышынан айырмалы рәүештә, журналист бер нәмәне лә һүрәтләмәй. Ул бары тик халыҡтың, йәки йәмғиәттең бер өлөшөнөң уй-фекерҙәрен ишетергә, юҡ, ишетергә түгел, тойомларға, хәлторошон, кәйефен һиҙергә һәм ошо күҙәтеүҙәрен ҡағыҙға төшөрөргә генә һәләтле. Тик шул ғына.

**Таһир ИШКИНИН.**

---

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

## БЕҘГӘ - ГӘЗИТ...

### һеҙгә беҙ, уҡыусылар, кәрәк

**"Киске Өфө" - беҙҙең яратҡан баҫмабыҙ. Ошоға тиклем уның биттәрендә кәйефебеҙҙе боҙорлоҡ, ҡарашыбыҙҙы үҙгәртерлек бер ниндәй ҙә хилаф сығыштар уҡығаныбыҙ булманы. Был инде гәзиткә комплимент та, шулай уҡ ярамһаҡланыу ҙа түгел (ғөмүмән, беҙҙә ундай ғәҙәт юҡ). Ысын күңелдән әйтәбеҙ: беҙ "Киске Өфө"нө яратабыҙ!**

Беҙҙең быуын халҡыбыҙҙың ишандары, әүлиәләре тураһында бер нәмә лә белмәй үҫте. Улар тураһында беҙ "Киске Өфө" гәзите аша белдек. Икенсенән, ҡатын-ҡыҙҙарға, балаларға булған мөнәсәбәтегеҙ оҡшай. Һеҙҙең сабыйҙар менән осрашып фекерләшеүегеҙ, уларҙың серҙәрен сисә белеүегеҙ һоҡландыра. Бындай мәҡәләләр күңелдәребеҙҙе яҡтырта, гәзиткә яҡын итә. "Киске Өфө" егеттәре Әхмәр Үтәбай менән Таһир Ишкининдың журналислыҡ һәләте алдында баш эйергә әҙербеҙ. "Комар" рубрикаһында сыҡҡан хикәйәләрҙе лә бик яратып уҡыйбыҙ. Ҡорған диалог, монологтарығыҙҙа ялағайланмайһығыҙ, оҡшарға тырышып, кемделер маҡтамайһығыҙ, шундай философик әңгәмәләр ҡораһығыҙ. Гәзиттең үҙ фекере булыуы бик мәртәбәле. Шундай кешеләр менән осраштырып, башҡорт халҡының, республикабыҙҙың хәлен беҙгә еткереп торғанығыҙ өсөн айырыуса ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

Гәзиттең һуңғы битендә сыҡҡан төрлө-төрлө әйтемдәр, аҡыллы кешеләрҙең әйткән һүҙҙәрен, һығымталарҙы иң беренсе уҡыйбыҙ. Уҡыусылар шуларҙы ғына булһа ла уҡыһа, үҙенә бик ҙур файҙа алыр ине.

"Киске Өфө" - республикабыҙ, халҡыбыҙ өсөн ҙур бер ваҡиға. Гәзиттең халҡыбыҙ өсөн ваҡиға булыуын юғалтмағыҙ, үҙ йөҙөгөҙҙө, халҡыбыҙға хеҙмәт итергә тейеш кешеләрҙе икәнлегегеҙҙе бер ҡасан да уйығыҙҙан сығармағыҙ. Ә беҙ инде һәр ваҡыт һеҙҙең тоғро уҡыусығыҙ буласаҡбыҙ!

**Рауза һәм Вил КӘРИМОВтар.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Президенты "Өсөнсө йәштәге халыҡ университеты" айырым маҡсатлы республика программаһы эшләү тураһында Указ ҡабул итте. Уның маҡсаты - оло йәштәге кешеләрҙең йәшәү сифатын күтәреү һәм уларҙың хәҙерге йәмғиәткә яраҡлашыуы өсөн шарттар тыуҙырыу.

✔Республика Хөкүмәтенең сираттағы ултырышы Башҡортостандың төҙөлөш тармағы торошо, киләсәккә пландарҙы барлауға бағышланды. Билдәләнеүенсә, торлаҡ менән тәьмин ителеү буйынса бөгөн Башҡортостан Рәсәй субъекттары араһында 56-сы урынға ҡалһа, Волга буйы федераль округына ингән 14 төбәк араһында 12-се урынды биләй. БР Президенты Рөстәм Хәмитов был йүнәлештә иң тәү хәл ителергә тейешле мәсьәләләр араһында булған махсус программа эшләргә һәм тормошҡа ашырырға, төҙөлөшкә ер участкалары бүлеүҙе тәртипкә һалыу, төҙөлөш майҙансыҡтарын инфраструктура менән тәьмин итеү, социаль ипотеканы яйға һалыу кеүектәрен айырып билдәләне.

✔Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтында "Заманса белем биреү процесы: тәжрибә, проблемалар, перспективалар" тигән темаға Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы булып үтте. Унда илдең педагогик берләшмәләренән 550-нән ашыу вәкил ҡатнашты. Форумдың тап Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтында үткәрелеүе осраҡлы түгел, сөнки ул төбәк педагогтары өсөн алдынғы уҡыу-методик, фәнни үҙәктәрҙең береһе һанала. Уға мониторингтар үткәреү, методик һәм мәғлүмәти ярҙам күрһәтеү, инновацион тәжрибәгә һығымта яһау эштәре йөкмәтелгән.

✔4 декабрҙә "Айыҡ Башҡортостан" Республика йәмәғәт хәрәкәтен ойоштороу буйынса инициатив төркөм үҙенең тәүге йыйылышын үткәрә. Хәрәкәтте "Халыҡ айыҡлығы өсөн көрәш союзы" Халыҡ-ара йәмәғәт ойошмаһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡортостан рустары соборы Башҡарма комитеты, "Айыҡ Сибай", "Айыҡ Ишембай", "Айыҡ Нефтекама" ҡала йәмәғәт ойошмалары хуплай. Йыйылыш Нефтселәр мәҙәниәт һарайында 207-се офиста үтә. Бәйләнештәр өсөн телефон: 8-927-314-32-02.

✔"Живой журнал"да Көньяҡ Урал төбәгендәге иҡтисади мәсьәләләрҙе тикшереү буйынса блог асылды: http://zauralie.livejournal.com/. Интернет-ресурс төбәктә тупланған проблемаларҙы хәл итеү буйынса дискуссия майҙансығы булараҡ, аныҡ тәҡдимдәр һәм ыңғай инициативаларға өмөт итә.

КИРОВ РАЙОНЫНА - 75



**Баш ҡалабыҙҙың Киров районы рәсми рәүештә Өфө ҡала эшселәр, крәҫтиәндәр һәм ҡыҙылармееҫ депутаттары Советы президиумы ҡарары нигеҙендә 1935 йылдың ноябрендә барлыҡҡа килһә лә, был район биографияһының тәүге юлдары күпкә алдараҡ яҙыла башлай. Киров районы территорияһында урынлашҡан Өфө-II ҡаласығында барған тикшеренеү эштәре, мәҫәлән, бөгөн республикабыҙҙың баш ҡалаһының йәшен беҙҙең эраның VI быуатынан иҫәпләй башларға нигеҙ бирә. Ағиҙел буйында 1754 йылда нигеҙ һалынған ағас ҡәлғә - Өфө кремле лә хәҙерге Киров районы биләмәһендә була. Киров районы юбилейы уңайынан бер кәлимә һүҙ әйтеүҙәрен һорап, был районда хеҙмәт итеүсе һәм йәшәүсе бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек.**

# БАШ ҠАЛАНЫҢ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## республиканың йөрәге ул

**Ғәли ВӘЛИУЛЛИН, БР Милли музейының генераль директоры, Киров районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:** Киров районы Өфө өсөн генә түгел, ә Башҡортостан Республикаһы өсөн дә иң мөһим райондарҙың береһе. Былай тип әйтеүемдең сәбәбе шунда: баш ҡаланың тап ошо районында Президент хакимиәте, Хөкүмәт йорто һәм төп министрлыҡтар урынлашҡан һәм республикабыҙ халҡы өсөн мөһим булған ҡарарҙар тап ошо район территорияһында ҡабул ителә. Был райондың тағы ла бер мөһим үҙенсәлеге булып Киров районының юғары уҡыу йорттарына бай булыуы тора. Башҡортостандың юғары белем биреү системаһына нигеҙ һалыусы Уҡытыусылар институты ла был районда урынлаша. Бөгөн уның нигеҙендә барлыҡҡа килгән Башҡорт дәүләт университеты республикала иң алдынғы юғары белем биреүсе учреждениеларҙың береһе һанала. Әлеге ваҡытта Киров районында Башҡортостандың 10 дәүләт вузының 8-е урынлашҡан. Был районды башҡорт фәненең үҙәге тип атарға ла мөмкин, БР Фәндәр академияһы, ғилми-тикшеренеү, проект-конструкторлыҡ институттары һәм лабораториялары тотош төбәктең интеллектуаль кимәлен билдәләй. Шуның өсөн дә Киров районын Өфөбөҙҙөң һәм республикабыҙҙың йөрәге тип атарға мөмкин, сөнки был районда булған ваҡиғалар Башҡортостан халҡына туранан-тура йоғонто яһай.

Киров районында башҡорттарҙың һаны 26 мең тирәһе. Улар барыһы ла иле, республикаһы өсөн янып йәшәгән кешеләр. Һәр беребеҙ үҙенең йәшәү дәүерендә киләсәккә өмөт менән баға. Мин дә күп милләтле Рәсәйҙең киләсәге яҡты булыр, тормошобоҙ тағы ла күркәмләнер, тип ышанам һәм Киров халҡына тик изге теләктәр генә теләйем.

**Рәйес ИСМӘҒИЛЕВ, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры директоры:** Баш ҡаланың Киров районы тураһында һүҙ йөрөткәндә, уның ошо төбәктең быуаттар буйына туплана килгән рухи хазинаһын һәм мәҙәниәтен һаҡлаусы булып тороуын билдәләп китергә кәрәк. Ҡаланың тап ошо тарихи үҙәгендә Башҡортостандың мәғарифы, фәне, әҙәбиәте, сәнғәте үҙенең тәүге аҙымдарын яһаған, Шәйехзада Бабич, Ризаитдин Фәхретдинов, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мәжит Ғафури үҙенең ялҡынлы әҫәрҙәрен ижад иткән. Киров районы бөгөн дә республиканың мәҙәни һәм рухи тормошоноң үҙәге булып ҡала. Яҙыусылар союзы, өс театр, эре музейҙар, кинотеатрҙар, китапханалар ишеге ижади күңелле, сәнғәт менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн гел асыҡ. Башҡортостандың профессиональ театр сәнғәтенең барлыҡҡа килеүе Киров районында урынлашҡан М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры эшмәкәрлеге менән бәйле. Бөгөн ул баш ҡалаға ғына түгел, ә тотош республика халҡына уңышлы хеҙмәт итә.

**Гөлназ ӘХМӘҘИЕВА, М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы директоры:** Киров районы баш ҡаланың интеллектуаль үҙәге ул. Төрлө мәғлүмәттәргә ярашлы, тап Киров районында тәүгеләрҙән булып XVII быуатта гарнизон мәктәбе асылһа, ир-егеттәр өсөн тәүге губерния гимназияһы ла, Өфөләге тәүге ҡатын-ҡыҙҙар училищеһы ла, "Ғосмания" мәҙрәсәһе лә хәҙерге Киров биләмәһенә ҡарай. Бөгөн дә районда төрлө профилдәге уҡыу йорттары күп. Дөйөм белем биреүсе учреждениелар һаны - 19, уларҙа 14 меңгә яҡын уҡыусы белем ала. Баш ҡала райондары араһында беҙҙең уҡыусыларыбыҙҙың өлгәш күрһәткестәре юғарыларҙан һанала, мәктәпте тамамлаусыларҙың 96 проценты уҡыуын артабан вуздарҙа һәм колледждарҙа дауам итә.

Шуныһы ҡыуаныслы, райондың белем биреү учреждениелары селтәре йылдан-йыл киңәйә, яңы балалар баҡсалары, спорт мәктәптәре сафҡа инә. М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы ла Киров районында иң йәш белем усағы һанала.

Был районда һәр бер балаға, һәр хеҙмәткәргә, һәр етәксегә бик күп иғтибар бүленә һәм бында һәр кем аныҡ һөҙөмтәгә эшләргә күнеккән. Шуға ла районыбыҙҙың юбилейы алдынан өлгәшкән уңыштары күп, йөҙө яҡты. Беҙҙең уҡыусыларыбыҙ ҙа райондың юбилейына арналған төрлө конкурстарҙа ҡатнашты, быйылғы олимпиадаларҙа ла уңыштарыбыҙ юғары һәм фәнни эштәр буйынса ла алдынғылыҡты бирмәнек.

Райондың киләсәге яҡты булһын өсөн беҙ йәш быуынды заман талаптарына ярашлы тәрбиәләргә һәм белем бирергә тейешбеҙ. Шуға ла гимназия эшендә уҡытыу-тәрбиә эшен сифатлы башҡарыу ғына түгел, ә алдынғы алымдар, эш төрҙәре индерергә тырышабыҙ. Әлеге мәлдә "РОСТ" технологияһын индереү менән мәшғүлбеҙ, ул мәғлүмәти технологияларҙың бер йүнәлешен файҙаланып эшләгән, фәнни нигеҙгә ҡоролған технология. Икенсе бер яңылығыбыҙ - гимназияла бизнес клуб асып, унда уңышлы, алдынғы эшҡыуарҙарҙы йәлеп иттек. Ата-әсәләр, Йәш эшҡыуарҙар ассоциацияһы, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы был инициативаны күтәреп алды, улар ярҙамы менән уҡыусыларыбыҙ мәктәпте тамамлағанда үҙ эшен башларлыҡ кимәлдә эшҡыуарлыҡ буйынса белем дә алып сығасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Борондан ҡаланы биш әйбер: аҡыллы етәксе, ғәҙел хөкөмсө, оҫта ҡуллы табип, тулы һыулы йылға һәм ҙур баҙар биҙәй, тигән әйтем ҡалған. Быларҙан тыш, мәҙәниәт һәм мәғариф усаҡтары, дауалау учреждениелары, сәнәғәт предприятиелары, сауҙа үҙәктәре һәм, әлбиттә, ихлас халҡы менән дә бай баш ҡаланың йөрәге һаналған Киров районы.**

**Заманалар үҙгәргән һайын, ҡала ла танымаҫлыҡ булып яңыра, иҫке йорттар урынына замансалары барлыҡҡа килә. Шулай ҙа Өфөнөң тарихи үҙәгендә боронғо мөһабәтлеген һәм күркәмлеген юғалтмаған биналар һаҡлана әле. Ышанмаһағыҙ, Киров районы буйлап бер тапҡыр булһа ла йәйәүләп үтеп ҡарағыҙ. Тап ошо районда һәр эре мегаполис өсөн хас булған күп ҡатлы йорттар лабиринтында һәм шаулы автомагистралдәр ығы-зығыһында Өфөнөң ҡабатланмаҫ йөҙөн күрерһегеҙ һәм райондың юҡҡа ғына баш ҡаланың йөрәге тип аталмауына төшөнөрһөгөҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың мәктәпкәсә учреждениеларҙа урындар етмәү менән бәйле хәлде яҡшыртыу тураһындағы бурысын үтәү йөҙөнән Өфөлә балалары балалар баҡсаһына йөрөмәгән ғаиләләргә пособиелар түләнә башланы. Түләүҙәр заявка характерына эйә һәм 1 октябрҙән уны 400 самаһы ғаилә ала. Пособиеның күләме 3 мең һум тәшкил итә. 2011 йылға Өфө бюджетында 2 мең ғаиләгә аҡса түләү планлаштырыла.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары, Муниципаль милек менән идара итеү комитеты рәйесе Рәмил Дилмөхәмәтов журналистар менән осрашыуҙа ҡала биләмәһендәге хужаһыҙ объекттарҙы асыҡлау һәм уларҙы иҫәпкә ҡуйыу эштәре тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, әле Өфө биләмәһендә 23 хужаһыҙ объект асыҡланған.

✓ Өфө ҡала округы Рәсәй Федерацияһы субъекттарының административ үҙәктәре араһында үткән "V муниципаль берләшмәләр конкурсы"нда "Иң яҡшы муниципаль берләшмә" номинацияһында юғары дәрәжәләге диплом менән бүләкләнде. РФ Төбәктәр үҫеше министрлығы тарафынан үткәрелгән конкурста 71 субъекттан 450 муниципаль берләшмә ҡатнашты. Өфө ҡалаһы был сарала мәғлүмәтләштереү өлкәһендәге ҡаҙаныштарын күрһәтте. Ҡаланың рәсми сайты, "Берҙәм регистратура" системаһы, шулай уҡ өфөләләрҙең Интернет селтәрендәге әүҙемлеге - быларҙың барыһы ла еңеүҙең нигеҙен тәшкил итте. Ҡатнашыусылар һәм 1-се дәрәжәләге диплом менән бүләкләнеүселәр араһында Октябрьский ҡалаһы ла бар.

✓ 8 декабрҙә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында йәмәғәт ойошмаһы - халыҡ мәғарифына булышлыҡ итеүсе "Аҡтамыр" башҡорт үҙәгенең ойошторолоуына 15 йыл тулыу айҡанлы тантаналы йыйылыш үткәрелә. Башлана 15 сәғәттә.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡалала гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы барышы тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, әлеге көнгә Өфөлә барлығы 169212 дана төрлө баҫмаларға яҙылғандар.

✓ Стәрлетамаҡта Башҡорт драматургияһы республика фестивале дауам итә. Был сараны М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" спектакле менән асты. Республиканың баш театры фестивалдә тағы ла "Хыялый" (С. Әбүзәр) спектаклен дә күрһәтәсәк.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАШ ҠАЛАБЫҘ ЙӨҘӨНДӘ...

## силтәр иғтибарын йәлеп итерлек ҡомартҡылар бар

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов Стамбул ҡалаһында урындағы властарҙың "Планлаштырыу һәм ҡала трансформацияһы" II Евразия конгресында ҡатнашып, Өфө ҡалаһының тарихи мираҫын һәм үҙенсәлеген һаҡлау тураһында доклад менән сығыш яһаны.**



25 илдән бөтәһе 800 кеше ҡатнашҡан был форумда Рәсәйҙең миллиондан ашыу халыҡ йәшәгән 10 ҡалаларының береһе булған Өфө тураһындағы сығыш айырыуса ҡыҙыҡһыныу уятҡан. Доклад яһаусы тыңлаусыларҙың иғтибарын Өфөнөң уникаль географик урынына, унын боронғо ҡомартҡыларына йүнәлтә. Ҡаланың көньяҡ-көнбайыштан төньяҡ-көнсығышҡа 40 километрҙан ашыу һуҙылыуы, 71 мең гектар территорияны биләүен билдәләй.

- Хәҙерге Өфө территорияһында 70-тән ашыу төрлө дәүер археологик ҡомартҡылары табылды, тарихы мең ярым йылдан ашып киткән мәҙәни ҡатламы булған уникаль Өфө II ҡаласығы ла шулар иҫәбенә инә. XIX быуатта төҙөлгән Дворяндар йыйыны бинаһы, Мариинск ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы, Дәүләт банкы, Ҡала думаһы һәм "Метрополь" ҡунаҡханаһы һаҡлана, бөгөнгө көндә был биналарҙа дәүләт учреждениелары, йәмәғәт ойошмалары, уҡыу йорттары, сауҙа предприятиелары урынлашҡан. Улар ҡаланың төп ҡомартҡыһы булып тора һәм дәүләт тарафынан һаҡлана, - тип билдәләп үтә Сынтимер Биктимер улы.

Унын сығышында шулай уҡ баш ҡала округы хакимиәтенең заманса милли төҙөлөш үҫешенә лә ҙур иғтибар бүлеүе тураһында әйтелә. Был урында, әлбиттә, Өфөнөң иң иҫтә ҡалырлыҡ һәм үҙенсәлекле заман проекты булған Конгресс-холл бинаһы телгә алына. Конгреста ҡатнашыусыларҙа Өфө ҡалаһының көньяҡ һөҙәгендә Дуҫлыҡ монументы менән милли геройыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәлен бер мәҙәни-тарихи композицияға берләштергән архитектур-ландшафт комплексы булараҡ төҙөлгән Конгресс-холл республиканың визит карточкаһы булып китеүе, унын япон архитекторы - Башҡортостандан сыҡҡан Ришат Муллагилдин проекты буйынса төҙөлөүе һәм архитектура сиселеше буйынса уға тиңдәр булмауы тураһындағы мәғлүмәт тә ҡыҙыҡһыныу уятҡан.

Сынтимер Баязитов форумда ҡатнашыусыларҙы шулай уҡ Өфөнөң Ислам мәҙәни-белем биреү үҙәге - "Ләлә" мәсет-мәҙрәсәһе менән таныштыра, тиҙҙән Салауат Юлаев проспектында барлыҡҡа киләсәк республикала һәм Рәсәйҙә иң ҙур собор мәсете тураһында ла һөйләп үтә.

- Ҡала үҙенсәлеген һаҡлауҙа һәйкәлдәр ҙур роль уйнай, - ти ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары. Улар араһында башҡорт халҡының милли батыры С.Юлаев һәйкәле киң билдәләләрҙән һанала. Был һәйкәл күптән инде Өфө ҡалаһының визит карточкаһы һәм Башҡортостандың рәсми символына әүерелде.

Өфөлә мәҙәни традицияларҙы һәм халыҡ ижады үҙенсәлектәрен һаҡлау өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған, тип билдәләп үтә Сынтимер Баязитов. Бында 30-ға яҡын милли-мәҙәни үҙәктәр ойошторолған, уларҙа төрлө милли байрамдар уҙғарыла. Форумда ҡатнашыусылар бигерәк тә Халыҡ-ара фестивалгә әҙерләнеү сиктәрендә Анкарала төрөк бейеүен ҡуйған "Мираҫ" фольклор бейеү ансамбле тураһында һөйләгәндә ҡыҙыҡһынып ҡабул иткән.

- Ҡаланың үҙенсәлекле тарихи йөҙөн булдырыу Өфөнөң тарихи ҡомартҡы һәйкәлдәрен һаҡламайынса мөмкин түгел, - тип билдәләп үтә докладсы. - Өфөнөң тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡыларын һаҡлау тематикаһы бик актуаль. Был йүнәлеш буйынса ҙур эш алып барыла. Яңы объект төҙөлөү менән бер рәттән, ҡаланың үҙәк өлөшөндә архитектура ҡомартҡыларын тергеҙеү һәм яңыртыу, шулай уҡ мәҙәни мираҫ исемлегенә ингән объект фасадтарына капиталь ремонт үткәреү буйынса ҙур эштәр алып барыла.

Сынтимер Биктимер улы шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан Өфө ҡалаһы ҡала округы территорияһында ҡурсаулыҡ мөйөштәре һәм йөҙлөктәре һырлап эшләнгән өйҙәрҙе тергеҙеп, ағас төҙөлөшө музейы төҙөү буйынса бойороҡ ҡабул ителеүен, бөгөнгө көндә буласаҡ экспонаттарҙы тикшереү һәм фотоға төшөрөү буйынса эштәр алып барылыуы, музейҙың ҡала төҙөлөшө һәм архитектура концепцияһы эшләнеүе тураһында ла әйтеп үтә.

**Алик ШАКИРОВ.**
**"Башинформ".**

ҺОРАУ-ЯУАП

### ЭШЛӘЙ БИРЕГЕҘ

**Икмәк бешереүсе булып эшләйем, эш хаҡым бәләкәй, шуға ошонда уҡ иҙән дә йыуам. Документтарым тәртиптә. Яңыраҡ ике урында эшләү тыйыла, тип ишеттем, шул дөрөҫмө?**

- Ике урында эшләүегеҙ хаҡында документтарығыҙ тәртиптә, тип яҙаһығыҙ. Эш биреүсегеҙҙән дәғүәләр юҡ, шулай булғас, бер ниҙән дә ҡурҡмай, эшләй бирегеҙ.

### ЯРҘАМ ТЕЙЕШ

**Мин яңғыҙ әсә, ике балам бар, ауылда иҫке өйҙә йәшәйем, мейес ягабыҙ. Утынға, утҡа, балаларға мәктәптә тукланыуға ниндәйҙер ташламалар тейешме миңә?**

- Һеҙгә район социаль яҡлау идаралығына мөрәжәғәт итеү урынлы булыр, сөнки коммуналь хеҙмәттәргә, тукланыу продукттары һәм кейемгә матди ярҙам күрһәтелергә тейеш. Балаларығыҙға мәктәптә тукланыу буйынса ла ниндәйҙер ташламалар ҡаралған. Райондың социаль яҡлау идаралығы һәм район хакимиәте башлығына яҙма рәүештә мөрәжәғәт итегеҙ. Йә булмаһа, унда ҡабул итеү көнөндә барығыҙ һәм үҙегеҙҙең ауыр матди хәлегеҙҙе аңлатығыҙ, ярҙам һорағыҙ. Ә инде бер ниндәй ҙә яуап алмаһағыҙ, район прокуратураһына мөрәжәғәт итегеҙ.

### ЕЙӘНЕГЕҘ - МИЛЕКСЕ

**Улым балалы бер ҡатынға өйләнде. Баланы уллыҡҡа алды, үҙенең фамилияһын биреп, уны беҙҙең фатирҙа теркәтте. 2003 йылда фатирҙы хосусилаштырҙыҡ. Улым менән ирем үҙ өлөшөнән баш тарттылар, уллыҡҡа алынған ейән менән мин милексе булып ҡалдыҡ. Һигеҙ йылдан улым ҡатыны менән айырылышты, малай өсөн алимент түләй, бергә йәшәмәйҙәр. Туғаным булмаған был ейәндән суд аша фатирҙы үҙемә генә яҙҙыра аламмы?**

- Беренсенән, хосуслишатырыуҙан һуң ете йыл үтеп киткән - һеҙ кәрәкле булған ваҡытты юғалтҡанһығыҙ. Икенсенән, хосусилаштырыуға ризалыҡ биреп, ейәнегеҙҙе лә фатир милексеһе итеп танығанһығыҙ. Шулай булғас, унын өлөшөн тартып алыу мөмкин түгел.

### ӨЙҘӨҢ ЯРТЫҺЫ -ҺЕҘҘЕКЕ

**15 йыл элек ирем менән айырылыштыҡ, ул өйҙән сығып китте. Йортобоҙҙо бергә йәшәгән саҡта һалдыҡ, уға яҙҙырылған. Мин ошонда теркәлгәнмен. Хәҙер килеп, элекке ирем йортҡа дәғүә итә. Был осраҡта минең ниндәй хоҡуктарым бар?**

Бергә йәшәгәндә төҙөлгән йортҡа икегеҙ ҙә милексе, өлөштәрегеҙ тигеҙ - 1/2, шуға күрә элекке ирегеҙ үҙ өлөшөнә дәғүә итә ала. Әгәр йортта үҙегеҙ генә йәшәгән йылдарҙа һиҙелерлек үҙгәрештәр эшләгән булһағыҙ (мәҫәлән, ҡыйыҡты алмаштырыу, йылылыҡ һәм һыу үткәреү, ер өсөн түләнгән һалым һ.б.) - былар бөтәһе лә иҫәпкә алына. Хаҡ ҡуйыусыны саҡыртып, башҡарылған эштәргә баһа ҡуйҙырығыҙ, шул саҡта суд тәртибендә элекке ирегеҙҙән хаҡтың яртыһын түләтә алаһығыҙ. Шулай уҡ суд аша торлаҡтың яртыһына үҙегеҙҙең милекселек хоҡуғын таныуҙы талап итергә хаҡығыҙ бар, юғиһә, ирегеҙ өйҙө һатып ебәрергә лә мөмкин. Йортҡа арест һалдырып, судҡа бирегеҙ. Әгәр элекке ирегеҙ үҙ өлөшөн һатырға ниәтләһә, закон буйынса иң тәүҙә уны һеҙгә һатып алырға тәҡдим итергә тейеш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

# Белеп ашаһаң - аҙыҡ та дауа



❖ **Эремсек** - атеросклероз, бауыр, йөрәк ауырыуҙарына ҡаршы яҡшы дауа.

❖ Көн һайын 5-6 бөртөк **йөҙөм**, 1-2 сәтләүек, 5 грамм сыр ашап торһаң, хәлһеҙлек бөтә, баш, йөрәк ауырыуҙары булмай, үҙәк нервы системаһының тонусы күтәрелә.

❖ **Балыҡ аштары**, бигерәк тә суртан балығы һурпаһы хәлһеҙ кешеләр өсөн файҙалы.

❖ **Тауыҡ ите**, унын һурпаһы көс бирә.

❖ Ярты стакан ҡыҙыл сөгөлдөр һәм 1 алма, ярты лимон һутын һығып, ярты балғалаҡ зәйтүн майы өҫтәлгән һут **бауыр таҙартыу өсөн** яҡшы.

❖ Әле генә һауып алынған **һыйыр һөтөн** көн дә яртышар стаканлап эсһәң, тын ҡыҫылыу бөтә.

❖ Көнөнә 6 тапҡыр яртышар стакан **ер еләге** ашау бауыр үтендә булған ваҡ таштарҙы ҡыуып сығарып бөтә.

❖ **Алма** подагра, ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай.

❖ **Ҡара миләш** боғаҡ (зоб) сирен булдырмай. Бынын өсөн миләште 1:1 бал йәки шәкәр ҡомо менән болғатып, көнөнә 1-әр балғалаҡлап ике тапҡыр ашарға. Был ҡан тамырҙары өсөн һәм юғары ҡан баҫымын төшөрөү өсөн дә ҡулланыла.

❖ **Мүк еләге** әселеге түбән гастрит ваҡытында яҡшы дауа.

❖ **Манный бутҡаһы** ашҡаҙан юлдары, һөйәктәр өсөн файҙалы.

❖ **Гипертония башланып торғанда** лимон, әфлисун ашаһаң, ауырыу аҙып китмәҫ. Был емештәр ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуҙары, лимфа биҙҙәре ҙурайып киткәндә лә ярҙам итә. Лимонды тышы менән ит турағыстан үткәргәс, бал йәки шәкәр ҡушып болғатырға һәм көнөнә 1-әр балғалаҡлап 3 тапҡыр ашарға.

❖ **Шәкәр диабетынан яфаланыусыларға:** 1 баш һуғанды ҡабығы менән 2 стакан һыуҙа бешергәс, ҡабығынан таҙартып, ебетеп йомшартылған 1-2 ҡалаҡ фасоль, һарымһаҡ, сельдерей ҡушып аш бешереп ашарға.

❖ **Бөтә ауырыуҙарға ла ҡаршы файҙалы бутҡа:** ярты стакан һөткә ҡырғыстан үткәреп ике кишер, 2 ҡалаҡ ҡарабойҙай ярмаһы, әҙ генә май һалып, ҡайнар хәлгә еткергәс, ябып торорға һәм ашарға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Туғыҙынсы өгөт

Бер-берегеҙгә көнләшмәгеҙ һәм асыуланмағыҙ. Һүҙ үлсәшмәгеҙ, бер-берегеҙҙән айырылышмағыҙ. Асыулы ваҡытта үҙ-үҙегеҙҙе тота белегеҙ, золом итеүҙән, ике йөҙлөктән һәм һаранлыҡ ҡылыуҙан һаҡланығыҙ. Ялған, ғәйбәт һәм ялған һүҙ һөйләмәгеҙ. Һүҙ йөрөтмәгеҙ. Вәғәҙәгеҙгә киреһен эшләмәгеҙ. Аманатҡа хыянат итмәгеҙ. Мөьмин ҡарындаштарығыҙҙы, бигерәк тә үлгәндәрен һүкмәгеҙ. Һис кемгә ләғнәт ҡылмағыҙ һәм кафыр тип әйтмәгеҙ. Яман уйлы булмағыҙ һәм кеше көлдөрөр өсөн һүҙ һөйләмәгеҙ. Белештәрегеҙ һәм белеш түгелдәрҙең бөтәһенә сәләм бирегеҙ. Яҡын ҡарындаштарығыҙҙан айырылмағыҙ, фәҡирҙәргә яҡшылыҡ итегеҙ. Халыҡ йоҡола саҡта һеҙ ваҡыты-ваҡыты менән намаҙ уҡығыҙ һәм үҙегеҙ, ата-әсәләр, әбей-бабайҙар, туғандар, ирҙәр һәм ҡатындығыҙ һәм шулай уҡ ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр киләсәк нәсел-нәсәптәрегеҙ өсөн иман менән донъянан китеүҙәре өсөн доға ҡылығыҙ. Ҡабул булһа ла, булмаһа ла, доға ҡылыу һәм Аллаһы Тәғәләгә ялбарыу ғибәҙәттер. Шуның өсөн даими доға ҡылығыҙ, бигерәк тә күңел һыныҡ ваҡыттарҙа файҙаланығыҙ. Ләкин үҙегеҙ менән Йәнәб-и Аллаһ араһына һис бер кешене аралаусы тип ҡуймағыҙ. Һәр кәрәккән нәмәне Аллаһы Тәғәләнән дөрөҫ итеп, үҙ телегеҙ һәм ихлас күңел менән һорағыҙ. Ихлас ҡылынған доғалар бөгөн булмаһа, бер көн ҡабул булыр. Быны иһә шөбһәһеҙ дөрөҫ белегеҙ.

## Унынсы өгөт

Үҙ-үҙен белеүсе һәм киләсәк көнө өсөн ғәмәл итеүсе кеше зирәктер. Диндән иң элек юғаласаҡ нәмә аманат һәм иң һуң юғалтыласаҡ нәмә намаҙҙыр. Намаҙ юғалған ваҡыт килһә:"Иннә лилләһи үә иннә иләйһи ражиғүн", - ваҡыты еткән булыр.Диндә иғтидарлы булыу менән күркәм холоҡ монафиҡтарҙа күренмәҫ. Донъя рисвайлығы әхирәт рисвайлығынан, әлбиттә, еңелдер. Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыу хикмәт нигеҙелер. Балаларына мал йыйып та Аллаһы Тәғәлә алдына фәҡир барған кеше бәхетһеҙҙер. Уҫаллыҡтан ҡайғырыу һәм яҡшылыҡ өсөн һөйөнөү мөьминлек билдәһелер. Ризыҡтарҙы тупраҡ аҫтынан эҙләмәгеҙ (һабан һөрөп, ашлыҡ сәсегеҙ, Урал тауҙарына барып, тимер, алтын һәм аҫыл таштар ҡаҙығыҙ, уларҙы ҡаҙып ала белеү өсөн асылған мәктәптәргә инеп уҡығыҙ). Аллаһы Тәғәлә биргән дәүләтте балаларығыҙ һәм ғаиләгеҙҙе тәрбиә итеү өсөн ҡыҙғанмағыҙ. Һәр ваҡыт сәләмәт булам, тип уйлау үҙе аурыуҙыр. Ҡурҡаҡ сауҙагәр мәхрүм булыр. Үлем хәле ауыр булһа ла үлемдән һуңғы хәлгә ҡарағанда еңелдер. Халыҡтарҙы ямандарға ниәт итһәгеҙ, үҙ хәлегеҙҙе тәҙәтегеҙ. Фарыҙҙарҙы үтәмәйенсә нәфил-ғибәҙәттәр менән мәшғүл булығыҙ. Серегеҙҙе һаҡлау ваҡыты үҙегеҙҙең ихтыярығыҙҙалыр. Бер-берегеҙ менән дуҫ булығыҙ һәм ҡатнашығыҙ. Ләкин күрше булып йәшәргә тырышмағыҙ. Кескенә хәҫрәттәрҙе ҙур күрмәгеҙ, белмәгән нәмәләрҙе "Белмәйем", - тип әйтә белеүҙән баш тартмағыҙ. Ялған шәһәҙәт бирмәгеҙ, хаҡығыҙ юҡ нәмәләрҙе дәғүә итеп алмағыҙ. Аллаһы Тәғәләнең нигмәттәренә шөкөр һәм ҡайһы ваҡыт биргән бәләләренә сабыр итегеҙ. Йәнәб-и Аллаһтың рәхмәте сабыр ҡылыусыларға икәнде онотмағыҙ.

(Дауамы бар).

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

**Аҙна башында башҡорт халҡының бөйөк "Урал батыр" эпосын яҙып алыуға 100 йыл тулыуға арналған "Урал батыр" һәм донъя халыҡтарының рухи мираҫы" Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы үтте. Форумға Өфөнән, республика ҡалаларынан, Татарстандан, Төмәндән, Новосибирскиҙан, Таулы Алтайҙан, Абхазиянан һәм Германиянан ғалимдар йыйылды. Сарала барлығы 300-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. Бөгөн гәзит уҡыусыларға конференция ҡунаҡтарының фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

# "УРАЛ БАТЫР" ТУРАҺЫНДА...

## һүҙ әйтергә килгән халыҡтар

### Себерҙәр һөйләй

**Евгения КУЗЬМИНА, филология фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Себер бүлеге институтының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре:**

- Өфөлә беренсе тапҡыр булыуыма ҡарамаҫтан, ул миндә әйтеп аңлатҡыһыҙ тойғолар ҡалдырҙы. Әлбиттә, ҡала менән тулыһынса танышып булманы, ләкин ҡала тураһындағы фекерҙәрем кешеләр менән аралашыу аша тыуҙы. Бында халыҡ иҫ киткес һөймәлекле, алсаҡ, ҡунаҡсыл һәм һәр кемдә үҙ ере, үҙ халҡы өсөн ғорурлыҡ тойғоһо йәшәй. Был шунда уҡ күҙгә ташлана.

Килгәс, бындағы түбән һауа температураһы шарттарында үҙемде нисек тойормон икән, тип борсолғайным. Һеҙҙә лә беҙҙәге кеүек Себер һыуығы икән, шундай уҡ боҙлауыҡ. Урамда халыҡтың йөҙөнә ҡарармын тигәйнем, аяҡ аҫтына ғына ҡарап йөрөргә тура килде.

Килгән көндө Милли музейға экскурсияға алып барҙылар. Бик ҙур музей һәм ул экспонаттарға бик бай. Экскурсия үткәреүсе шул тиклем ихласлап һәм ентекләп таныштырҙы, ирекһеҙҙән теге йәки был нәмә менән ҡыҙыҡһына башлағанды һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Фәһемле, файҙалы экскурсия булды, республика халҡы мәҙәниәтенең, көнкүрешенең бер өлөшөн үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек.

"Урал батыр" һәм донъя халыҡтарының рухи мираҫы" тип аталған конференция эшенә килгәндә инде, ул бик ойошҡан һәм ғилми сара рухында үтте. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең фольклорсылар, этнологтар, лингвистар, телселәр, философтарҙың тикшеренеүҙәренә айырым иғтибар бүлеүе һиҙелеп тора. "Урал батыр" эпосын ЮНЕСКО-ның ауыҙ-тел ижады һәм матди булмаған ҡиммәттәре исемлегенә индереү буйынса эш алып барылыуы ла ҡыуандыра. Был бик дөрөҫ. Беҙгә тиклем килеп еткән, йәшәгән һәм бөгөн халыҡтың ғорурлығы булып торған һәр эпос ҡиммәтле ҡомартҡы булырға хоҡуҡлы. Элекке Союз халыҡтарының эпик ҡомартҡыһы, уларҙы өйрәнеү, баҫтырыу һәр саҡ көн үҙәгендә торасаҡ. Һәр эпос - халыҡтың нәфис әҙәбиәтенең иң юғары кимәле. Ул үҙендә башҡа фольклор жанрҙарын туплай, тап эпоста халыҡтың өмөтө, күңел торошо сағыла. Шуға эпосты өйрәнгәндә уны халыҡтың тарихы, этнографияһы, психологияһы сағылдырылған монументаль әҫәр тип баһаларға кәрәк. Тап шуға күрә яҡуттарҙың "Олонхо" эпосы ЮНЕСКОның рухи мираҫы исемлегенә индерелде. "Урал батыр" ҙа шундай уҡ танылыу алырға хоҡуҡлы. Былдай форумдар үткәреү - йәмәғәтселектең иғтибарын тағы бер тапҡыр ошо проблемаға йүнәлтеү ҙә ул.

Дөйөм алғанда, бөтә эпостарҙа ла бер уртаҡ һыҙат бар: батырҙар үҙ халҡының бәхете, уның ихтыяжы өсөн көрәшә. Уларҙың характер һыҙаттары, хәрби рухы, донъяла ғәҙеллек булдырырға тырышыуы оҡшаш.

Был ғилми-ғәмәли конференцияла Өфөлә Урал батыр майҙанын булдырыу тураһында һүҙ күтәрелде. Әгәр халыҡ теләй икән, ул буласаҡ. Бәлки, сираттағы конференцияға килгәндә, беренсе нәүбәттә беҙҙе тап шул майҙанға алып барырҙар һәм унда эпос образдарының статуэткаларынан хасил булған скульптура һәйкәле ҡаршы алыр. Әлбиттә, был еңел һәм осоҙло эш түгел, әммә мөңгелек.

### Ә абхаздар шулай ти...

**Зураб Джот улы ДЖАПУА, филология фәндәре докторы, Абхаз Фәндәр академияһының Д. И. Гулиа исемендәге Абхаз гуманитар тикшеренеүҙәр институты директоры урынбаҫары:**

- Икенсе дәүләтте, икенсе климатты, атмосфераны күреүемдән һаман хисләнеп йөрөйөм. Өфөгә беренсе тапҡыр килеүем, һәм баш ҡала менән бер рәттән, быйыл беренсе тапҡыр ап-аҡ ҡар күрҙем. Быны үҙенә күрә яҡшылыҡтың бер символы тип уйлайым. Абхазияла 20 градус йылы, бында, киреһенсә, ҡыш. Әммә халҡығыҙҙың, кешеләрҙең күңел йылылығы ҡар һалҡынын оноторға мәжбүр итә. Шундай ихлас, алсаҡ халыҡ йәшәй бында. Тәүге тапҡыр булһам да, Башҡортостан минең өсөн бик яҡын һәм ҡәҙерле. Беҙҙең территорияла һуғыш тамамланғандан һуң Абхазияның беренсе Президенты Владислав Григорьевич Ардзуба етәкселегендәге рәсми делегацияны беренселәрҙән булып ҡабул иткән һәм хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөгән дәүләт ул Башҡортостан. Был беҙҙең өсөн бик ҙур яҙҙам һәм терәк, һеҙҙең беренсе Президентығыҙ Мортаза Рәхимовтың ҡаһарманлығы булды.

Эпосҡа килгәндә, ул - халыҡтың ғорурлығы, халыҡтың рухи тарихы. Абхазияның халыҡ шағиры Мушни Ласуриа башҡорт эпосын абхаз теленә тәржемә итте. Ул айырым китап булып сыҡманы, шулай ҙа тиҙҙән, Ласурианың нәшер итергә әҙерләгән биш томлыҡ ижады араһында "Урал батыр" эпосының тәржемәһе лә булыр, тип көтәбеҙ. Ә өҙөктәре "Сухум" тип аталған һәм халыҡ шағиры үҙе мөхәррирҙәш булған журналда баҫылып сыҡты. Халыҡ "Урал батыр" эпосы менән таныш, уҡый, яҡшы ҡабул итә. Ошо конференцияның һуң нарт эпосын һәм башҡорт эпосын текстологик кимәлдә ныҡлап тикшерергә тигән ҡарар ҡабул иттем. Сөнки нарт эпосы абхаздарҙыҡы ғына түгел, уның нигеҙендә нарт, абхаз, даг, осетин, ҡарасәй-черкестарҙың эпик мираҫы ята. Һәм уның башҡорт эпосы менән оҡшашлыҡтары ла бар.

Эпос - ул һәр халыҡтың фольклорының бер өлөшө. "Урал батыр" - фольклорҙы ла, тарихты ла үҙ эсенә алған эпос. Шуға ла уны донъяның классик әҙәби мираҫы исемлегенә индереү дөрөҫ булыр ине, тип һанайым. Ул быға хаҡлы.

**Зәйтүнә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ҺИЖРИ ИҪӘП МЕНӘН...

## яңы йыл башланды!

**7 декабрь һижри иҫәп менән Яңы 1432 йыл башлана. Мосолман календары буйынса һәр яңы йыл алдағы йылдан 11 көнгә алдан башлана. Быйыл мосолман Яңы йылы донъяуи Яңы йылдан тик өс аҙна ғына алдан башлана. Мосолмандарға яңы йылды нисек үткәрергә кәрәк?**

- Һижри иҫәп буйынса Яңы йыл Ҡөрьәнгә нигеҙләнгән, һәм һәр мосолман уны тайпылышһыҙ үтәргә тейеш. Шулай ҙа мосолман өсөн яңы йыл башланыуы түгел, ә тәүге ун көнө - изгеләрҙән-изге һаналған Мөхәррәм айы башланыуы ҙур мәғәнәгә эйә.

Мөхәррәм - ай дауамы буйынса мосолманға төрлө бәхәстәргә инергә тыйылған дүрт айҙың береһе, был ай тәүбә һәм ғибәҙәт айы. Һәр мосолман был айҙы күберәк ғибәҙәттә үткәрергә тейеш, тип һанала. Мосолмандарҙа Яңы йылды ҙурлап үткәреү ҡабул ителмәгән, шулай ҙа был көндә ураҙа тотоу яҡшы һанала, сөнки ураҙа тән өсөн генә түгел, ә йән дауаһы ла. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шундай һүҙҙәре бар: "Мөхәррәм айының бер көнөндә ураҙа тотоусыға 30 көн ураҙа тотҡан кеүек сауап яҙыла".

Бынан башҡа, шундай ышаныу ҙа бар: кеше йылдың беренсе айын нисек уҙғара, ҡалған ун бер айы ла шулай уҡ уҙасаҡ.

ТАРИХ ҺАБАҠТАРЫ

# БАШҠОРТ ШӘЙЕХЕ ЗӘЙНУЛЛА РӘСҮЛЕВ "ЭШЕ",

## йәғни Батша хөкүмәте һәм суфыйсылыҡ

1872 йылдың 8 июнендә Ырымбур генерал-губернаторынан ҡәтғи күрһәтмә килеп төшкәндән һуң Диниә йыйылышы З. Рәсүлев "тәғлимәте" һәм унының эшмәкәрлеген ҡабаттан тикшерә башларға мәжбүр була, әммә был юлы ла берниндәй ҙә язықлыҡ һәм яңы мәғлүмәт таба алмайҙар. Мөфтөй Сәлимгәрәй Тевкелев, батша армияһының элекке офицеры, махсус дини белеме булмағанлыҡтан, үҙенә буйһонған имам Әфтәх Исхаҡов һымаҡ, яңы "тәғлимәттең" ысын фәлсәфәүи асылын тәрәндән өйрәнеп тормай. Һәр хәлдә, ул урындағы властарға, әгәр кәрәк тип тапһалар, З. Рәсүлевты имам вазифаһынан бушатырға һәм унының артынан полиция күҙәтеүе булдырырға тәҡдим итә һәм шуның менән сикләнеүҙе хуп күрә. Ләкин Ырымбур генерал-губернаторы мөфтөйгә генә таянып ҡалмай, ә "эште" тикшереүҙе шәхсән үҙе ойоштора. Үҙ ҡарамағында айырым поручениелар буйынса эшләүсе чиновник Жоховскийға эште Верхнеуральский һәм Златоуст өйәҙҙәре исправниктары менән берлектә тикшереү бурысын ҡуя. Улары үҙҙәренә ярҙамға Зәйнулла шәйехтең дошмандары - әлеге лә баяғы имам Ә. Исхаҡов менән Силәбе өйәҙе Әйбәт ауылы башҡорто Әбдел-Мәжит Әбделхәкимовты йәлеп итә.

З. Рәсүлевтың "ғәйебен" иҫбатлау өсөн тағы ла элекке суфыйҙар тәркөмөнөң урындағы күренекле вәкилдәренең береһе - Стәрлетамаҡ ҡалаһы ахуны Камалетдин Нагаев (1808-1890) та йәлеп ителә. Ул үҙ фекерен Силәбе өйәҙенең "баш" муллаһы һәм Сарҙаҡлы ауылы муллаһы - урындағы иң абруйлы ишан Әбдел-Хәким Ҡорбанғәлиев (шул уҡ Ҡорманғәлин, 1809-1872) фекеренә таянып, нығытып ҡуя. Тап Ҡорбанғәлиев З. Рәсүлевтың суфыйсылыҡ йүнәлешендә тәүге остазы (мөршид) һәм 1860 йылда уны Нәҡшбәндиә тәриҡәтенә арнау йолаһын башҡарыусы була. Ҡ. Нагаев һүҙҙәре буйынса, унының һымаҡ уҡ Нәҡшбәндиә-Муджаддиә ғилеме вәкиле булараҡ, Ә.-Х. Ҡорбанғәлиев мөритенең "хаҡ юлдан" тайпылыуы сәбәпле, "әсенеүле" үкенесен белдерә. Был ике абруйлы рәсми мулла һәм шәйех ғөмүмән суфыйсылыҡты тәнҡитләмәһә лә, был юлда уның ҡазана барған дәғүәселәре Зәйнулла ишан индергән бәғзе "яңылыҡтар" (иң әүәл ҡысҡырып зекер әйтеүҙе) ҡабул итмәйҙәр. Был, улар фекеренсә, ысын ислам ғилеменә ҡаршы килә, сөнки ул Ҡөрьән тарафынан нигеҙләнмәгән.

Ҡайһы бер полиция чиндары З. Рәсүлев "эшенә" сәйәси төҫ бирергә лә маташа. "Көслө һәм батыр халыҡ", өстәүенә урыҫ властарына ҡаршы "болаларҙа", "казак ҡоралы" менән эш итеү тәжрибәһенә эйә булған Верхнеуральск өйәҙенең Ҡатай һәм Бөрйән улыстары башҡорттары араһында рухи юлбашсы һәм ойоштороусы булараҡ һүрәтләй улар шәйехте. Ләкин айырым поручениелар чиновнигы Жоховский һәм унының ҡайһы бер хеҙмәттәштәре З. Рәсүлев исеменә таһланған сәйәси гәйепләүҙәрҙе нигеҙһеҙ, тип таба.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, З. Рәсүлев "тәғлимәтенең" тап "хөкүмәткә ҡаршы" үҙенсәлеге тураһында тезис генерал-адъютант Н. А. Крыжановскийҙа теләктәшлек таба. 1872 йылдың 25 сентябрендә эске эштәр министрына яҙған ошаҡ хатында ул З. Рәсүлев һәм унының фекерҙәштәренең "мосолмандарға урыҫтар менән бер ниндәй мөнәсәбәттә лә булмаҫҡа һәм, ғөмүмән, уларға яҡын да юламаҫҡа" өндәүҙәренә айырым баҫым яһай. Генерал-губернатор башҡорт шәйехенең "яңы дини тәғлимәте"н бик өҫтән-мөҫтән генә һүрәтләй. Унын һүҙҙәре буйынса, З. Рәсүлев һәм унының эйәрсәндәре "намаҙ ваҡытында ҡысҡырып, тәбиғи булмаған тән хәрәкәттәре яһап, шаманлыҡҡа бирелә башлаған, сөнки улар ғәҙәти намаҙ ғына Аллаһҡа табыныу өсөн етерлек дәрәжәлә түгел, тип иҫәпләй. Шулай итеп, ошаҡ хатында билдәләнеүенсә, "улар үҙҙәрен иҫһеҙ хәлгә килтереп еткерәләр, шуға ла сиргә һабышҡан төҫкә ингәндәр".

Эске эштәр министрына яҙған хатында Н. А. Крыжановский икеләнеүҙәргә урын ҡалдырмай:

"...мосолман халҡы араһында хөкүмәт ниәттәренә ҡаршы килгән тәғлимәт таратыусы булдырмау маҡсатында указлы мулла (Зәйнулла) Хәбибуллинды (З. Рәсүлев - **авт.**) һәм башҡорт (Ғатаулла) Әбделмаликовты (З. Рәсүлевтың фекерҙәше - **авт.**) зыялы булараҡ, край хакимиәте тәртибендә эске губерналарға һөрөүгә Ғәли йәнаптәренән рөхсәт һорайым...".

Һәҙәмтәлә 1872 йылдың ноябрь аҙаҡтарында Ырымбур генерал-губернаторы башланғысы менән эске эштәр министры Зәйнулла шәйехте административ тәртиптә алыҫ Вологда губернаһына һөргөнгә ебәреүгә ризалыҡ бирә. 1873 йылдың 23 ғинарында З. Рәсүлев фекерҙәше Ғатаулла Әбделмаликов менән Златоуст төрмәһенән Өфөгә килтерелә. Өс көндән иһә Өфө губернаһы идараһы бойороғо менән ул полиция күҙәтеүе аҫтында йәшәргә һаҡ менән Вологда губернаһы Никольск ҡалаһына оҙатыла. Ҡартайған әсәһе, дүрт ҡатыны һәм алты балаһы тороп ҡалған тыуған иленә, шулай итеп, З. Рәсүлевҡа 1880 йылдың сентябрендә, оҙонооҙаҡ ете йыл ярымдан һуң ғына әйләнеп ҡайтырға насип була.

Шулай итеп, 1873-1875 йылдарҙа З. Рәсүлевҡа эйәреүсе күп кенә




муллалар мәсеттә алып торған вазифаһынан дини дәрәжәһенә тиклем мәхрүм ителеп, һәр төрлө язаға тарттырылған. Исламды өйрәнеүсе белгестәр менән кәңәшләшеп-нитеп тормайынса, суфыйсылыҡ ғәмәленә башҡорт шәйехе индергән яңы йолаларҙың фәҡәт тышҡы һүрәттәренән сығып, уларҙы "ялған остазлыҡта" һәм "хөкүмәткә ҡаршы" эштәрҙә дәлилһеҙ рәүештә ғәйепләйҙәр. Шуның менән Рәсәй мосолмандарына батша хөкүмәтенең "дини хәҡиҡәттән" теләһә ниндәй ситләшеүҙәрҙе, шул иҫәптән суфыйсылыҡ тәғлимәтен дә, дәүләткә ҡаршы йүнәлтелгән күренеш тип ааүһыҙ баҫтырыласағына һәм хөкүмәттең бары тик "рәсми" исламды ғына таныясағына асыҡ ишара яһала. Ә шулай ҙа властарҙың суфыйсылыҡ тәғлимәтенең сәйәсәткә алып килеү хәүефен күреп шөбһәләнеүе нигеҙһеҙ булмай. Суфыйҙарҙың "указлы" муллаларға, исламдың дәүләтләштерелеүенә, властарҙың мосолман халыҡтарының законлы хоҡуҡтарына ҡаршы баҫымына ҡарата асыҡтан-асыҡ йәки йәшертен протест белдереүе Рәсәйҙең эске тормошонда ҡалыплашып өлгөргән дәүләт-ислам мөнәсәбәттәре өсөн хәүеф тыуҙырыуы аңлашыла. Шуға күрә XVIII-XIX, хатта XX быуат башында ла империяла һәр ерҙә суфыйсылыҡ тәғлимәте етәксейләрен аяуһыҙ эҙәрлекләүҙәр һәм улар эшмәкәрлеген сикләүҙәр бара. Ыңдай репрессив саралар, әлбиттә, суфыйсылыҡты йәшертен эшмәкәрлеккә генә этәреп ҡалмай, бәлки, илдә дини күп төрлөлеккә, рухи эҙләнеүҙәргә, башҡорт һәм татарҙарҙың ижтимағи тормошон яңыртыу эшмәкәрлегенә юл ябып, Рәсәй империяһы составында уларҙы берләштереүҙе тотҡарлай.

**Марсель ФАРХШАТОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

ҠОРОҒОР ҒӘҘӘТ

**Бөгөнгө тормоштоң шундай матур, тыныс, ожмахтай икәнен аңлап ҡына бөтмәйбеҙ. Кемдер эшләй, тырыша, етеш тормошта йәшәй. Хөкүмәтебеҙ ҙә үҙе тырышып торған һәр ғаиләгә ярҙам итеү яғында. Ә шулай ҙа эскелеккә бирелеп, бар донъяһын юҡҡа сығарып, өйһөҙ, ғаиләһеҙ тороп ҡалған эскеселәр ҙә күп арабыҙҙа.**

# ЭСКӘНДӘРҘЕ АТМАЙЫҠ...

## ә төнгө клубтарҙы ябайыҡ

Эскелек - ул сир, был сиргә дусар булған кеше үҙ көсө менән генә ҡотола алмай был афәттән, уға тел ярҙамы ла, дауаһы ла, аҡсаһы ла кәрәк. Тәүге осорҙа ярҙам итерлек туғандары, дуҫтары тырыша уны бәләнән йолоп ҡалырға, әммә ҡыҫыр вәғәҙәләрҙән, бер-ике тапҡыр алданғандан һуң, улар ҙа ҡул һелтәүҙе хуп күрә.

Үҙ бәләһе тураһындағы хәҡиҡәтте эскесе аңларлыҡ хәлдә түгел. Йәмғиәтебеҙҙә лә эскенән тыйылыр шарттар юҡ. Мәҫәлән, телевизорҙан ҡараған барлыҡ фильмдарҙа ла шешәһеҙ күңел асыу, ултырып һөйләшеү юҡ. Геройҙар гәләҫр бокалдағы шыйыҡсаны шундай тәмле итеп эсеп күрһәтә, шунан да татлы эсемлек юҡтыр, тип уйларға була. Йәштәр барыбер ҙә телевизорҙан күрһәтелгән реклама, сит ил кинолары аша ла ылыға ошо эскелеккә, башҡа насар ғәҙәттәргә. Беҙҙең ил сит илдең насар ғәҙәттәрен отоп алыу буйынса һәр саҡ беренсе урында бара шул.

Эйе, йәштәребеҙ араһында матур, һау-сәләмәт һәм бай йәшәгеһе килгәндәр ҙә күп. Тик был ынтылышты тормошҡа ашырыу өсөн ҙур теләк, көслө ихтыяр һәм аҡса етешмәй. Төнгө кафелар урынына төнгө кинозал, эскелек ойоштормай ғына дискобарҙар, кафетерийҙар эшләһә, үҫмерҙәр өсөн төрлө спорт секциялары, тир-шахмат, волейбол, мини-футбол ойошторолһа, йәштәр кире ғәҙәттәргә аҙыраҡ ылығыр ине һымаҡ. Ауыл ерҙәрендә төнгө магазиндарҙың һәм кафеларҙың бөтөнләй кәрәге юҡ, төн ул йоҡо өсөн бирелә. Ауыл кешеһе көндөҙ малын ҡарап арығандан һуң, урамға сығып, кафеға барып ашап та ултырмай, магазинға барып сәй, шәкәр һатып алып та йөрөмәй бит инде. Шуның өсөн эскән кешеләрҙе атып бөтөү кәрәкмәй, тәүҙә төнгө магазиндарҙы ябып бөтөргә кәрәк.

"Бала тыйһаң, йәштән тый, ҡатын тыйһаң, баштан тый" тигән мәҡәл бушҡа әйтелмәгәндер. Йәштәр эсә инде, сөнки ул йығыла-йығыла атлап йөрөй башлағандан алып өйҙә эске мәжлестәре, ата-әсәһенең ҡыҙмаса йә иҫерек икәнен күреп үҫә. "Тормоштоң йәме ошо" тигән фекер йәш баланың мейеһендә мәңгелеккә һеңеп ҡала, аҙаҡтан һин уға ошо "ҡараны" "аҡ" тип аңлатып ҡара - файҙаһы булмаясаҡ. Әсәй йә атай кеше үҙе рюмка тотоп, балаһына, һиңә эсергә ярамай, әле бәләкәйһең, тип әйтеп тә балаһына алдан уҡ маҡсат ҡуя, ҙурайғас, эсергә ярай, тигәнгә ишаралап ҡуя.

Ата-әсәһе эсмәгәндәрҙең дә балалары эскесегә әйләнә, тип әйтерһегеҙ. Эйе, үҙҙәре эсмәһә лә эскелектең насар яҡтарын аңлатып бармай ата-әсә балаһына. Өйҙә тыныслыҡ булһа ла, балаһы менән уйнарға, һөйләшергә ваҡыт тапмаған ата-әсәнең балаһы урамдағы йәштәштәренең насар йоғонтоһонан азат түгел. Насар ғәҙәткә өйрәнеүе бик еңел, яҡшы булыуы ғына ауыр.

Белмәгән, аңламаған сағымда: "Их, шул араҡы эшләүсе завод шартлаһа ине", - тип уйлай инем. Хәҙер бөтә магазиндарҙа араҡы шешәләре тулып ултырып та, шул шешәләрҙе һатып алыусылар булмаһа ине, тип хыялланам. Бөтәбеҙ ҙә ысын күңелдән көрәш алып барһаҡ, эскелекте еңеп була. Беҙҙең халыҡтың эскелекте генә еңергә көсө бар. Шуға ла мин киләсәк быуын беҙҙең быуындан аҡыллыраҡ, матурыраҡ, һау-сәләмәтерәк булыр , тип ышанам.

**МИНЗӘЛӘ апайығыҙ.**

*✓ Әгәр ҙә шул ваҡытта Зәки Вәлиди ҡаршы сыҡмаһа, әгәр ҙә Ататөрк башҡа ғалимдар "ҡояш нуры кеүек таралған" тигән панисламизм теорияһына ышанып китһә, хәҙерге ваҡытта Төркиә тарихы нисегерәк булыр ине икән?*

# Вәлиди

## Беҙгә әле ул кимәлгә

**Әхмәтзәки Вәлидиҙең Истанбулда йәшәгән тәүге осоронда ҡыҙыҡлы бер хәл-күренеш бар. Ул тәүҙә поезда килеп, артабан паром менән диңгеҙ аша Азиянан Европаға сығып, аҙаҡ трамвайҙа Истанбул университетына эшкә йөрөр булған. Ошо бәләкәй генә деталь Вәлиди эшмәкәрлеген тулы кимәлдә асып бирә кеүек. Вәлиди көнсығышта ҡалҡҡан ҡояштың көнбайышҡа батыуын күҙ ҡарашы менән оҙата алырлыҡ ирекле заманда йәшәүе менән бәхетле һәм көслө булған. Беҙгә иһә, ике тарафҡа ла ҡорған тартып ҡуйҙылар, ҡояштың төшлөктәге сағын ғына "күреп" йәшәнек. Вәлидигә килгәндә, ул көнсығыш гуманизмы менән көнбайыш рационализмын үҙендә бергә ҡушҡан, донъя кимәлендә балҡыған шәхес, сәйәсмән, ғалим. Был йәһәттән уның "Беҙ аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа түгел, ә - башҡорттар", тигән һүҙҙәре лә күпкә ишара. Ғалим, сәйәси эшмәкәр булараҡ, Әхмәтзәки Вәлиди Туған феноменының асылы нимәлә? Беҙ ни өсөн һуңғы 20 йыл эсендә Рәсәй Федерацияһында һәм донъя кимәлендә барған сәйәси ваҡиғалар алдыбыҙҙа йырып сыҡҡыһыҙ кәртәләр барлыҡҡа килтергәндә иң тәүҙә Әхмәтзәки Вәлидиҙе иҫкә алабыҙ һәм уның аҡылына, тәжрибәһенә таянабыҙ? Әхмәтзәки Вәлидиҙең тормош юлы, сәйәси һәм ғилми эшмәкәрлеге тулыһынса өйрәнелеп бөткәнме? Әгәр ҙә Әхмәтзәки Вәлиди үҙе иҫән саҡта Александр Солженицын кеүек тыуған иленә әйләнеп ҡайта алһа, уны бында нимә көтөр ине? Тарих фәнендәге "Вәлиди ысулы"ның төп мәғәнәһен нисек аңлатырға була? Вәлидиҙең күрәҙәлек һәләтенең асылы нимәлә?**

**Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты, Көнсығыш телдәре кафедраһы мөдире Ғәйнислам ИБРАҺИМОВ менән ҡоролған әңгәмәлә ғалим эшмәкәрлеге хаҡында юғарыла килтерелгән һәм башҡа һорауҙарға яуап эҙләнә.**

### Тәүсығанаҡ - ғилем сығанағы

Донъя фәне өсөн Әхмәтзәки Вәлиди Туған тарихсы, шәрҡиәтсе ғалим булараҡ билдәле. Ә беҙ, башҡорттар, уны иң тәүҙә сәйәсмән булараҡ белә башланыҡ та, уның хеҙмәттәрен уҡыу мөмкинлегенә ирешкәс, уны ғалим булараҡ та үҙебеҙгә асабыҙ. Тарихсы ғалим Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың донъя фәне кимәлендәге үҙенсәлеге шунда - ул һәр ваҡыт тәүсығанаҡҡа мөрәжәғәт итергә тырышҡан. Кемдәндер ишетеп йәки кемдендер табышына һылтанып түгел, күберәк үҙе тарихи материалға юлығып, шуның менән эш иткән ул. Был йәһәттән ул даланлы ла булған, һәр йөрөгән ерендә аяғына йүрмә эләктергән. Мәҫәлән, 1923 йылда Мәшхәд баҙарында ул Ибн Фаҙландың сәйәхәтнамәһен таба. Был осраҡлы түгел, сөнки был яҙмалар тураһында ул хәбәрҙар булған. Ҡулыңа тота килеп бер ҡағыҙ алып, эҙләгән нәмәм ошо икән, тип әйтеп булмай бит. Төрки халыҡтарының тарихына бәйле был материалды ул Төркиәлә баҫтырып сығара алмай, сөнки бының өсөн Төркиә сәйәсәте ҡамасаулай. Шуға күрә ул фән донъяһына ныҡлап инер өсөн Азиянан Европаға сығып китә. Тимәк, Рәсәйҙәге һәм Төркиәләге сәйәсәт уны фән донъяһына ныҡлап этәрә, уға шарттар тыуҙыра. Вәлиди 1910 йылда "Төрөк вә татар тарихы"н яҙып, Рәсәйҙә билдәлелек ала. 1915 йылда Урта Азияның Наманган ҡалаһында сәйәхәттә йөрөгән ваҡытта төрки халыҡтары тарихы өсөн әһәмиәтле булған "Ҡотадғу Билиг" ("Ҡот килтереүсе белем") әҫәренә юлыға. Уға тиклем был әҫәр ғалимға билдәле була, йәғни ул был әҫәрҙең Веналағы һәм Ҡаһирәләге ике вариантынан ҡала өсөнсө варианты икәнлеге хаҡында яҙа. Әммә был ҡомартҡыны һаҡлаусы ҡарт уға был китапты бирмәй, әммә был китап хаҡында Вәлиди мәғлүмәт ҡалдырып китә. Аҙаҡ 1925 йылда бер үзбәк ғалимы был китапты эшкәртә башлай һәм 1942 йылда Рәшит Рәхмәти Арат уны Анкарала айырым китап итеп баҫтырып сығара. Был әҫәр бөтә төрки халыҡтар өсөн мөһим әһәмиәткә эйә һәм уны донъяға күрһәтеүҙә Вәлидиҙең дә роле ҙур.

1926 йылда Вәлиди Истанбулдың яңы мәсет китапханаһында "Нәш әл-Фәрәдис" әҫәренә юлыға. Был әҫәр хаҡында ла мәғлүмәт бирә, артабан был әҫәр башҡа ғалимдар өсөн эҙләнеү объекты булып китә. Әлбиттә, бер ғалим бөтә ошо сығанаҡтар буйынса тикшереүнеү эштәре алып бара алмай. Донъя фәне өсөн Әхмәтзәки Вәлиди тәүсығанаҡ хаҡында тәүге мәғлүмәт биреүе менән әһәмиәтле.

Был йәһәттән хәҙерге тарихсылар менән Вәлидиҙе сағыштырыу мөмкин түгел. Сөнки хәҙерге тарихсыларҙың бөтә эшмәкәрлеге дәүләт системаһына бәйле. Ә Вәлиди дәүләт ҡоролошонан тулыһынса айырылған, тик фән юлында ғына барған. Шуға күрә Вәлидиҙең бөтә хеҙмәттәре донъя ғалимдары тарафынан ихлас өйрәнелә. Вәлиди тәүсығанаҡтарға таянып, тарихҡа объектив ҡараш торған, тарихи хәҡиҡәттән ситләшмәгән. Ә беҙҙең шул уҡ Әхмәтзәки Вәлиди шәхесен тикшереүсе ғалимдарҙы ғына алып ҡараһаҡ, уларҙың был шәхес хаҡында бынан утыҙ йыл яҙғандары менән хәҙергеләрен сағыштырып ҡараһаҡ, икеһе ике төрлө. Бындай ғалимдарҙың хеҙмәтендә Вәлиди ике төрлө: элек халыҡ дошманы, хәҙер милли хәрәкәт юлбашсыһы булараҡ һынландырыла. Был ысын ғилем түгел. Ошонан сығып, сәйәсәт үҙгәргән һайын ғилми ҡарашын үҙгәрткән ғалимдарға, ғөмүмән, ышанып буламы һуң? Хәҙерге ғалимдар бынан 20-30 йыл элек нимә яҙған, бөгөн шуның киреһен яҙа ла ҡуялар. Әйткәндәй, әҙәбиәттә лә ошо уҡ күренеш.

### Төркиә дәүләтселегендәге роле

1923 йылда Төркиә Республикаһы ойошторолғас, Ататөрк алдына яңы дәүләт ҡоролошон төҙөү мәсьәләһе килеп баҫа. Ул саҡта Төркиәлә уҡытыу ғәрәп телендә алып барыла. Ошондай саҡта Әхмәтзәки Вәлиди, Абдулҡадир Инан кеүек ғалимдар Төркиәне яңы юлға этәреүҙә фиҙаҡәрлек күрһәтә. Яңы сәйәси шарттарҙа Төркиә фәне яңылыш юлға баҫа башлай. Ошо мәлдә Әхмәтзәки Вәлидиҙең ошо хаҡта һүҙ барған конгреста протест белдереп сығып китеүе лә артабан Төркиә тарихының дөрөҫ юлдан китеүенә сәбәпсе була. 1932 йылда "Төрөк теле" йәмғиәте ойошторола. Был йәмғиәттең маҡсаты ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған төрөк теленең сафлығына ирешеү, төп төрки һүҙҙәрҙе кирәнән халыҡҡа ҡайтарып биреү була. Ошо маҡсатта Төркиә ғәрәп яҙмаһынан латин графикаһына күсә. Ошоноң һөҙөмтәһе булып хәҙерге ваҡытта, мәҫәлән, Төркиәлә 80 процент төрөк теле ҡулланыла. 30-сы йылдарҙа Вәлиди башлаған хәрәкәт ошондай уңыштарға алып килә. Әгәр ҙә шул ваҡытта Зәки Вәлиди ҡаршы сыҡмаһа, әгәр ҙә Ататөрк башҡа ғалимдар "ҡояш нуры кеүек таралған" тигән панисламизм теорияһына ышанып китһә, белмәйем, хәҙерге ваҡытта Төркиә тарихы нисегерәк булыр ине икән? Кешелек тарихының ошондай һынылышлы мәлдәрендә бер кешенең ихтыяры тотош милләттең, дәүләттең яҙмышын яҡшы яҡҡа үҙгәртә ала. Әхмәтзәки Вәлиди Башҡортостан, Рәсәй тарихы өсөн генә түгел, Төркиә, ғөмүмән, төрки донъя тарихында ана шундай әһәмиәткә эйә шәхес. Үҙе ситтән килеп, ошо илгә һыйыныуға ҡарамаҫтан, объективлыҡҡа һәм хәҡиҡәткә бер ҡасан да ҡарашын үҙгәртмәй ул.



*20 йыл элек беҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең 100 йыллығын ил кимәлендә үткәрә алдыҡ. Шул ваҡыттан алып уның хаҡында күпме китаптар яҙылды, хеҙмәттәре нисәмә телдәрҙә донъя күрҙе. Тарих, хәҡиҡәт, ваҡыт алдында уның һыны тағы ла олпатланды, әммә бөгөн беҙ уның тыуыуына 120 йыл тулыуҙы ниндәйҙер икенсе саралар сиктәрендә генә үткәрәбеҙ. Бик үкенесле, әлбиттә. Ә донъя йәмәғәтселеге уны киң билдәләп үтте. Мәҫәлән, Төрксой тарафынан төрки донъяһында "Әхмәтзәки Вәлиди йылы" иғлан ителде, шулай уҡ Ҡаҙағстанда, Әзербайжанда, Төркиәнең бер нисә университетында уның тураһында фәнни-ғәмәли конференциялар, төрлө саралар үткәрелде. Киләсәктә ЮНЕСКО тарафынан да ул киң билдәләнәсәк. Былар барыһы ла беҙҙең һаман да система эсендә яраҡлашып йәшәүебеҙ тураһында һөйләй. Ә Вәлиди, ғалим булараҡ, бер ниндәй системаға ла, сәйәсәткә лә яраҡлаша белмәгән.*

### Вәлиди ысулы

"Башҡорттар тарихы"н яҙғанда Вәлиди башҡорт тарихын дөйөм төрки тарихы фонында ҡарай. Был дөрөҫ тә. Сөнки төрки халыҡтарҙың тел, мәҙәниәт, сәнғәт уртаҡлығы ҡасандыр уларҙың ныҡ аралашып, бергә йәшәүҙәре хаҡында һөйләй. Әгәр ҙә бер халыҡтың тарихын яҙаһың икән, уның икенсеһен-өсөнсөһөн-дүртенсеһен урап үтеп булмай. Шуға күрә хәҙерге ваҡытта төрки халыҡтарҙың күп томлыҡтары айырым халыҡтың тарихы итеп кенә яҙыла икән, уның объективлыҡҡа дәғүә итә алыуына шик тыуа барыбер. Вәлиди үҙенең "Башҡорттар тарихы" хеҙмәтен тәүсығанаҡтарға таянып яҙған икән, ул тарихи ысынбарлыҡҡа тап килә һәм уның был хеҙмәте әле яҙылып ятҡан "Башҡорт халҡы тарихы" күп томлығына күп йәһәттән документаль нигеҙ була алырлыҡ. Һәр милләттең тарихына айырым ҡарашты беҙгә совет системаһы бирҙе. Шуға күрә төрлө халыҡтарҙың тарихында бер үк тарихи факттар төрлөсә һүрәтләнә. Башҡорт милләтле Аҡмулланы ҡаҙаҡтар һәм татарҙар үҙҙәренең "юрғаны" итеп тартҡан кеүек. Эйе, Аҡмулла, һис һүҙһеҙ, төрки халыҡтарҙың уртаҡ күренеше, әммә шул уҡ ваҡытта ул - башҡорт. Тарихта киң билдәле "Вәлиди ысулы"ның асылы бер ниндәй ҙә сиктәрҙе, цензураларҙы белмәгән, тәүсығанаҡтарға таянылған сабый баланыҡы кеүек саф ҡараш.

### Күп телдәр белеү әһәмиәте

"Вәлиди феномены" күренеше ғалимдың күп телдәр белеүенә лә бәйле. Вәлиди атаһынан ғәрәп, әсәһенән фарсы телдәрен өйрәнгән. Вәлидиҙең донъяға объектив ҡарашы формалашыуында ул саҡтағы мәҙрәсәләр ҙә ҙур урын тотҡан. Тимәк, совет осоронда "ҡараңғылыҡ иленә әйҙәүсе" бындай уҡыу йорттары хәҙерге юғары уҡыу йорттары менән сағыштырғыһыҙ кимәлдә юғары булған. Шул уҡ ваҡытта ул саҡта мәҙрәсә бөткән шәкерттәрҙең әҙерлеге хәҙер университет тамамлаусы студенттарға ҡарағанда күпкә юғарыраҡ, улар бер нисә тел белеп сыҡҡан. Вәлиди, мәҫәлән, урындағы телдәрҙән тыш, ғәрәп, фарсы, иҫке төрки телдәрен ныҡлап үҙләштерә, Европа телдәрен өйрәнеүгә лә башланғыс ала. Аҙаҡ 400-ҙән ашыу фәнни хеҙмәттәрен, китаптарын ошо телдәрҙә яҙа, 90-дан ашыу журнал менән хеҙмәттәшлек итә. Хәҙерге ваҡытта бер генә төрки дәүләттә лә тарихты өйрәнеү методологияһы яҙылмаған. Вәлидиҙең 1946 йылда яҙған "Тарихты өйрәнеү методологияһы" был йәһәттән төрки донъяһында берҙән-бер ҡулланма. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле һаман уның был хеҙмәте башҡортсаға тәржемә ителмәгән. Ниңә уның был хеҙмәте беҙҙең тарих факультетында өйрәнелмәскә тейеш? Сөнки Вәлиди тарихсы булғаны өсөн генә тарихсы түгел, бер үк ваҡытта телсе лә, фольклорсы ла, текстолог та. Үкенескә ҡаршы, тарихҡа ошондай төрлө яҡлы ҡараштың булмауы совет осоронда һәр фән өлкәһен айырым "фатирға" ҡыуалап индереүҙән килә. Шул уҡ ваҡытта бөгөн тарих факультетын, аспирантура тамамлап, кандидат, доктор, академик булып йөрөгән ағайҙар 20-30-сы йылдарҙа ғәрәп графикаһы нигеҙендә яҙылған ҡулъяҙмаларҙы уҡый алмай. Ә үҙҙәре тарих яҙалар. Ә ҡайҙан алып яҙалар һуң? Мең иләк, цензура үтеп баҫыл-

***✔ Вәлидиҙең икенсе бер остазы мәҙрәсәһендә 400 шәкерт уҡытҡан Ғабдулла ишан Сәиди ер өҫтөндә ниндәй үләндәр үҫеүенә ҡарап, ер аҫтында ниндәй затлы таштар ятыуын билдәләй алған.***

ған урыҫ сығанаҡтарынан. Әгәр ҙә тарихсы архивта берәр документ табып алһа, уҡый белгән кешенең артынан баҫтырып йөрөй. Тәржемәсене тотоп уҡытып алһа, әйҙә, ҙур алтын тапҡандай шул документты төрлөсә тәфсирләп, матбуғат биттәрен тултыра. Ә бит тарих эҙмә-эҙлелекле булырға тейеш. Әгәр ҙә бер документ табылған икән, уның икенсеһе лә бар тигән һүҙ. Ә ҡалған документтарға был тарихсының көсө, белеме етмәй. Беренсе сиратта телде белмәй ул, ә сит телдәрҙе инде әйтеп торорға ла түгел.

Миңә донъя буйлап күп йөрөргә тура килә. Мәҫәлән, Төркиәгә фәнни-ғәмәли конференцияға килгән Африка ғалимдары төрөктәр менән төрөксә, инглиздәр менән инглизсә, француздар менән французса аралаша. Беҙҙең элекке СССР системаһында йәшәгән ғалимдар бер урынға өйөлөп алалар ҙа, урыҫса ғына аралашалар. Ә Әхмәтзәки Вәлиди ғәрәп менән ғәрәпсә, француз менән французса, немец менән немецсә, инглиз менән инглизсә һөйләшә алған. Ул тарихсы өсөн иң мөһиме ғәрәп, фарсы һәм ҡытай телдәрен белеү, тип иҫәпләгән. сыларға, академик-профессорҙарға ла ҡағыла. Бөгөн уның әҫәрҙәренең төҙөлөшөн тикшергән, мәғәнәһен асыҡлаған бер генә лә монографик хеҙмәт юҡ. Шағирҙың иҫке төрки телендә яҙылған әҫәрҙәрен хәҙерге кириллицаға күсереп кенә күп нәмә аңлап булмайҙыр ул. Китапҡа баш һүҙ яҙалар ҙа, бер ғалим уны шағир, икенсеһе сәсән тип атай. Әммә ошонан ары китә алғандары юҡ. Мәҫәлән, Аҡмулла башҡорт телен белмәгәндән генә ошолай төрлө телдәрҙә сыбарлап яҙмаған бит. Аҡмулла мәҙрәсә традицияһын үткән, шунда белем алған, ғәрәп, фарсы телдәрен яҡшы белгән. Ә көнсығыш шиғриәтенең үҫеше IX быуаттан алып башлана. Тимәк, Аҡмулланың шиғырҙарын бар тулылығында аңлар өсөн ғәрәп, фарсы, төрки телдәрен яҡшы белергә кәрәк. Бөгөн беҙҙә Аҡмулланың ижадын ошо кимәлдә өйрәнеүсе ғалимдарыбыҙ юҡ. Ә Әхмәтзәки Вәлиди Исламға тиклемге дәүерҙәрҙән башлап хәҙергегә тиклем дәүергә ҡараған тәүсығанаҡтарҙы төп нөхсәһендә уҡый алырлыҡ инсан булған. Ул халыҡтың әҙәбиәтен, фольклорын һәм телен бер ваҡытта ла айыбилдәле булыуынса, Зәйнулла ишан Рәсүлев 16 йәшлек Әхмәтзәкиҙе һынап ҡарар өсөн 10 тин алтын аҡса бирә. Был аҡсаға Вәлиди тәм-том йә башҡа берәй ялтырауыҡ әйбер түгел, ә китап лавкаһына инеп, Ғазалиҙың теологияны тәнҡит иткән бер әҫәрен, Мысырҙа һәм Истанбулда баҫылған астрономия һәм физика фәне буйынса китаптар, Толстойҙың "Крейцерова соната" китабын, ҡайһы бер рус романдарының ғәрәпсә тәржемәләрен, французса өйрәнеү өсөн төрөксә яҙылған "Французса һөйләшеү китабы"н һәм Толстойҙың тағы бер "Аслыҡ йылдары" исемле китабын һатып ала. Бында һәр төрлө аңлатмалар артыҡ. Ә шулайҙа хәҙерге заманда ауылдан олатаһы килеп, юғары уҡыу йортонда белем алған ейәненә 5 мең аҡса биреп, уға Зәйнулла ишан кеүек: "Кәрәкле әйберенде һатып ал", - тип әйтһә, хәҙерге студент шул аҡсаға нимә һатып алыр ине икән?

Вәлидиҙең икенсе бер остазы мәҙрәсәһендә 400 шәкерт уҡытҡан Ғабдулла ишан Сәиди ер өҫтөндә ниндәй үләндәр үҫеүенә ҡарап, ер аҫтында ниндәй затлы таштар ятыуын билдәләй алған. дәүләт аппаратында ла эшләгән һәм уларҙың да киләсәген әйтеп биргән.

Әхмәтзәки Вәлиди Рәсәйҙәге һәм донъялағы күп кенә ваҡиғаларҙы алдан әйтеп биреп, ҡасандыр үҙенең дә тыуған иленә әйләнеп ҡайтыу хыялы менән дә өмөтләнеп йәшәй. Әммә ул ҡайтыуын ниндәй ҡиәфәттә икәнлеген әйтмәй. Бөгөн уның фараздары ысынбарлыҡҡа тура килде. Ул барыбер ҡайтты. 20 йыл элек уның тыуыуына 100 йыллыҡты Башҡортостан йәмәғәтселеге киң билдәләп үтте. Стипендиялар, урамдар, һәйкәлдәр, китапханалар барлыҡҡа килде. Уны хеҙмәттәре тыуған иленә алып ҡайтты. Шул уҡ ваҡытта ҡасандыр уны тыуған иленән китергә мәжбүр итеүселәр онотолоуға дусар ителә. Әгәр ҙә Вәлиди тере сағында Солженицындар кеүек ҡайтыу бәхетенә ирешһә, хәтирәләрендә яҙғанса, ябай уҡытыусы булып ҡайтыр ине. Бында ла тәрән мәғәнә бар. Әгәр ҙә ул ҡайтып, ысынлап та, уҡытыусы булып эшләһә, уның бында бик белемле, донъя кимәлендә фекер йөрөткән, күп телдәр белгән уҡыусылары булып, улар юғары кимәлдәге шәхестәр булып,

# ФЕНОМЕНЫ.

## күтәрелергә лә күтәрелергә…

Сөнки төрки ҡәүемдәре төрки этнонимы барлыҡҡа килгәнгә тиклем башҡа атама аҫтында ла йөрөгән һәм уларҙың боронғо тарихтары шул атама аҫтындағы ҡәүемдәргә бәйле. Мәҫәлән, "төрөк" этнонимы VI-VII быуаттарҙа ғына барлыҡҡа килә. Орхон-Йәнәсәй яҙмаларында тәү тапҡыр был хаҡта әйтелә. Уға тиклем төрки ҡәүемдәр аландар, мәсәғүттәр, һундар һ.б. тип аталып йөрөтөлгән. Тарихта билдәле, беҙҙең эраға тиклем һундар Ҡытайҙы баҫып алып, унда йәшәйҙәр, әммә ваҡыт үтә килә улар ассимиляцияға бирелә, ҡытайлаша. Әммә уларҙың ҡытайлашыуы менән тарих үҙгәрмәй һәм тарихсы өсөн арттағы йөҙ йыл менән ҡәнәғәтләнер ерлек тә ҡалмай бында. Тимәк, тарих төпкөлөнә, кешелек, айырым ҡәүем асылына барып еткәнсе бик күп ҡатламдар аҡтарырға, бының өсөн телдәрҙе күп белергә кәрәк. Әхмәтзәки Вәлиди шуның өсөн дә студенттарын күберәк Ҡытайға сит телдәрҙе, сит мәҙәниәттәрҙе өйрәнергә ебәреүҙе хуп күргән. Вәлидиҙең күп телдәрҙе белеүе, күп кешеләр менән уларҙың үҙ телендә аралашыуы бик ҙур ғилми файҙа килтергән.

Донъяла бик күп парадоксаль әйберҙәр бар. Мәҫәлән, Аҡмулланың ижадын бар тулылығында кем белә? Беҙ уның "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк" тигән шиғырынан башҡа шиғырҙарын уҡып, уларҙың мәғәнәһен тулы килеш кем аңлай алғаны бар? Был хәл ябай уҡыурып ҡарамаған, уларҙың бөтәһен бергә ҡараған. Хәҙерге ғалимдарға бындай ҡараштар етешмәй, уларҙың һәр ҡайһыһы үҙ өлкәһенә бикләнеп, уны "өрөп тултырыуын" дауам итә.

### Мәҙрәсәләрҙең роле

Әхмәтзәки Вәлидиҙең формалашыуында ул саҡта Башҡортостанда эшләгән мәҙрәсәләрҙең, ундағы мөғәллим-ишандарҙың, башҡа шәхестәрҙең роле баһалап бөткөһөҙ ҙур булған. Бында иң тәүҙә атаһының мөршите, аҙаҡ үҙенең оло ҡайныһы булып киткән Зәйнулла ишан Рәсүлевтың, ул үҙ эшмәкәрлегенең нигеҙе итеп алған Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең йоғонтоһо күҙаллана. Әгәр ҙә Зәйнулла ишан, уның йоғонтоһо булмаһа, йәш Әхмәтзәки үҙен бары бер байҙың приказчигы булыуға ғына ирешеүҙе күҙ алдына килтерә алған икән, был күп нәмә тураһында һөйләй. Әлбиттә, Вәлидигә шулай уҡ атаһының дуҫтары Ғабдулла ишан Сәиди, Ғатаулла ишан Әбделмәликовтарҙың да йоғонтоһо ҙур булған. Вәлиди үҙе Ҡаҙандың "Ҡасимиә" мәҙрәсәһен тамамлаһа ла, рухи юлбашсылары итеп атаһының дуҫтарын атаған. Урынлы һорау тыуа:

ошондай ҡөҙрәткә эйә булыусы мәҙрәсәләрҙең һәм уларҙы етәкләүсе ишандарҙың буласаҡ милли юлбашсыны, донъя кимәлендә танылыу яулар оло ғалимды, аҡыл эйәһен тәрбиәләүҙәге әһәмиәте нимәнән ғибәрәт булған һуң? "Хәтирәләр"ҙән Был мәҙрәсәләрҙә Рәсәй һәм донъя кимәлендә танылыу яулаған башҡа фән өлкәһе ғалимдарын, геологтар, физиктар, математиктар әҙерләнгән. Питер һәм башҡа ҡалаларҙа сәнәғәт предприятиелары асыусы ғалимдар белем алған был мәҙрәсәләрҙә.

### Күрәҙәлек һәләте

Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда "Күрәҙәлек итә тимәгеҙ..." тигән юлдары бар. Уның был хатында яҙылған күп ваҡиғалар, ысынлап та, илебеҙҙең киләсәгендә сағылыш тапты. Вәлидиҙең күрәҙәлек һәләтен мин ниндәйҙер, диндә әйтелгәнсә, хикмәтле күренеш булыуҙан бигерәк, уның ысын мәғәнәһендә ғалим булыуына бәйләр инем. Мәҫәлән, ул башҡорт тарихын дөйөм төрки тарихы күҙлегенән ҡарай. Әйтәйек, ул бер ҡәүемде өйрәнә икән, уны һәр йәһәттән тикшерә. Артабан ул бер нисә ҡәүемдең төрлө ситуацияларҙа нисек сығыш яһауын сағыштырып, менталитетына анализ яһап, үҙенең фараздарын йөрөтә. Шунан сығып, киләсәкте күҙаллай. Бөгөн, мәҫәлән, төркмәндәр беҙҙән бик алыҫ йәшәй. Әммә ҡасандыр башҡорт һәм төркмән ҡәүемдәре Себер тарафтарында аралашып йәшәгән. Шуға күрә беҙҙең телдәге "ҙ", "ҫ" өндәре башҡа төрки телдәрҙән айырмалы рәүештә төркмәндәрҙә генә осрай. Мәҫәлән, Себер тарафтары теле Ҡаҙан, Ҡырым татарҙарына ҡарағанда башҡорт теленә яҡыныраҡ. Зәки Вәлиди урыҫтарҙы ла яҡшы белгән, уларҙың илебеҙгә һәм милләтебеҙгә хеҙмәт итерҙәр ине. Минеңсә, Вәлиди уҡытыусы булыуҙа тап ошоно күҙ уңында тотҡандыр.

20 йыл элек беҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең 100 йыллығын ил кимәлендә үткәрә алдыҡ. Шул ваҡыттан алып уның хаҡында күпме китаптар яҙылды, хеҙмәттәре нисәмә телдәрҙә донъя күрҙе. Тарих, хәҡиҡәт, ваҡыт алдында уның һыны тағы ла олпатланды, әммә бөгөн беҙ уның тыуыуына 120 йыл тулыуҙы ниндәйҙер икенсе саралар сиктәрендә генә үткәрәбеҙ. Бик үкенесле, әлбиттә. Ә донъя йәмәғәтселеге уны киң билдәләп үтте. Мәҫәлән, Төрксой тарафынан төрки донъяһында "Әхмәтзәки Вәлиди йылы" иғлан ителде, шулай уҡ Ҡаҙағстанда, Әзербайжанда, Төркиәнең бер нисә университетында уның тураһында фәнни-ғәмәли конференциялар, төрлө саралар үткәрелде. Киләсәктә ЮНЕСКО тарафынан да ул киң билдәләнәсәк. Былар барыһы ла беҙҙең һаман да система эсендә яраҡлашып йәшәүебеҙ тураһында һөйләй. Ә Вәлиди, ғалим булараҡ, бер ниндәй системаға ла, сәйәсәткә лә яраҡлаша белмәгән.

### Ғилми ныҡышмалылыҡ

Бөгөн беҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең тормош юлы, ғилми эшмәкәрлеге тулы килеш өйрәнелгән, тип әйтә алмайбыҙ, әммә киләсәктә быға өлгәшербеҙ тип ышанам. Бының өсөн ошоноң менән шөғөлләнеүсе ғалимға Әхмәтзәки Вәлиди кеүек ғәрәп, фарсы, төрөк телдәрен, донъяға сығарыу өсөн Европа телдәрен белеү фарыз. Беҙгә ундай ғалимдарҙы әҙерләй башлау мотлаҡ. Бөгөн бындай мөмкинлектәр табырға ла булыр ине, әммә рухи яҡтан һайыраҡбыҙ. Беҙгә Вәлидиҙә булған ныҡышмалыҡ етешмәй. Гендарыбыҙ боҙола. Хәҙер модерн, тигән булып, халыҡ еңел-елпегә өйрәнде. Хәҙер хатта 90-сы йылғы студенттар менән бөгөнгө студенттарҙы сағыштырып ҡарағанда ла ер менән күк араһы. 20 йыл эсендә генә менталитетыбыҙ шул тиклем ҙур үҙгәрештәр кисереп өлгөрҙө. 20 йыл элек уҡыған студент лекцияла конспект яҙа ине, китапханаға барып, тематик картотеканан үҙенә кәрәкле темаға әҙәбиәт таба белә ине. Хәҙер берәү яҙып ултыра, икенсеһе уныҡынан йә башҡа әҙер дәфтәрҙән ксерокопия эшләтеп ала йә булмаһа хәҙерге студент китапханалағы тематик картотеканан кәрәкле мәғлүмәтте эҙләмәй, быларҙың барыһын да Интернет селтәре аша ала. Былары иң ябай миҫалдар. Элек һәр кемдең өйөндә телефон булманы, булғандарының номерҙарын яттан белә инек. Хәҙер кеҫәлә кәрәҙле телефон йөрөгәс, барлыҡ номерҙарҙы уның хәтеренә һалабыҙ ҙа, мейене "ялҡау"өйрәтәбеҙ. Һуңғы сиктә мейе эшләүҙән, йәғни мәғлүмәт алыуҙан һәм уны һаҡлауҙан туҡтай. Уның ҡарауы, кеше хәҙер үҙенең өйөндә торған телефон номерын үҙе белмәй.

Әхмәтзәки Вәлиди бер ғалим менән ҡайһы китапханала, ҡайһы кәштәлә ниндәй сығанаҡ бар, ул китап яҡынса күпме ауырлыҡта һәм уның нисәнсе битендә нимә тураһында яҙылыуын иҫләү буйынса ярышҡан. Улар бер-берeһенә шылтыратып, шундайыраҡ һорауҙар бирер булған, әйтәйек : "Һин шул китапхананың, шул мөйөшөндә, шундай китапты күргәнең, уның шунынса битендә шул хаҡта яҙылғанын уҡығаның бармы?" Унан һуң икенсеһе беренсеһенән икенсе бер китапханалағы ниндәйҙер китап хаҡында белешмә һораған. Был юл менән улар бер-береһен сәмләндергән, икенсенән, ошо юл менән хәтерҙәрен нығытыуға өлгәшкән.

Дөрөҫөн әйткәндә, Әхмәтзәки Вәлиди беҙҙең илдән сығып киткәндә мәҙрәсә йә башҡа юғары уҡыу йортон тамамлауы хаҡында бер ниндәй документы булмаған көйө лә үҙен Төркиә университетына профессор итеп эшкә алыуҙарына өлгәшә һәм ошонан һуң ғына Европала рәсми рәүештә диссертация яҡлай. Әлбиттә, был осраҡта Вәлидигә телдәрҙе күп белеүе, һәр өлкәлә лә, бигерәк тә Шәреҡ тарихы өлкәһендә күп белеүе һәм ныҡышмалылығы ярҙам иткән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Беҙ донъяны аңлау йәһәтенән дә, ғилми фекерләү йәһәтенән дә һаман да Әхмәтзәки Вәлиди Туған кимәленә күтәрелеп етә алмайбыҙ әле, йәмәғәт", тип кенә әйтергә ҡала бында Ғәйнислам Ибраһимовтың әйткәндәренә өҫтәп.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

*✓ Күп йылдар элек тап шул башҡорт уның яңағында ҡылыс менән ошо тәрән йәрәхәт эҙен ҡалдырҙы. Аҙаҡ бөтәһен дә ҡырғайнылар түгелме ни? Тимәк, был иҫән тороп ҡалған… Ни өсөн әлегә тиклем тере?*



Осо-ҡырыйы күренмәгән ҡарурман. Был шырлыҡҡа ҡалайтып килеп ингәндәрен үҙҙәре лә һиҙмәй ҡалды. Шайтан аҙаштырҙы, тиер инең, үңәстән эләктереүсе шайтан түгел, әҙәм заты. Ситят ерҙә юлдан яҙып, марама булып, ҡаңғырып йөрө сәле! Һәр ерҙә әжәл ҡарауыллап торғандай.

- Полковник әфәнде, минеңсә, беҙ көньяҡҡараҡ тартырға тейешбеҙ, - тине алдан барған һыбайлы.

- Ни өсөн шулай уйлайһығыҙ, лейтенант? Һеҙ әле көньяҡ менән төньяҡты нисек айыраһығыҙ?

- Комендант Фроловтың "Теге ҡәбәхәттәрҙе көньяҡтан эҙләргә кәрәк", тигәненән генә әйтәм инде мин...- Лейтенант Егоров ыҡ-мыҡ итте.

- Уларҙы эҙәрлекләргә маташыу - иң ҙур ахмаҡлыҡ. Тотоп та, аулап та булмай уларҙы! - Полковник Пушкарев маңлайын усы менән һыпырҙы. - Бер ай элек ҡапыл ғына һөжүм итеп, имәнес ҡырағай тауыштар менән килеп ябырылдылар ҙа, беҙ иҫкә килгәнсе, таралышып, юҡҡа ла сыҡтылар. Шул арала дүрт һалдатты үлтерергә өлгөрҙө ҡәһәр төшкән басурмандар. Бындай урмандары булғанда, уларҙы аулау мөмкин эш түгел. Ошондағы һәр ағасты, һәр ҡыуаҡты белә бит яуыздар.

- Хаҡ һөйләйһегеҙ, полковник әфәнде. Бына боҫҡан урындарын барып тапҡанда!.. Бөтә шайканы бер юлы ҡырып һалыр инек.

- Ничего, урмандарын да һирәгәйтербеҙ, үҙҙәрен дә! Урыҫ һалдаты улар шайы ғына басурманды күп күрҙе. "Беҙ - цивилизация" тип маҡтанған илдәрҙән дә еңелгәнебеҙ юҡ. Ә был ҡырағайҙарға нуҡта кейҙерербеҙ!

- Тимәк, беҙҙе ғәләмәт оло эштәр көтә...

- Мин төркиҙәрҙең психологияһын яҡшы беләм. Былар ҙа төркиҙәр. Ә һин, алйот, улар кемдәр, ниндәй халыҡ, тип баш ватҡаның да юҡтыр! - Полковник лейтенантҡа шелтәле ҡараш ташлағандан һуң һүҙен дауам итте. - Һуңғы йылдарҙа ныҡлап өйрәнергә тура килде төрки тарихын. Европанан Азияға тиклем үтеп, улар йәшәгән, көн иткән бөтә ерҙә лә тиерлек булдым. Үҙебеҙгә ауҙара алғандарын ауҙарҙыҡ, дошманлаштырырға теләгәндәрен бер-береһенә һөсләттек. Бер нәмәне асыҡ әйтә алам: һәр халыҡтың йомшаҡ урыны бар. Шуны табырға кәрәк.

Егоров күпте күргән, күпте кисергән полковникты ауыҙ асып тыңланы.

- Шайтан алғыры, урмандың осо-ҡырыйы юҡ та баһа! - Полковниктың кәйефе ҡырҡа үҙгәрҙе. - Нисек бында килеп индек беҙ? Ҡайҙа теге юл күрһәтеүсе? Белобородов! Ҡайтҡас, уны ҡамсыларға һәм бикләп ҡуйырға! - Ул хәҙер асыулы ҡарашын лейтенантҡа төбәне. - Ярар, мин был тирәлә беренсе мәртәбә, ти. Ә һин бит был крайҙа бер ун йыллап тораһың!

- Алты йыл, полковник әфәнде! Ләкин һеҙ бит беҙҙе төп көстән айырып алып киттегеҙ... то-есть... Һеҙ батыр кеше, шуға ла һис кенә һаҡланыу сараһы тураһында уйламайһығыҙ. Һеҙҙең ҡыйыулыҡ...

- Эйе, мин үҙ көсөмә ышанам. Ә бына һеҙҙең хәрби наҙанлыҡ бер ҡалыпҡа ла һыймай!

- Ғали йәнәптәре! Ҡаршыла асыҡлыҡ күренгән һымаҡ. Бер нисә һалдатты шул яҡҡа ебәрергә рөхсәт итегеҙ.

- Асыҡлыҡты үҙебеҙ ҙә ҡарай алабыҙ. Бына был яҡҡа күҙ һал!

Егоров полковник күрһәткән яҡҡа ҡайырылды. Береһенә икенсеһе үрелеп үҫкән текә ҡаялар, етмәһә, шөкәтһеҙ ағастар менән ҡаймаланған.

- Ана шул тирәне байҡаһындар!




Егоров һалдаттарын ҡаяллы-таулы тарафҡа ебәрҙе, үҙе атын аҡлан яғына борҙо. Полковник илтифатһыҙ ғына уның артынан эйәрҙе. Ҡапыл нимәләр шырт иткәндәй булды. Йөкомһорап килгән Пушкарев һиҫкәнде. Уны-быны күҙҙән үткәргәнсе, лейтенант артҡа ҡайҡая башланы. Йөнәшәһендәге һалдат сос булып сыҡты, урманға төбәп атып та ебәрҙе, үҙе лә шул ыңғайҙан мылтығын ысҡындырып, үңәсенә ҡаҙалған хәнйәргә ике ҡуллап йәбеште. Хәүефтең ҡай тирәнән янағанын тәгәйен генә белеп өлгөрмәгән полковник мушкеты менән тоҫмаллап атты. Шул мәлдә, күктән төшкән тиерһең, ҡаршыһына һыбайлы килеп баҫты. Тегенең ҡулындағы суҡмарҙы шөйләгән Пушкарев көскә ситкә янтайҙы. Хәрби походтарҙағы сыныҡыу был юлы ла ярҙам итте. Суҡмар әллә ни ауырттырмай, яурын тәңгәлен сыйып үтте. Шул ыңғайҙан һыбайлы ла шырлыҡ эсенә инеп юҡ булды.

Һалдаттар кире боролоп, һыбайлы артынан ташланды. Былар бит хәҙер аң-тонҙо белмәйенсә, теге ҡырағайҙар ҡорған тоҙаҡҡа барып инәсәк! Урман төпкөлөндә ниндәй сиреү боҫҡан да, нисә башҡорт башкиҫәре һағалай, уны тик Алла ғына белә!

- Туҡтарға! - тип аҡырып ебәрҙе Пушкарев. - Боролорға!- Полковник атын тура аҡланға юрттырҙы. Һалдаттар уның артынан эйәрҙе.

Бер нисә саҡрым үткәс кенә улар төп экспедицияны ҡыуып етте. Полковниктың өҫтәнән тау төштөмө ни! "Хас теге саҡтағы һымаҡ..." Юҡҡа алдаਂны ул меҫкен Егоровты. Мәрхүмкәйҙе... Был тирәгә беренсе мәртәбә аяҡ баҫыуы, имеш. Ысынында иһә, Пушкаревтың икенсе тапҡыр килеүе, һәм был юлы - оҙаҡҡа. Государҙең бөйөк маҡсаттарын тормошҡа ашырырға был юлы инде Иван Сергеевичҡа берәү ҙә ҡамасаулай алмаҫ. Аҙаплы тәүге экспедициянан шәп хәтирәләр ҡалманы шул... Карьера яһауҙағы уңышһыҙлыҡ нигеҙе булараҡ, иҫкә төшкән һайын кәйефте ҡыра. Ул саҡтарҙы хәтеренә бик төшөрөргә яратмай Пушкарев. Хәҙер иһә бурыстары ла икенсерәк, уйниәттәре йәш саҡтағынан сағыштырғыһыҙ дәрәжәлә етди. Инде уның был крайҙы нығыраҡ өйрәнеп, ерле халыҡты империяға ҡатыраҡ буйһондорор өсөн аҡылы ла, тәжрибәһе лә етерлек. Пушкарев урыҫ империяһы тарихында үҙенең исеме ҡалыуын теләй. Һәм шулай буласаҡ! Бына был һүҙҙәрҙе әйткән сағында ул ялғанламай. Әгәр ҙә шул турала һораһа, Егоров мәрхүмкәйҙе алдамаҫ, дөрөҫөн әйтер ине. Тик өлгөрмәне. Ә бит империя алдында уның хеҙмәте бик ҙур. Пушкарев урынында башҡа берәйһе булһа, күптән генерал дәрәжәһен алған булыр ине. Йылы штабта ултырып ҡына, әллә кемдәр өҫтөнән командалыҡ итер ине. Әммә Иван Сергеевичтың юлында кемдәрҙер һәр саҡ аяҡ салды, көтөлмәгән ҡаршылыҡтар сығып ҡына торҙо. Хәйер, Пушкарев үҙе лә ултырып ҡына сыҙай торған әҙәмме ни инде? Юҡ, әлбиттә! Хаталарын, яңылыш ҡылыҡтарын төҙәтергә лә сирҡанмай ул. Был юлы ла йәнә аяҡ баҫырға мәжбүр булыуы ана шул ҡыйышлыҡтарҙы дөрөҫләү теләге менән бәйле. Тик килеп төшкәнгә теүәл бер ай тигәндә Ҡараслан тип аталған ошо урманлы төбәктә көтмәгәндә мажараға тарыуы ғына оҡшаманы уға.

- Мин әле ситуацияны ныҡлап өйрәнмәгәнмен. Яра-а-ар, арт һабаҡтарын уҡытырмын, - тип янаны Пушкарев. - Урыҫ һалдатына уҡ-суҡмар менән ҡаршы сығалар тиме ни, алйоттар! Рәсәйҙең киләсәге Урал менән бәйле. Стратегик әһәмиәткә эйә был төбәк. Шуны баҡытында аңлап, ваҡытында баш һалыу хәйерле бит үҙҙәренә...

Күҙ алдына йәнә суҡмар менән ынтылған теге һыбайлы килеп баҫты. Был юлы Иван Сергеевич Пушкарев, үҙе лә һиҙмәйенсә, көҙән йыйырғандай, ҡалтыранды. Ҡәбәхәт, саҡ-саҡ ҡына һуғып үлтермәне бит! Һуғыу ғынамы, быҫҡыта ине! Бер-ике секунд яҙмышын хәл итте. Дөрөҫөрәге, үҙенең йылғырлығы. Ә уның, изге христиандың атҡараһы яҡшы эштәре бихисап! Быны бер кем дә тыя алмаясаҡ. Государь уның был ғәмәлдәре тураһында бик күп тапҡырҙар ишетәсәк әле! Уға ҡарата мөнәсәбәте үҙгәрәсәк! Үҙгәрер! Теге юлбаҫар бар хыялдарҙы селпәрәмә килтерә яҙҙы. Тукта... Тукта... Ҡайҙалыр күргәне булды түгелме шул мөртәтте?

- Минең уны ҡайҙалыр күргәнем бар, - тине йәнәшәһендә барған ярҙамсыһы Гавриловҡа.

- Иван Сергеевич, улар бөтәһе лә бер иш, - тип уны йыуатты Гаврилов.

Хәрби нығытмаға барып ингәс, полковник яңағындағы боронғо яра эҙен һыпырып ҡуйҙы. Шунан ҡапыл ҡулы һәленеп төштө. Иҫләне! Хәтеренә төштө теге күҙе даһрайған ҡәбәхәт! Бына нимә уның күңелен өйкәп торған икән!.. Күп йылдар элек тап шул башҡорт уның яңағында ҡылыс менән ошо тәрән йәрәхәт эҙен ҡалдырҙы. Аҙаҡ бөтәһен дә ҡырғайнылар түгелме ни? Тимәк, был иҫән тороп ҡалған... Һаман шул кәсебендә йөрөй! Һаман уның һалдаттарын ҡырып булыша! Ни өсөн әлегә тиклем тере?

Пушкарев бер нәмәне асыҡ белә: енеүгә ирешер өсөн һалдаттың рухын күтәрергә кәрәк. Полковник килгәндең тәүге көнөндә үк эшен шунан башлап ебәрҙе. Ҡаҙарма алдында ялҡынлы телмәр тотто, государҙең тап ошо һалдаттарға оло өмөт бағлауын еткерҙе. Гарнизон етәксеһе Гавриловҡа башҡорт ерҙәрен үҙләштереүҙәге хеҙмәте өсөн Сенаттың рәхмәтен белдерҙе. Бындай мөнәсәбәттән ныҡ тулҡынланған Гавриловтың хатта күҙенән йәше бәреп сыҡты. Бына алты көн гарнизон етәксеһе ана шул һүҙҙәрҙән ҡанатланып йөшәй. Әле лә Пушкарев янына килеп инеү менән илһөйәрлек хисе менән тулы күңелен асты.

- Самодержавиеға ҡаршы булған бер яуызға ла аяу булмаясаҡ!

- Ә шулай ҙа дураҡ һин, Гаврилов! Уйлап һөйләргә кәрәк! Был яҡтарҙа тәү мәртәбә булғанда мин дә эре сирттерә торғайным. Бына шул зобанизарҙың иҫтәлеге! - Пушкарев яңағындағы йөйҙә күрһәтте. - Етмәһә, "Улар бөтәһе лә бер иш," тип ыҫҡындырҙың. Хәтеремдә тот, Гаврилов, улар төрлө-төрлө! Төрлө рәүештә, төрлө сүрәттә!.. - Полковник ауыҙына тулған төкөрөгөн ғолт итеп эскә йотто, бер аҙ тымып торғандан һуң, тыныслаңыбыраҡ дауам итте. - Һуңғы ун ике йыл эсендә төрки донъяһын шаҡтай ҡыҙырырға тура килде. Һис шикһеҙ, ҡасандыр улар бик көслө булған. Һис шикһеҙ, үҙ дәүләттәрендә көн күргәндәр. Ләкин Хоҙай мәрхәмәте менән тарҡалғандар. Төрлө халыҡҡа, ырыуҡәбиләгә әйләнгәндәр. О-о-о, ә бит ниндәй иркен ер биләгәндәр! Хәҙер ҙә шулай. Ғәҙел түгел был! Шуныһы мөһим: күпселеге үҙҙәренең бик ҡеүәтле саҡтарын онотҡан. Ләкин хәтерҙән шундай үҙенсәлеге бар, ул уяныға ла һәләтле. Бына нимә, Гаврилов, мин һиңә шуны асыҡ әйтә алам. Уларҙың психологияһы, йәшәү рәүеше бер-береһенекенән шаҡтай айырыла. Һин, малай, ябайлаштырма! Һәр береһенә айырым подход кәрәк. Һе, "бер иш", имеш... Итерһең итмәй ни, атаң башы... Минең был яҡҡа ҡабаттан килеүемде яңынан тыуыу, тип баһаларға мөмкин. Элекке Пушкарев тарих саңы булып ҡалды. Ә бөгөнгөһөнөң киләсәге бар... - Иван Сергеевич бармаҡтарын өҫтәлдә "бейетте". - Уларҙы тулыһынса яулар, буйһондорор өсөн күпме ваҡыт талап ителер, белмәйем.

Был һүҙҙәренән һуң ул муйынынан тәреһен сығарып үпте лә, кире тығып, күкрәк тәңгәлен ашыҡмай ғына һыпырҙы.

- Шулай ҙа улар беҙҙең сәйәсәт менән әллә ни ҡыҙыҡһынмай. Төркмәнлешеп яу сабыуҙары - был яуыздарҙың электән килгән бер традицияһы ғына.

- Бында күпләп ҡәлғә, заводтар һалына башлаһа, уларҙың мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәреүе ихтимал. Ана нимәгә әҙер булырға тейеш беҙ.

- Улар бер ҡатлы халыҡ. Тиҙ ышаналар. Хәйләһеҙҙәр.

Пушкарев ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

- О-о-о, Гаврилов! Һине үҙеңә артыҡ ышаныуың харап итәсәк. Бер нисә башҡорт менән уртаҡ тел табып көн итеүең, һине һәр ерҙә ҡолас йәйеп ҡаршы аласаҡтар, тигәнде аңлатмай бит! Уларны һуң хәйләһеҙ!.. Бик яуыздары, бик хәйләкәрҙәре бар! Ә ҡырағай ауаздар сығарып өҫтөңә ябырылһалар? Үҙҙәре атҡан уҡтан да етеҙҙәр бит! Арттарынан баҫтырып тотоп ҡара шуларҙың. Бер яҡтан, һин хаҡлы, шул рәүешле үҙ ерҙәренән беҙҙе ҡыуып ебәрергә була, тип ышаналар. Бер ҡатлылыҡ... Самодержавиеның бөйөк маҡсатын ҡайҙан инде уларға аңларға!..

- Тап шулай, ғали йәнәптәре! Ҡырғыҙ-ҡайсаҡҡа барған һуғыш алымы урыҫ һалдатына ла бара тип уйлайҙар.

Ләкин беҙ бит азиаттар түгел. Оҫталыҡ та, тәжрибә лә етерлек. Әле яныраҡ ҡына бер нисә тиҫтә яуызды юҡ иттек. Ауылдарынан көл генә ҡалды.

Полковниктың ҡарашы ҡыҫылланды.

- Был крайҙың ер аҫты байлыҡтарын өйрәнеү өсөн башҡаланан бик етди экспедиция юлға сыға. Мин дә бында эш ирекқәндән килеп төшмәнем. Шуны иҫеңдән сығарма, экспедицияның именлеге өсөн һин туранан-тура яуап бирәсәкһең, Гаврилов!

- Быны ишетеүемә бик шатмын, ғали йәнәптәре!

- Бөтә ер өҫтө, ер аҫты байлығы - Рәсәйҙеке. Өмөттәр аҡланһа, яңы ҡәлғәләр, заводтар һалына башлаясаҡ. Тимәк, был яҡҡа эш көсө ағыласаҡ. Алда бөйөк бурыстар тора...

Пушкарев ҡарашын алыҫҡа төбәп, уйға ҡалды. Ерле халыҡ бында урыҫ морон да төртмәҫ, элеккесә яһаҡ түләп кенә хиләүәт йәшәрбеҙ, тип уйлай. Ләкин бөтөн донъя, йәшәйеш үҙгәрешкә дусар ителгән. Уны бөрөү ҙә туҡтата һәм кире бора алмай. Шуға күрә кемделер ғәйепләү ҙә урынһыҙ. Дәүләт сәйәсәтен дөрөҫ аңламауҙары яңы ихтилалға килтереүе ихтимал. Пушкарев ҡан ҡойоу яғында тормай. Ләкин төшөнөргә теләмәһәләр... Төшөндөрә алмаһалар... Һәр хәлдә, алдан күрә белергә, провокацияларға әҙер булырға кәрәк.

- Күпме беҙҙең яҡҡа ауған башҡорттар?

- Иң тоғроларҙың береһе - Ишҡәр бей.

- Ишҡәр! Ул турала һүҙ ҙә юҡ. Дәү ҡош. Ләкин был дәрәжәле затты әүрәтеүсе һин түгел. Ул заманында беҙгә бик теләктәш булды.

- Бәхәсләшмәйем, полковник! Тәнә барғаныбыҙҙа ла яҡшы ҡунаҡ итте...

- Йәнә шуныһы, дәү ҡош янына бәләкәсерәктәре лә йыйылыусан.

- Ғәфү итегеҙ, ғали йәнәптәре, быныһын бик төшөнөп етмәнем.

- Башҡорттарға туғанлыҡ, зат-ырыу төшөнсәһе бик ҡәҙерле. Олоно тыңлайҙар, уның һүҙе генә һүҙ булып ҡала. Башлыҡтарына бер һүҙһеҙ буйһоналар. Быны күҙ унынан ысҡындырмаҫҡа кәңәш итәм.

- Мәжүсиҙәр менән эш итеүе еңелерәк, ғали йәнәптәре. Улар төрлө әүрәткестәргә тиҙ алдана. Хатта шул әүрәткестең араҡы булыуы ла ихтимал. Ләкин бер Аллаға иман килтергәндәрҙең ҡиммәттәре үҙгәрә. Магометта тәртип ҡаты.

- Ҡыҙыҡтырыр бүтән нәмәләр ҙә етерлек. Цивилизация бүләгенән кем баш тартһын? Көйән табырға кәрәк. Беҙҙең ниәттен, ысынлап та, изге икәнлегенә ышандырырға кәрәк. Ә тормош бит уларҙы бик иркәләмәгән. Шулай булғас, уларҙың ҡайны берҙәрен беҙ иркәләргә тейеш.

Полковник, бер үҙе генә тороп ҡалғас, стенала элеүле торған бәләкәй көҙгө ҡаршыһына килеп баҫты. Оло диҡҡәт менән битенә текәлде, үҙе лә һиҙмәҫтән, сикәләге йөйҙә бер нисә мәртәбә һыпырып алды.

**(Дауамы бар).**

*ИЖАДХАНА*

# ТӨРКИӘГӘ БАРЫП...

## был бәйгелә лә беренсе урынға сыҡты



**(Башы 1-се биттә).**

З. Ғәлимова конкурстан үтеп, ә унда бер урынға дүрт кеше була, художество мәктәп-интернатында уҡый башлай. Уҡытыусыһы Айрат Ғайнанов был тырыш ҡыҙҙың булмышы рәссамлыҡ икәнен яҡшы аңлай һәм уға ошо юлын дауам итергә кәңәш бирә, дәртләндерә. Баш ҡаланың педагогик белем биргән юғары уҡыу йорттарында ул ваҡытта художество-графика бүлеге булмағанлыҡтан, ул Чебоксар ҡалаһының Яковлев исемендәге Сыуаш дәүләт педагогия институтының художество-графика факультетына уҡырға инә. Юғары белем алғас, тыуған ауылына ҡайтып бер йыл эшләй ҙә, хыял атының ялына йәбешеп, ҡабат Өфөгә юллана. Үҙе белем алып сыҡҡан Республика художество мәктәп-интернатына уға эш тәҡдим итәләр һәм ул бына 30 йылдан ашыу инде ошонда балаларҙы сәнғәт серҙәренә өйрәтә. Ошо ваҡыт эсендә уның бик күп уҡыусыһы төрлө кимәлдәге конкурстарҙа еңеү яулай, хатта һүрәт төшөрөү сәнғәте буйынса уҙғарылған республика олимпиадаһында тәүге биш урын уның уҡыусыларына эләгә. Ике тәрбиәләнеүсеһе Кирилл Дегтярев исемендәге конкурста еңә. Ә инде акварель һүрәттәре М.В. Нестеров исемендәге Дәүләт художество музейында, Рәсәй һәм сит ил музейҙарында һаҡланған Ләйсән Рәхмәтуллина, эштәре АҠШ-та, Францияла, Германила, Норвегияла, Японияла шәхси коллекцияларға һатып алынған Валерий Иванов-Военушкин, балалар китаптарын биҙәүсе Ирина Әхмәҙуллина - уҡытыусының ғорурлығы ла. Шулай уҡ ҡыҙы Ләйсәндең уның юлынан китеүе, рәссамлыҡ һөнәрен һайлауы ла әсә өсөн үҙе бер бәхеттер, сөнки һәр уҡытыусы уҡыусыһының үҙенән яҡшыраҡ, оҫтараҡ булыуын теләй, был йәһәттән З. Ғәлимова ҡыҙының һәләте менән һоҡлана. Киләсәктә икеһе бер булып, шәхси күргәҙмә ойошторорға ла ниәтләйҙәр әле.





Был йәһәттән Земфира Әхәт ҡыҙы йәш быуынға шәхси эшһөйәрлеге менән дә өлгө. Ниндәй генә конкурстар булмаһын, ул ҡатнашып ҡалырға тырыша. Уның эштәре М.В. Нестеров исемендәге художество музейы фондын биҙәй, шулай уҡ Чебоксар, Ҡурған ҡалаларында үткән конкурстарҙың каталогына ингән. 1992 йылда баш ҡаланың Киров районы буйынса йыл уҡытыусыһы бәйгеһендә ҡатнашып, лауреат була. Бер йылдан һуң иһә республика күләмендә үҙен һынап ҡарай һәм призлы икенсе урын ала. Тап шул йылда уның тыуған Лағыр ауылынан конкурста физика уҡытыусыһы Фәрит Хәйеров та ҡатнашып, беренсе урынға лайыҡ була. "Үҙ ауылдашың менән көс һынашыуы ауыр булманымы?" - тип ҡыҙыҡһынам. "Бәлки, ауыр ҙа булғандыр, әммә енеүселәр рәтендә икебеҙҙең дә булыуыбыҙ өсөн сикһеҙ ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙем", - ти Земфира Әхәт ҡыҙы.

Быйыл иһә Башҡортостан рәссамдары берлеге уға ТӨРКСОЙ рәссамдарының халыҡ-ара 13-сө ижади лабораторияһында ҡатнашырға тәҡдим итә. Төркиәлә үткән ижад көндәрен әле лә һағынып иҫкә ала З. Ғәлимова. Унда төрки телле илдәрҙән килгән 16 рәссам үҙ фантазияһын эшкә егә, төрлө образдар тыуҙыра. Кемдер лабораторня тамамланғансы бер генә картина яҙһа, тынғыһыҙ яҡташыбыҙ күберәк ижад итеп ҡалырға тырыша. Тап шул көндәрҙә уның ҡылҡәләме аҫтынан "Усман Хәмди заманындағы Стамбул", "Йәш Стамбул", шулай уҡ тыуған Башҡортостанына бағышланған картиналары тыуа. Яҡшылап ҡараһаң, был картиналарҙы бер сюжет линияһы бәйләп торған кеүек, уларҙа төп урында кеше образы тора. "Ни өсөн "Усман Хәмди заманындағы Стамбул"да ла, "Йәш Стамбул"да ла, "Мәғрүр тауҙар төн ҡараңғылығында йоҡлай. Янғантау" картиналарында ла кеше һыны күҙаллана?" тигән һорау биргәс, Земфира ханым үҙенең дәлилдәрен былай тип белдерҙе: "Усман Хәмди заманындағы Стамбул", һүҙылып, ҡулын алға һүҙып ятҡан оло кеше кеүек күренә. Сөнки ул инде үҙенең эшләйһе эштәрен тормошҡа ашырған, хәҙер тынысланып, ял итергә туҡтаған. Ә "Йәш Стамбул" картинаһында бала имеҙеүсе ҡатын образы төп урында биләй, сөнки әсә һөтөн имгән бала - ул ошо ерҙең киләсәге, уға әле үҫәһе, хыялдарын тормошҡа ашыраһы, ошо ерҙә хужа булып, аяғында ныҡ баҫып тораһы бар. Был образ нисек тыуҙы һуң? Төркиәлә балаларға мөнәсәбәт иҫ киткес, унда хатта балалар ете йәшенә тиклем әсә һөтө имеүе мөмкин. Ошо күренеш мине шаҡ ҡатырҙы һәм йәш ҡала бала образында күҙ алдыма баҫты. "Мәғрүр тауҙар төн ҡараңғылығында йоҡлай. Янғантау" картинаһында иһә ҡатынын ҡуйынына алып йоҡлаусы ир һүрәтләнә. Ысынында ла бит беҙҙең ауыл-ҡалалар тауҙар ҡуйынына һыйынып, тыныс йәшәй, хәүеф-хәтәрҙән тауҙар ышыҡлап тора", - тип аңлатты үҙенең ижад эштәрен.

Земфира Ғәлимова акварель жанрында ижад итә, әммә бөгөн ул батикка өҫтөнлөк бирә. Был үҙенсәлекле лә, ауыр ҙа юл. Сөнки акварелдә төҫтәрҙе үҙгәртергә мөмкин, ә батик ысулына был алым бармай, бында инде бер тапҡыр буяныңмы, уны үҙгәртеүе бөтөнләй икенсе һөҙөмтә бирергә мөмкин. Шулай уҡ батик менән картина яҙғанда ҡул аҫтында һәр ваҡыт ҡайнар балауыҙҙың булыуы ла мотлаҡ. Бәлки, шуғалыр ҙа, күпселек рәссамдар был ысулға мөрәжәғәт итергә батырсылыҡ итмәй. Хәҙерге заман ҡатын-ҡыҙҙары иһә батик стиле менән эшләнгән кейемдә, блузкаларҙы теләп кейә, палантиндарға төрөнөп, тағы ла серлерәк, нәзәкәтлерәк булып китә. З. Ғәлимова батик ысулы менән эшләгәндә башҡорт халыҡ ижадына, йолаларға мөрәжәғәт итә. "Йәнбикә менән Йәнбирҙе", "Ҡарғатуй" кеүек картиналар шул нигеҙҙә тыуған да инде. "Йәнбикә менән Йәнбирҙе" картинаһында геройҙар мәмерйә эсендә һүрәтләнә, әммә ул тирмә эсенә лә оҡшап китә. Йәнбикә бер үк ваҡытта тыуасаҡ сабыйы өсөн борсола, икенсе яҡтан сабырлыҡ менән сабыйын ҡулына алыу мәлен көтә, иренә һөйөү йөҙөнә сыҡҡан. Йәнбирҙе йөҙөндә хәстәрлек, батырлыҡ, аҡыл һәм тәүәккәллек яҙылған. Ғөмүмән, милли тематиканы рәссамдың һәр эшендә күрергә, һәр төҫ аша төҫмөрләргә мөмкин. Батик еңел ысул түгел, әммә Земфира Әхәт ҡыҙы өсөн ул - тормош асылы, йәшәү мәғәнәһе, ижад ҡомары. Уның акварель эштәрендә генә түгел, хатта бер-ике төҫ менән генә яҙған батик картиналарында ла йәйғор төҫтәре балҡыған кеүек, сөнки ижадсының күңеле йәйғор төҫтәре кеүек матур, унда яуызлыҡҡа, насарлыҡҡа урын юҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Изгелек эшлә лә һыуға һал, халыҡ күрер, халыҡ күрмәһә, балыҡ күрер, ти халыҡ мәҡәле. Земфира Ғәлимова иһә матурлыҡ тыуҙырып, уны кешеләргә өләшә лә, юлын артабан дауам итә. Баһаны иһә халыҡ, етәкселек ҡуя. Быны уның күп һанлы наградалары ла раҫлай. Ошо көндәрҙә иһә Төркиәнән тағы ла шатлыҡлы хәбәр килде - Земфира Әхәт ҡыҙы ТӨРКСОЙ рәссамдарының 13-сө ижади лабораторияһы һөҙөмтәләре буйынса еңеүсе булған.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*✓ Халыҡта, ир-егет 30 йәштә генә ир ҡорона инә, тигән һүҙҙәр бар. Мин шуны өҫтәр инем: 30 йәштә ир булып өлгөрмәгәнә бер ҡасан да өлгөрмәйәсәк. Шуға ла 30 йәшкә тиклем ата-әсә балаһына мотлаҡ ярҙамлашырға тейеш.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СОЦИАЛЬ СЕЛТӘР...

## үҫмерҙәргә зыян килтерә

■ Американың Сан-Диего университеты ғалимдары йоҡоноң оҙайлығы кешенең сәләмәтлегенә нисек йоғонто яһауын асыҡларға теләп тикшеренеүҙәр үткәргән. Һөҙөмтәлә улар тәүлегенә 5-6 сәғәт йоҡлау иң яҡшыһы тигән фекергә килгән. 14 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 5-6,5 сәғәттән оҙағыраҡ йоҡлау йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә килтерә икән. Шулай уҡ төндә йоҡламаусыларҙың да сәләмәтлегенә байтаҡ зыян килә, уларҙың ҡан баҫымы йыш күтәрелә.

■ Бөгөн йәштәр карьера эшләү өсөн ғаилә ҡорорға ашыҡмай. Әммә Американың Пенн-Стейт университеты белгестәре фекеренсә, 18 йәштән 25 йәшкә тиклем ғаилә ҡороу йәштәрҙең генә түгел, ә уларҙың буласаҡ балаларының да психологик сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай. 8 мең йәш ғаиләне тикшереп, психологтар шундай һығымта яһаған: иртә ҡоролған ғаиләләрҙә ата-әсәләр һәм балалар араһында мөнәсәбәт яҡшыраҡ була, был ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларҙың интеллект кимәле юғарыраҡ була.

■ 2011 йылдан Еврокомиссия балалар өсөн тәғәйенләнгән пластик шешәләр етештереүҙә "Бисфенол А" матдәһен ҡулланыуҙы тыя. Был химик ҡушылма баланың үҫешенә кире йоғонто яһауы ихтимал. Бисфенол А төрлө үтә күренмәле пластик һауыт-һаба етештереүҙә киң ҡулланыла. Был матдә бигерәк тә эҫе һәм майлы аҙыҡ менән бәйләнешкә ингәндә хәүефле. Әгәр ҙә бындай пластиктан яһалған шешә иҫкергән һәм унда һыйылған урындар бар икән, бисфенол А тағы ла күберәк бүленеп сыға.

■ Американың Йәмәғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үҫмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үҫмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Британия ғалимдары һанап сығарыуынса, ҡала халҡы йыл һайын уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла бысраҡ һауа һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә. Экологик комитет ағзаһы Джоан Валей был мәсьәләне тиҙ арала хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләй. Билдәле булыуынса, машиналар PM10 тип аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Британияның ҡайһы бер өлкәләрендә был өлөшсәләр күләме Евросоюз билдәләгән норманан күпкә юғары. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм туҡымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тиңләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыянын иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр. Шул уҡ ваҡытта Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, төтөн тәьҫиренән йөрәк сире киҫкенләшеп - 379 мең кеше, респиратор инфекцияларҙан - 165 мең, астманан - 36 мең 900, үпкә яман сиренән 21 мең 400 кеше үлгән.

ҒАИЛӘ ҠОРО

**Күптәребеҙ ауылда тыуып үҫһәк тә, ҡалала көн итергә тырышабыҙ, "Ауылды маҡта ла, ҡалала тор", тип кенә ебәргән булабыҙ ҡайһы саҡта. Уҡыу йорттары тамамлағандар ҙа тыуған яғына ҡайтып эшләргә атлығып тормай. Ниндәй ул бөгөнгө ауыл, ундағы халыҡ нисек йәшәй? Хәйбулла районы Татырүҙәк ауылында йәшәүсе матур ғаилә - Рәйфә һәм Урал ТУЛИБАЕВТАР менән ошолар һәм ғаилә, тәрбиә мәсьәләләре тураһында һөйләштек. Рәйфә Искәндәр ҡыҙы Татырүҙәк мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй, ә Урал Насирйән улы районда янғын һүндереү бүлеге етәксеһе вазифаһын башҡара.**



# АТАЙҘАРҘЫҢ ИРЛЕК АБРУЙЫН...

## әсәйҙәр тәрбиәләй

**➔ Күмәк хужалыҡтар тарҡалып бөткәс, ауылда йәшәүе ауыр, тип зарланып, ҡул ҡаушырып ултырыусылар ҙа, үҙ көнөн үҙе күреп, гөрләтеп донъя көтөүселәр ҙә бар бөгөн. Халыҡ бушҡа ғына, тырышҡанға дәүләт бар, тип әйтмәгәндер инде, мал тотоп, баҡса үҫтереп аҡса эшләргә мөмкинлек бар саҡта ауылда ниндәй эшһеҙлек булһын?!**

**УРАЛ:** Ысынлап та, бөгөн ауылда эшһеҙлек төп проблемаларҙың береһенә әүерелгән. Ҙурыраҡ ауылдарҙа, бигерәк тә район үҙәгенә, ҡалаға яҡын урынлашҡандарында был, бәлки, һиҙелмәйҙер ҙә, әммә бәләкәй ауылдарҙа ҡулаҡса табыу үҙе бер бәлә. Кем мал тота, шул насар йәшәмәй, тибеҙ ҙә ул, тик хәләл көс менән тапҡан нәмәнде аҡсаға әйләндереүе ауыр мәсьәлә. Транспорты ла, малға, ҡош-ҡортҡа ашатырға аҙығы ла кәрәк. Малды алыпһатарҙарға осһоҙға ғына тапшырырға мәжбүр күптәр. Шуға ла хәҙер вахта ысулы менән ситкә йөрөп эшләүселәр көндән-көн күбәйә. Бөгөн ауылда фельдшер, уҡытыусынан тыш, тап улар аҡсалы кеше булып иҫәпләнә. Ғаилә башлығының ситтә йөрөүенең кире яҡтары бар: ауылда ир-ат аҙая, донъя көтөү, бала ҡарау, мал бағыу ҡатын-ҡыҙ елкәһенә төшә. Көнә-төнә йорт, ихата эштәренән бушамаған әсәй балаларына ниндәй тәрбиә бирә алһын? Атай абруйының юғалыуы, атайҙан ҡурҡыу тигән нәмәнең юҡҡа сығыуы ошонан башлана ла инде.

**РӘЙФӘ:** Нисек кенә булмаһын, күмәк хужалыҡ шарттарында эшләп күнеккән ауыл кешеһе бөгөн үҙ-үҙенә эш булдырып, аҡса эшләү мөмкинлеген ҡуллана һалып бармай. Икенсенән, ауыл хужалығы ул шундай өлкә: унда бер йыл ғына тир түгеү кәрәкле һөҙөмтә бирмәй, ул оҙайлы хеҙмәт талап итә. Иген сәсәм, күпләп мал үҫтерәм, тиһән, туплаған маяң да булыуы шарт, шулай ҙа тирең дә ҡалып булырға тейеш. Ә былай ғаиләһен туйындырырлыҡ йәшелсә-картуфын үҫтерә хужабикәләр, ҡышҡылыҡҡа май-ҡоротон да йыя, һәр ғаилә һуғым да һуя. Әлбиттә, ҡулаҡсаһыҙ ситтә бала уҡытҡандарға ҡыйынға тура килә инде. Һуңғы осорҙа күҙәтеп йөрөйөм - ауыл кешеһенең дә психологияһы үҙгәрә бара. Заманға ҡулайлаша, күнә барабыҙ шикелле, ауылдаштар, таныштар араһында эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлаусылар күбәйә бара. Мәҫәлән, ғаилә дуҫтарыбыҙ Зилә һәм Ишдәүләт Рыҫәмбәтовтар районда дарыухана һәм аҙыҡ-түлек селтәре булдырып, һатыу итәләр.

**➔ Бөгөн юғары белем алыусы йәштәр күп, әммә улар уҡыуҙы тамамлағас, районға эшкә ҡайтырға ашыҡмай. Бөгөнгө йәш белгескә ауыл еренә ерегеп китеүе, йорт һалып сығыуы ла еңел түгел. Һеҙ вуз тамамлап, Өфөнән ауылға ҡайтҡан мәлдә иң ҙур ярҙамды кем күрһәтте?**

**УРАЛ:** Беҙ Советтар Союзы заманында белем алып, эшкә урынлашып, тәжрибә туплап өлгөрҙөк. Ҡулға диплом алып, Өфөнән ҡайтҡас, иң ҙур ярҙамды ата-әсәйем күрһәтте. Тәүҙә уларҙа йәшәнек, ул ваҡытта фатир алыу мөмкинлеге була торғайны, күп тә үтмәй, беҙгә лә фатир бирҙеләр. Мин совхоздың мастерскойында, Рәйфә мәктәптә уҡытыусы булып эшләне. Бөгөнгө көн менән сағыштырғанда, йәш белгес ул заманда ҡурҡмайынса ауылға эшкә ҡайта ала ине, сөнки һинең эшеңде етәкселәр күрә белде. Миңә байтаҡ йылдар, мәҫәлән, совхоздың баш инженеры булып, һуңынан ауыл хужалығы идаралығында эшләп алырға тура килде. Етәкселәр талапсан да булды, ярҙам ҡулы ла һуҙа белде. Мәктәп, колхоз-совхоз, район кимәлендә булһынмы, уныһы мөһим түгел, бар нәмә етәксенән тора. Минең үҙемә гел яҡшы етәкселәр тура килде. Ул саҡтағы район башлығы Фәтих Мөхәмәтйән улы Ҡаҙаҡбаев ваҡытында уҡ Хәйбулланың төпкөл ауылдарына ла газ үтте, юлдар һалынды. Әлеге район башлығы килгәс тә район төҙөкләнеүен дауам итә. Ҡалалағы кеүек шарттар бар, баш ҡалаға ла 5-6 сәғәттә барып етеп була.

**РӘЙФӘ:** Мин дә бөгөн йәш белгестәргә ул саҡтағы кеүек шарттар юҡ, тип иҫәпләйем. Бәлки, бөгөнгө көн юғарылығынан шулай тойолалыр, әммә беҙгә барыбер еңелерәк булған. Әллә Урал ошо ауыл егете булғанға, йәш белгескә ҙур ышаныс белдерҙеләр, мине лә бик йылы ҡаршы алдылар. Тәүҙә мәктәптә рус һәм немец теленән уҡыттым, һуңынан илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, урыҫ мәктәбе булыуға ҡарамаҫтан, беренселәрҙән булып башҡорт телен уҡыта башланым. Артынан йөрөп, күп көс һалып, кабинет эшләттем. Бөгөн ул районда иң һәйбәт кабинеттар иҫәбенә инә. 2002 йылда башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләренә арналған республика кимәлендәге конференция беҙҙең мәктәптә лә үтте. Мәктәптә эшләүемә 25 йыл булып китте, башҡорт телен яратып өйрәнеп, бөгөн үҙҙәре уҡытыусы булып балалар уҡытып йөрөүсе уҡыусыларым бар, шуныһы менән бигерәк ғорурланам.

**➔ Ата-әсәнең балаһына ярҙам итеү йолаһы халҡыбыҙҙа электән булған да инде. Сит илдәге кеүек, баланы балиғ булғас та өйҙән сығарып ебәрмәйҙәр...**

**УРАЛ:** Халыҡта, ир-егет 30 йәштә генә ир ҡорона инә, тигән һүҙҙәр бар. Мин шулай тип өҫтәр инем: 30 йәштә ир булып өлгөрмәгәнә бер ҡасан да өлгөрмәйәсәк. Шуға ла 30 йәшкә тиклем ата-әсә балаһына мотлаҡ ярҙамлашыу, тигәндә тулыһынса уның проблемаларын хәл итеү, уның өсөн аҡса табыу, тип аңларға кәрәкмәй. Балаң ир ҡорона ингәнсе, уны күҙәтеп, кәңәштәрең менән тура юлға төшөрөп тороу мөһим. Беҙҙең улыбыҙҙың һәм ҡыҙыбыҙҙың инде үҙҙәренең ғаиләләре бар, шулай булһа ла, йәшәгән ерҙәренә барып, тикшереп кенә торабыҙ. Миңә лә ата-әсәйем һәр саҡ ярҙам итте. Ата-әсәне һайлап алмайҙар, тиҙәр, шулай ҙа миңә иң яҡшы атай менән әсәй эләккән. Атайым Насирйән Тулибаев БР-ҙың атҡаҙанған механизаторы, Урал арьяғының иң алдыңғы комбайнсыларының береһе. 1979 йылда 25 центнер иген урып, ВДНХ-ға саҡырылып, еңел машина бүләк итеп ҡайтаралар. Яңылышмаһам, Башҡортостанда ундай кешеләр өсәү генә шикелле. Әсәйем һауынсы булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡты. Алты бала тәрбиәләп, уларҙың би-

шеһенә юғары белем бирҙеләр. Беҙҙе - дүрт малай һәм ике ҡыҙҙы гел шәхси өлгөләрендә тәрбиәләнеләр. Бер ҡасан да уларҙың талашҡанын, атайымдың эскәнен күрмәнем. Быны менән, үҙең ниндәй, балаларың да шундай, тип әйтергә теләйем.

**РӘЙФӘ:** Минең әсәйем сөгөлдөр үҫтерҙе, атайым таҡта ярыу цехында эшләне. Икеһе лә ябай эшсе булһалар ҙа, күңелдәре иҫ киткес матур уларҙың. Атайым иртәрәк баҡыйлыҡҡа күскәс, беҙҙең өсөн әсәй һүҙе һүҙ булды, уның күҙенә ҡарап ҡына торҙоҡ. Әсәйем телгә татлы, төрлө мәҡәл-әйтемдәр ҡулланып һүҙ һөйләргә әүәҫ. "Кешене исем матурламай, эше матурлай", тип әйтергә ярата ул. Бер намаҙын ҡалдырмай, ауылдаштарым уны яратып "матур әбей" тип йөрөтә. Бөгөн уларҙың ете балаһы ла үҙ ояһын ҡороп йәшәй. Милли көрәш буйынса вице-чемпион булған Вәкил ағайым Ильясов бар туғандарыбыҙ өсөн атай урынына булды һәм әле лә һәр беребеҙҙең тормошо менән ҡыҙыҡһынып тора. Ниндәй генә мәсьәлә килеп тыумаһын, тәүҙә уның менән кәңәшләшмәйенсә эш эшләмәйбеҙ. Наил ағайым тәбиғәте менән ер кешеһе, уның Ауырғазы районы Төрөмбәт ауылында шәхси хужалығы бар, ул иген сәсеп-урыу менән шөғөлләнә. Юнир ҡустымды ла республика халҡы милли көрәш батыры тип белә. Ҡыҙ туғандарым да уҡыу йорттары тамамлап, төрлө урындарҙа эшләп йөрөй.

➔ **Улығыҙ һәм ҡыҙығыҙ үҫкәндә нимәгә күберәк иғтибар бүлергә тырыштығыҙ?**

**РӘЙФӘ:** Ҡайһы бер кеше балаһын, тәрбиәләйем, тип, әрләп үҫтерә. Үҙебеҙ үҫкәндә лә атай-әсәйҙең тауыш күтәреп әрләгәнен хәтерләмәйем. Урал да балаларға ла, миңә лә ауыр һүҙ әйтмәй. Киреһенсә, улыбыҙ һәм ҡыҙыбыҙҙы артыҡ иркәләтә кеүек тойолоп китә. Азатҡа ла "улыҡайым", тип кенә өндәшә. Бала үҫтергәндә өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булһа, еткән, тиеп тынысланырға ярамай, уларҙың күңеле лә бөтөн булыуын ҡайғыртырға кәрәк. Икебеҙ ҙә көндәр буйына эштә булһаҡ та, балаларҙы иғтибарҙан һәм наҙҙан мәхрүм итмәҫкә тырыштыҡ. Әле шатланып бөтә алмайым, балаларыбыҙ бер-береһе өсөн дә, атай-әсәй тип тә өҙөлөп тора.

**УРАЛ:** Бала тәрбиәләгәндә бер һүҙле булыу мөһим. Ғаиләлә ир менән ҡатындың бер-береһен еңер өсөн көрәше яҡшылыҡҡа илтмәй, киреһенсә, төрлө низағтар тыуҙыра, тойғоларҙың һүрелеүенә килтерә. Һәр кем үҙ урынын белергә тейеш, шулай ҙа башҡорттарҙа борон-борондан атай абруйы тигән төшөнсә булған. Бөгөн ҡатын-ҡыҙ иренән алдараҡ атларға, унан алдараҡ һүҙ әйтергә ынтыла. Тимәк, ул йәйләп ғаиләлә лә баш булырға тырыша. Бындай әсәй кеше ҡыҙына өлгө күрһәтә, уныһы, үҙ сиратында, үҙенең ирен баҫырға тырышасаҡ. Һәм тағы: әсәй, йәғни ҡатын кеше лидер булған ғаиләлә тәрбиәләнгән ир бала мәшәү була, һуңынан ул үҙ ғаиләһендә лә ҡатын һүҙенән сыға алмай, атай һүҙе, атай абруйы тигән нәмәне яулай алмай.

➔ **Ҡатнаш никахтар проблемаһы милләтебеҙҙең бер бәләһенә әүерелгәнен иҫәпкә алып, балаларығыҙға кейәү һәм килен үҙебеҙҙең милләттән булырға тейеш, тип әйтә инегеҙме?**

**УРАЛ:** Беҙ йәш саҡта икенсе милләттән кәләш алыу, кейәүгә сығыу ғәҙәти күренеш ине. Күпме зыян күрҙе бынан милләт, күпме кешеләрҙе бәхетһеҙ яһаны. Быны йәштәр хәҙер яҡшы аңлай һәм үҙҙәре үк үҙ милләте кешеһе менән ғаилә ҡорорға ынтыла. Беҙҙең улыбыҙ ҙа башҡорт ҡыҙына өйләнде. Гөлнара ҡыҙыбыҙ ҙа Хәйбулла егетенә кейәүгә сыҡты. Әле ике ейәнсәребеҙгә ҡарап, олатай-өләсәй, ҡартатай-ҡартәсәй булыу шатлығын кисереп йөрөгән сағыбыҙ.

**РӘЙФӘ:** Әсәй кеше булараҡ, балаларға гел әйтеп кенә торҙом. Сит милләт кешеһе, сит мәҙәниәт беҙҙекенә ҡарағанда насар түгел, әммә һәр милләткә үҙ кешеһе яҡыныраҡ, ә ҡатнаш никах һәр милләт өсөн дә бәлә, тием. Был йәһәттән балаларҙы дөрөҫ тәрбиәләй алғанбыҙ, улым - яҡшы ир, ғаилә башлығы, ҡыҙым - яҡшы ҡатын була белә, шуға ла бөгөн ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарым, килен-кейәүем алдында ла йөҙөм яҡты. Ғаиләлә бигерәк тә ҡыҙ тәрбиәһенә иғтибар биреү мөһим, сөнки, ни тиһәң дә, ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын икәнен онотторға ярамай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ололар бушҡа ғына "Ҡояш ҡайҙа ла бер" тип әйтмәй икән. Шуға ла йылыраҡ, яҡтыраҡ ҡояш эҙләп, ғүмерҙе заяға уҙғарғансы, үҙеңә яҡындарыңды йылытырлыҡ ҡояш булып йәшәүгә ни етә һуң, тигән уйҙар менән сығылды был күркәм ғаиләнең йортонан. Бер-береһен ярты һүҙҙән аңлап йәшәгән Тулибаевтарҙың бәхет туҫтаҡтарының тулып-ташып тороуы ла ошо ябай тормош ҡанунын аңлап, һәр яңы көндән шатлыҡ табып йәшәй белеүҙән киләлер ул.**

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ҺАРАН БУЛМА...

## йомарт бул

**Йомарт - Аллаһ ихсан ҡылған мөмкинлектән файҙаланып, уның ниғмәттәрен башҡа кешеләр менән уртаҡлашыусы, игелек ҡылыусылыр. Һаран иһә - Аллаһ уға ихсан иткән байлыҡты үҙенеке генә тип белеүсе, уны башҡалар менән уртаҡлашмаусы, шул рәүештә, шөкөр итеү вазифаһын башҡармаусылыр.**

Раббыбыҙ үҙенең бер аятында һарандарҙы ғәйепләй, уларҙы киҫәтә. Рәсүлебеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иһә йомартлыҡ менән һаранлыҡ хаҡында бына ниҙәр әйтә:

- Йәннәт - йомарттар урыны, һарандарҙыҡы түгел...

- Йомартлыҡ - тамыры йәннәттә булған ағастыр. Кем уның (йомартлыҡтың) тармағына йәбешһә, тармаҡ уны тамырға, йәғни йәннәткә алып килер.

- Һаранлыҡ - тамыры йәһәннәмдә булған ағастыр. Кем уның тармағына йәбешһә, тармаҡ уны тамырға, йәғни йәһәннәмгә алып килер.

- Йомарт Аллаһҡа яҡындыр, һаран иһә Унан йыраҡтыр.

Хәҙрәти Хәсәндең дә был йәһәттән һүҙҙәре бар: "Бәндә (ҡол) йомартлыҡ юлында үрнәкте Аллаһтан алырға тейеш. Аллаһ уға муллыҡ ихсан итһә, ул да тирә-йүндәгеләр өсөн йомарт, мохтажлыҡҡа дусар булған ваҡытта иһә тыйнаҡ булырға тейеш.

Хәҙрәти Муса (ғәләйһиссәләм) өммәтенән Карун исемле бер кеше бик бай, ләкин ифрат һаран була. Һаранлығының сәбәбен былай тип аңлата икән:

- Мин был байлыҡҡа үҙ һәләтем менән эйә булдым, кемгә булһа ла унан өлөш сығарырға тейеш түгелмен.

Раббыбыҙ Ҡөрьән-Кәримдә Ҡарундың был һүҙҙәрен бөтөн кешеләргә ғибрәт булһын тип бирә. Шулай итеп, Ул: "Аң булығыҙ, һеҙ ҙә Ҡарунға оҡшап ҡала күрмәгеҙ", - тип инсандарҙы киҫәтә. Йәғни һаранлыҡ күрһәткән кеше Ҡарунға оҡшар. Йомарт кеше иһә Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәтенә эйәргән булыр.

Имам Әғзәм Хәҙрәттәрен "йомарттарҙың солтаны" тип әйтһәк тә хата булмаҫ. Хаж ваҡытында уны зыярат итергә килгән кешеләр Имам Әғзәмгә йөҙ пар аяҡ кейеме бүләк итәләр. Ике көн үткәндән һуң әлеге кешеләр Әбү Хәнифәне (йәғни Имам Әғзәмде) баҙарҙа улы Хаммат өсөн аяҡ кейеме алғанда күрәләр һәм янына килеп һорайҙар:

- Йә Имам, әле ике көн элек кенә һеҙгә йөҙ пар аяҡ кейеме бүләк иткән инек. Уларға ни булды?

Былай тип яуап бирә Әбү Хәнифә:

- Барыһын да өләшеп бөтөрҙөм, бер пар ҙа ҡалманы. - Һәм мәсьәләгә асыҡлыҡ индерә: - Минең шундай ғәҙәтем бар: берәүгә бүләк биргәндә, уның янындағыға ла бирмәй ҡалмайым. Рәсулуллаһ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Берәүгә бүләк бирелгәндә, уның янында һәм уның менән бергә булған кешеләр ҙә бүләккә уртаҡ булырҙар", - тип әйтә. Мин дә шул һүҙҙән сығып эш итәм. Аяҡ кейемдәренең барыһын да янымдағыларға һәм яҡындарыма өләштем. Улым Хамматҡа ҡалманы.

Имам Әғзәм Хәҙрәттәре, һүҙен дауам итеп, былай тип һөйләй:

- Берәү миңә һый-хөрмәт күрһәтһә, мин уға тағы ла олораҡ һый-хөрмәт күрһәтәм. Был ғәҙәтем Ҡөрьән-Кәримдең аятына нигеҙләнә. Унда: "Һеҙгә сәләм бирһәләр, һеҙ сәләмде тағы ла мулыраҡ итеп ҡайтарығыҙ", - тиелә.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙан берәү Ғәйшә вәлидәбеҙгә бүләк ебәрә. Әммә хәҙрәти Ғәйшә уны ҡабул итмәй. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) быны белгәс, һорай:

- Эй, Ғәйшә, ниңә бүләкте ҡабул итмәнең?

-Уны ебәргән кеше минән мохтажыраҡ булғаны өсөн, йә Рәсулуллаһ!

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай ти:

- Һин бүләкте ҡабул ит, ләкин һуңғараҡ ул ҡатынға ҙурыраҡ бүләк бир һәм үҙенә ярҙам ит.

Раббыбыҙ йомарттыр. Ул инсанда ла Затына хас был сифатты күргәс, уны һөйә, уның йомартлығына лайыҡ ниғмәт ихсан итә, малының бәрәкәтен арттыра, мәшәҡәтен аҙайта. Һаранды Раббыбыҙ һөймәҫ. Сөнки унда йомартлыҡ сифатының әҫәре лә юҡ. Аллаһы Тәғәлә һаран бәндәнең малының бәрәкәтен аҙайта, мәшәҡәтен арттыра.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ижади күтәренкелек мәлендә барыһы ла һеҙҙең ҡулда

Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, тәрән итеп тын алып һәм тыныс картиналарҙы күҙаллау аша үҙегеҙҙең эске донъяғыҙға сәйәхәт ҡылыу дауалау һөҙөмтәһе лә бирә. Ул тәнгә, аңға һәм йәнгә файҙа килтерә. Әммә артабанғы аҙымды яһап, үҙегеҙ йәки икенсе берәйһе өсөн яҡшылыҡ күҙаллап, һеҙ үҙегеҙгә генә түгел, бәлки, бик күп кешегә, бөтөн донъяға ярҙам итәһегеҙ.

Әгәр бындай картиналар хыялда ғына һәм бер кемгә лә ауырлыҡ тыуҙырмай икән, уларҙың һеҙ нисек күҙ алдына килтергәнһегеҙ, шулай тормошҡа ашыуы ихтимал. Көсһөҙләнгән ваҡытта шундай ыңғай картиналарҙы уйлау - Ижадсының арҡаҙашы, ижадташы булараҡ, һеҙҙең оло бурысығыҙ. Бында ниндәй ҙә булһа сикләүҙәр бармы? Бер ниндәй ҙә сиктәр юҡ. Эйе, өндәге төш ярҙамында бөтөн нәмә үҙегеҙҙең ҡулығыҙҙа була.

Ҡапыл яңы автомобиль алыуға, ҡапыл ҡабаттан йәшәреп китеүегеҙгә өндәге төштөң ни ҡыҫылышы бар? Мәктәптә йәки ғибәҙәт ҡылған урындарҙа һөйләгән һүҙҙәр күҙлегенән ҡарағанда - бер ниндәй ҙә. Әммә яңы фән күҙлегенән ҡарағанда - туранан-тура бәйләнеше бар. Сәбәп һәм һөҙөмтә мөнәсәбәте. Уйҙағы хыял, өндәге төш сәбәп булып тора. Яңы автомобиль, проблеманы хәл итеү юлын табыу, яңы көс - һөҙөмтә. Беҙҙең тормош сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәренән тора. Аң ижадҡа һәләтле. Уны нисек файҙаланаһығыҙ - тормошоғоҙ шулай формалаша. Был һеҙҙең өсөн яңылыҡ икән, тимәк, яҡшы һәм ваҡытында ишетелгән яңылыҡ.

Һеҙҙең аңығыҙ һәм сәләмәтлегегеҙ, аңығыҙ һәм банктағы иҫәбегеҙ, аңығыҙ һәм кешеләр менән мөнәсәбәтегеҙ сәбәп-эҙемтә бәйләнешендә тора. Һығымтаны үҙегеҙ яһағыҙ.

Барлыҡ был миҫалдарға дөйөм иҫкәрмә - тәнде көсһөҙләндергән ваҡытта ыңғай уйҙа булыу. Ыңғай фекерләү - проблеманың түгел, хәл итеүҙең бер өлөшө ул. Кешеләр үҙ аңын яҡшыраҡ файҙаланырға тырыша. Был аҡрын ғына тормошҡа ашырыла. Әммә һуғыштар туҡтаһын, төрмәләр һәм дауаханалар бушаһын, урмандар һаҡланһын, Ер планетаһы ҡотҡарылһын, тиһәк, ашығырға кәрәк.

Көндәлек бер төрлөлөктән ялҡып, Кэрол ижади фекерләү курстарына килә. Эше ҡәнәғәтлек килтермәй, шәхси тормошо бөтөнләй йәйләнмәй. Ике аҙна үҙен яҡшы вазифала, ысын фекерҙәштәр солғанышында тип хыялланып, өндәге төш күнегеүҙәренән һуң ул перспективалы эш таба, бер ир-ат менән танышып, артабан уға кейәүгә сыға.

Ә һеҙ нимәнән башланығыҙ? Өндәге төшөгөҙҙә тормошоғоҙҙоң мөхәббәт менән тулыуын йәки банк иҫәбендәге сумманың артыуын күҙаллағыҙмы? Яуап тәүҙә үк бирелгәйне. Мин һеҙгә үҙегеҙгә түгел, ә башҡаларға ярҙам итеүҙән башларға тәҡдим иттем. Был һеҙҙе Ижадсының арҡаҙашы итә. Ижадсы һеҙҙә үҙенең арҡаҙашын таныһа, үҙегеҙгә генә түгел, тотош Ер шарына ижади ярҙам итеү һәләтенә эйә буласаҡһығыҙ.

Минең һеҙгә кәңәшем: тормошоғоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртергә теләһәгеҙ, гел ыңғай фекерләгеҙ. Бындай фекерләү аңығыҙҙың бөйөк көсөн файҙаланыуҙы күрһәтә. Шул саҡта һеҙ күҙгә күренгән генә түгел, хатта күренмәгән мәсьәләләрҙе хәл итәсәкһегеҙ. Һеҙ, әйтерһең, Аллаһтың уң ҡулы аҫтында булырһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 6 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
11.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Побег". Остросюжетный сериал
22.30 "Екатерина III"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя", 5-я серия. Криминальная драма
00.50, 03.05 "Лемминг"
03.00 Новости
03.30 "Тайны Тихого океана. Странные острова"
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Конвейер смерти. Никотин"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 205-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 45-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Подарок судьбы", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.50 "Дежурный по стране"
00.50 "Вести+"
01.10 "Честный детектив"
01.45 "Бумбараш". Приключения
04.30 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Кодекс чести"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Псевдоним "Албанец"-3". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "В зоне особого риска"
01.45 "Журавль в небе"
04.00 "Бежать из ГУЛАГа"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Ватан. События недели"**
**10.00 "Детский час с "Тамыром"**
**11.05 "Эдера"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Байман"**
**12.50 "Хрустальный соловей-2010"**
**13.35 "На своей земле"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто"**
**16.05 "Побег"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.20 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Доброе сердце"**
**19.20 "Легенды спорта"**
**19.45 "Формула успеха"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Джейн Остин"**
**01.10 Прогноз погоды**

## 7 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег", 14-я серия
22.30 "Екатерина III"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Врата", 8-я серия
00.40 "Дом вверх дном". Комедия
02.40, 03.05 "Мертвые пташки"
03.00 Новости
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 206-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 46-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Подарок судьбы", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Потерянная граница". Боевик
02.25 "Горячая десятка"
03.30 "Сердце не камень", 1-я серия. Драма

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Псевдоним "Албанец"-3", 14-я серия
23.25 "Сегодня"
23.40 "Очная ставка"
00.30 Футбол. Лига Чемпионов УЕФА. "Барселона" (Испания) - "Рубин" (Россия). Прямая трансляция
02.40 "Лига Чемпионов УЕФА. Обзор"
03.10 "Сувенир для прокурора". Детектив

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Гора новостей"**
**10.15 "Царь горы"**
**10.30 "Бинди - девочка из джунглей"**
**11.00 "Эдера"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Бабушкин сундучок"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Книга сказок"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто"**
**16.05 "Джейн Остин"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.35 Новости (на русск. яз.)**
**18.45 "Урал Лото ньюс"**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Молот-Прикамье" (Пермь)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.20 "Быть Стэнли Кубриком"**
**00.55 Прогноз погоды**

## 8 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Голоса", 11-я серия
22.30 "Екатерина III"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Обмани меня", 7-я серия
00.40 "Сказки стриптиз-клуба"
02.50, 03.05 "Ну что, приехали?"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Триумф смешной девчонки. Алиса Фрейндлих"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 207-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 47-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Подарок судьбы", 7-я, 8-я и 9-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Камуфляж". Комедия
02.10 "Тот самый Мюнхгаузен", 1-я серия. Приключения
03.35 "Сердце не камень"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Псевдоним "Албанец"-3", 15-я и 16-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Час Волкова"
00.30 "Мужские игры Екатерины Фурцевой". Док. фильм
01.20 "Главная дорога"
01.50 "Еще одна пятница"
03.25 "Тарзан и дьяволица"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Гора новостей" (на башк. яз.)**
**10.15 "Книга сказок"**
**10.30 "Бинди - девочка из джунглей"**
**11.00 "Эдера"**
**11.50 "Город мастеров"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Райхан"**
**12.55 "Город мастеров"**
**13.10 "Байык" (на башк. яз.)**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто". Мультсериал**
**16.05 "Быть Стэнли Кубриком"**
**17.30 "Тивлет"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.20 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Хазина"**
**19.45 "Деловой форум"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Именинница"**
**00.45 Прогноз погоды**

## 9 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Голоса", 12-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами"
00.50 "Бриллиантовый полицейский". Комедия
02.35, 03.05 "Что случилось прошлой ночью"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 208-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 48-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Подарок судьбы", 10-я и 11-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Любовная история". Мелодрама
02.15 "Тот самый Мюнхгаузен", 2-я серия
03.35 "На последнем плесе"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски. Молочная отрава"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Час Волкова". Сериал
00.30 "Игра на выживание". Триллер
02.20 "Крестовый поход в джинсах"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Гора новостей" (на русск. яз.)**
**10.15 "Цирк в 13 метров"**
**10.30 "Бинди-девочка из джунглей"**
**11.00 "Эдера"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Историческая среда"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Муз-базар"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей" (на русск. яз.)**
**15.15 "Сулпылар"**
**15.35 "Учим башкирский язык"**
**15.50 "Наруто". Мультсериал**
**16.15 "Именинница"**
**17.45 "Урал Лото ньюс"**
**17.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Металлург" (Новокузнецк) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Дневник XIII Международного фестиваля оперного искусства "Шаляпинские вечера в Уфе"**
**23.10 "Час пик"**
**01.00 Прогноз погоды**

## 10 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "ДОстояние РЕспублики"
00.00 "Криминальное чтиво". "Черная" комедия
03.05 "Сахара"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15, 04.20 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 209-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 49-я серия
20.00 "Вести"
20.30 " Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Юрмала-2010"
22.50 "Девчата"
23.45 "Дело о Пеликанах". Детектив
02.40 "Крещендо". Фильм ужасов

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Мама в большом городе"
09.00 "В зоне особого риска"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Суперстар" представляет: "Волшебный бал Сергея Пенкина"
22.50 "НТВишники"
23.55 "Женский взгляд"
00.45 "Анализируй это". Комедия
02.45 "Мэрия". Триллер

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 18.40 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Гора новостей" (на башк. яз.)**
**10.15 "Сулпылар"**
**10.35 "Бинди - девочка из джунглей"**
**11.00 "Эдера"**
**12.00, 18.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Нежность и вечность башкирской шали"**
**13.35 Концерт**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Цирк в 13 метров"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто"**
**16.10 "Час пик"**
**18.20 "Криминальный спектр"**
**19.00 "Замандаш"**
**19.30 "Валиди: человек пера и сабли"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Парад планет". 1-я часть**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Парад планет". 2-я часть**
**23.45 Дневник XIII Международного фестиваля оперного искусства "Шаляпинские вечера в Уфе"**
**23.55 "Вне игры"**
**01.35 Прогноз погоды**

## 11 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.20, 06.10 "Доживем до понедельника". Драма
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Смак"
10.50 "Повелитель пластилиновых ворон Александр Татарский"
12.10 "Голоса". Сериал
16.20 "Главное, чтобы костюмчик сидел"
17.20 "Кто хочет стать миллионером?!"
18.30 "Большие гонки"
20.00 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы. Продолжение"
22.00 "Прожекторперисхилтон"
22.40 "Детектор лжи"
23.15 "Что? Где? Когда?"
00.20 "Искусственный разум". Фантастическая драма
03.10 "Двое"
05.10 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.05 "Внимание! Всем постам..."
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.30 "Подари себе жизнь"
10.05 "Формула совершенства"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Цыганочка с выходом"
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Цыганочка с выходом"
16.15 "Новая Волна-2010". Лучшее
18.10 "Десять миллионов"
19.15 "Я тебя никому не отдам". Мелодрама (в перерыве - 20.00 "Вести в субботу")
23.45 "Дорога, ведущая к счастью". Драма
01.35 "Обитель зла-3". Фантастический триллер
03.30 "Гольф-клуб-2". Комедия

### НТВ
04.50 "Сказки Баженова"
05.20 "Маугли"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.45 "Авиаторы"
09.25 "Живут же люди!"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.00 "Спето в СССР"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Последнее слово"
17.30 "Очная ставка"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Музыкальный ринг НТВ". "Супербитва"
00.15 "Парк Юрского периода". Фантастический триллер
02.40 "Настоящее преступление". Триллер

### БСТ
**07.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.15 "Волшебное приключение"**
**09.35 "Бинди - девочка из джунглей"**
**10.00 "Детский час с "Тамыром"**
**11.05 "Юлдаш йыры"**
**13.05 "Тэмле"**
**13.35 "Дарю песню"**
**14.35 "Автограф"**
**15.00 "В поисках затерянного города"**
**15.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.05 "Доброе сердце"**
**19.30 "Хрустальный соловей-2010"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.05 "На своей земле"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 Дневник XIII Международного фестиваля оперного искусства "Шаляпинские вечера в Уфе"**
**22.10 "Етеган"**
**23.00 "Пришельцы"**
**00.55 Прогноз погоды**

## 12 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Чужая родня"
06.00 Новости
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.10 "Побег", 4 серии. Криминальная драма
16.20 "Шрек-2". Полнометражный анимационный фильм
18.00 "Лед и пламень"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Yesterday Live"
23.20 Познер"
00.30 "История рыцаря". Приключения
03.05 "Тайны Тихого океана. Хрупкий рай"

### РОССИЯ 1
05.20 "Отцы и деды"
07.00 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Утренняя почта"
09.00 "Сто к одному"
09.45 "Городок"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Ты и я"
12.10 "Цыганочка с выходом"
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Цыганочка с выходом"
16.15 "Смеяться разрешается"
18.05 "Стиляги-шоу"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Мама напрокат". Лирическая комедия
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Два веселых гуся"
00.30 "Змеиный полет". Триллер
02.35 "Как на ладони". Драма

### НТВ
05.10 "Сказки Баженова"
05.40 "Дикий мир"
06.20 Мультфильмы
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Дело темное. Гибель группы Дятлова"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Суд присяжных: главное дело"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски. Овощной беспредел"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.50 "Фокусник-2". Криминальная драма
23.50 "Нереальная политика"
00.20 "Война". Боевик
02.20 "Дьявольские стрелки". Вестерн
03.55 "Очная ставка"

### БСТ
**07.00 Новости (на русск. яз.)**
**07.10 "Млечный путь". А. Шаймуратова**
**07.55 "Легенда о Сиде"**
**09.35 "Бинди - девочка из джунглей"**
**10.00 "Детский час с "Тамыром"**
**11.05 "Мы вместе". Радио "Юлдаш" - 10 лет**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Бабушкин сундучок"**
**14.00 "Дарю песню"**
**15.05 Чемпионат страны по волейболу среди команд суперлиги. "Урал" (Уфа) - "Искра" (Одинцово)**
**17.00 "Молодая семья-2010"**
**17.30 "Пришельцы"**
**19.15 "Байык". Телевизионный конкурс любителей башкирского танца**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.35 "Новое кино"**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.15 "Полезные новости"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.00 Дневник XIII Международного фестиваля оперного искусства "Шаляпинские вечера в Уфе"**
**22.10 "Вечер.com"**
**23.00 "Муз-базар"**
**23.30 "Сердце ангела"**
**01.30 Прогноз погоды**

ӘЙТӘГҮР!

# "ДҮРТ ЙӨРӘК" ТАМАШАҺЫ...

## маҡсатына өлгәштеме?

**Күптән түгел генә баш ҡалабыҙҙың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында йәштәребеҙ "Реалити-шоу: дүрт йөрәк" тип аталған проектты ҡарап кинәнде. Был хаҡта гәзитебеҙҙең алдағы һанында мәғлүмәт биреп үткәйнек. Реалити-шоу үҙ маҡсатына өлгәштеме, тигән һорау менән бер нисә тамашасыға мөрәжәғәт иттек:**



**Сажиҙә МӨСЛИМОВА, БДМУ доценты:** Оҙаҡ йылдар студенттар менән эшләү дәүерендә бер нисә быуын йәштәр күҙ алдымда буй еткерҙе. Заман йәштәре араһында маҡсатлылар күп булыуы һөйөндөрә. Башҡорт эстрадаһында уҙғарылған барлыҡ тамашаларҙы ҡарап барырға тырышам. Шулар араһында был "Дүрт йөрәк" проекты тәрбиәүи йәһәттән иң әһәмиәтлеһе. Сәхнәлә төрлө яҙмышлы, төрлө тәрбиә алған төрлө холоҡло дүрт егет. Араларында нығына барған берҙәмлек уларҙың бик күп насар сифаттарын юҡҡа сығара. Үҙ-үҙеңә ышаныу, сабырлыҡ кеүек матур сифаттары барлыҡҡа килә. Йәғни, берҙәмлек- тәрбиә яғынан да, интеллектуаль йәһәттән дә кешене үҫтерә, тигән һығымтаға киләһең.

**Гөлнара ХӨСӘЙЕНОВА, уҡытыусы:** Башҡорт йәштәре өсөн уҙғарылған барлыҡ сараларға йөрөргә тырышам. Сөнки бындай тамашалар йәш кешегә анализ яһарға, ниндәйҙер һығымталарға килергә ярҙам итә. Алдағы йылдарҙа уҙғарылған сараларҙан "Дүрт йөрәк" проекты нимәһе менән айырыла һуң? Халыҡты бер төрлө концерттар, бер үк йырсыларҙың бер нисә йырҙы ҡабатлап башҡарыуы ялҡытты. Йәштәр яңылыҡ көтә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, башҡорт йәштәре өсөн уҙғарылған сараларҙа рух тәүге урында торорға тейеш, тип уйлайым. Әммә күп кенә тамашаларҙа ошо хәҡиҡәтте һанға һуғып етмәйҙәр. Заманса йырлайбыҙ, тип, йыр текстарына рус, хатта сит ил һүҙҙәре ҡушып йырлауҙар йышайҙы. Быға тиклем концерт-проекттар тик күңел асыуҙы ғына беренсе урынға ҡуя килде. Ә быны был реалити-шоу, исеменән үк күренеүенсә, беҙҙең эстрадаға яңылыҡ индереүе, сценарийҙың оҫта сюжетҡа ҡоролоуы менән әһәмиәтле. Реалити-шоу йәштәребеҙҙе уйға һаласаҡ, ауырлыҡтарҙы нисек еңергә юл күрһәтәсәк, тигән өмөттәмен.

**Резеда ЯМАЛОВА, студент:** Ниндәйҙер тамаша үткәрер алдынан ял итеү, күңел асыуҙы ғына түгел, ә йәштәргә фәһем биреү, уйландырыуҙы ла маҡсат итеп ҡуйырға кәрәк. Был тамаша ысын мәғәнәһендә башҡорт сәхнәһендә яңылыҡ булды. Проект йәштәргә юл күрһәтте, тип ҡыйыу рәүештә әйтеүе иртәрәк булһа ла, йәштәрҙе ниндәйҙер кимәлдә уйға һалғандыр. Шуныһы һөйөнөслө: башҡорт сәхнәһе күгендә яңы исемдәр балҡыны.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күптәрҙең күңеленә хуш килде был тамаша. Идея бына тигән, проблема бар. Сценарий авторы Зөһрә Бураҡаеваның ошо өлкәлә етерлек тәжрибә туплағаны асыҡ сағыла. Етешһеҙлектәр юҡмы ни, тип һорарһығыҙ. Бар, әлбиттә. Артистарға әҙерләнергә ваҡыт аҙ булыуы һиҙемләнде. Алып барыусы егеттең һәр һөйләмдә тиерлек абыныуы эсте бошорҙо. Һәр хәлдә, күңелдә, проект тулыһынса эшләнеп бөтөлмәгән, тигән көйөк ҡалды.**

**Данил ӘБДЕЛҒАЗИН.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**ҘУР СӘХНӘ**

**4 декабрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия.

**5 декабрь "Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** (Н. Ғәйетбай), комедия.

**7 декабрь "Туй"** (А. Чехов), шаярыу.

**11 декабрь "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** (Н. Асанбаев), тарихи драма.

**12 декабрь "Гипнотизер"** (В. Сигарев), өлкәндәр өсөн әкиәт.

**БӘЛӘКӘЙ СӘХНӘ**

**7 декабрь "Серле көршәк"** (З. Биишева), хикәйәт.

**КЕМ АЛЫҠ!**

**1.** Театр артистарының Яңы йыл байрамына арналған музыкаль тамашаһы нисек атала?

**2.** Был тамаша донъя әҙәбиәтендә киң танылыу яулаған бер әҫәр буйынса ҡуйыла. Әҫәрҙең авторы кем?

**Тел.: 8-937-341-91-92**

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7, 8 декабрь "Ромео һәм Джульетта"** (У. Шекспир), трагедия.

**9 декабрь "Ташлама утты, Прометей!"** (М. Кәрим), трагедия. Башлана 15.00

**10 декабрь "Ташлама утты, Прометей!"** (М. Кәрим), трагедия.

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**11 декабрь "Карауанһарай"** фольклор-эстрада төркөмө **"Данлы юлдан атлай ғорур Башҡортостан!"** концерт программаһын тәҡдим итә.

**КЕМ АЛЫҠ?**

**1.** Бөгөн төркөм нисә кешенән тора?

**2.** "Карауанһарай" төркөмө нисәнсе йылда ойошторола?

**3.** Йәш "Карауанһарай" төркөмөнөң бер нисә билдәле йырҙарын һанап сығығыҙ.

**4.** "Карауанһарай" ҡурайсыһының исеме кем?

**5.** Йәш төркөмдә нисә бейеүсе бар? Уларҙың исемдәрен атағыҙ.

**Тел. : 8-927-968-88-14**

### Нефтселәр мәҙәниәт һарайы

**6 декабрҙә** "Аҡ тирмә" башҡорт милли-мәҙәни үҙәге "Башҡортостан" республика ижтимағи-сәйәси гәзите менән берлектә **"Беҙ - Башҡортостандан"** тип исемләнгән кисәгә саҡыра. Кисәлә журналистар, яҙыусылар, ғалимдар, күренекле артистар менән осрашыу, милли баҫмаларға яҙылыу ойошторола.

**Башлана 19.00. Инеү бушлай.**

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮЛЕ АҘЫМДАР

**Ҡайһы бер көйәрмәндәр төңөлә башлағайны инде. Шулай булмай ни, "Салауат Юлаев" командаһы бер уйында еңелә, икенсеһендә мотлаҡ отола ла ҡуя.**

"Салауат Юлаев" яңы, көслө уйынсылар менән тулылана башланы.Тренерҙар штабы звенола уйнаусы хоккейсыларҙы алмаштырҙы. Мәҫәлән, 1-се звенола үҙәктән һөжүм итеүсе Р. Нильсон урынына Игорь Григоренко ҡуйылды. Башҡа звеноларҙа ла ундай үҙгәрештәр булды. Һөҙөмтә көттөрмәне. "Салауат Юлаев" тотошлай бер-бер артлы 4 еңеү яуланы.

Тәүҙә Новокузнецк ҡалаһында "Металлург" командаһын 4:1 иҫәбе менән еңде. Унан һуң юлаевсылар үҙ майҙанында ҡунаҡтарҙы 8:0 иҫәбе менән ҡыйратты. "Металлург" исеменә ҡарағанда, сыныҡҡан ҡорос булырға тейештәр ине лә, ғәмәлдә, уйын барышында тутыҡҡан тимер булып сыҡтылар.

Новосибирск ҡалаһының "Себер" командаһы көслөләр сафында бара. Әммә ул да юлаевсылар тарафынан 3:0 иҫәбенә отолдо!

Юлаевсылар тәүге уйында Силәбенең "Трактор" командаһын 7:2 иҫәбенә ҡыйраткайны. Силәбеләр икенсе осрашыуға реванш алыу ниәте менән сыҡты. Әммә юлаевсылар үткәнде лайыҡлы ҡабатланы һәм 4:0 иҫәбе менән еңеү яуланы. Юлаевсылар ҡапҡаһына бер шайба ла ояламаған икән, бында Виталий Колесниковтың оҫталығы ҙур роль уйнаны. Уйын барышында уға һаҡсылар ныҡ ярҙам итте. Кәрәк саҡта һөжүм итеүселәр ҡапҡасыны яҡланы.

Хәҙер "Салауат Юлаев" еңеүле аҙымдар менән алға китте һәм көнсығыш зонала беренсе булып барыусы "Металлург" (Магнитогорск) командаһын ҡыуып етте. Уҙып та китергә яҙһын!

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Ҡ О Т Л А Й Б Ы Ҙ !

Заманыбыҙ зыялыларының береһе, халҡыбыҙға уның бөйөк улы Салауаттың данын ҡайтарыуға тос ижад көсөн түккән ғалим һәм яҙыусы **Мирас Хәмзә улы ИҘЕЛБАЕВты** тыуған көнө менән ихлас ҡотлайбыҙ!

Һүҙе лә, эше лә - бер, аҡыллы һәм ғәҙел, кешелекле һәм кеселекле туғаныбыҙ Мирас Хәмзә улына яңынан-яңы ижад үрҙәренә артылыуын, хәләл ефете Гөлфиә Аҙнағол ҡыҙы менән ҙур, күркәм ғаиләләрендә балалары, ейән-ейәнсәрҙәре ҡыуанысы кисереп, оҙон-оҙаҡ бәхетле ғүмер итергә насип булһын, тип теләйбеҙ.

**Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылынан Иҙелбаевтар, Солтанғоловтар, Өфө ҡалаһынан Мөхәмәтшиндар ғаиләһе.**

ИҒЛАН

Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, йыл хужаһы - Ҡуян һәм башҡа әкиәт геройҙары башҡорт телендә Яңы йыл байрамдары, тыуған көндәр үткәрә. Әкиәт геройҙары реклама акцияларында ла ҡатнаша ала. Шарҙарҙан яһалған ҡуян, ҡар бабай, шыршы менән байрам залдарын да биҙәйбеҙ. Телефондар:

**251-14-76, 8-937-33-55-235, 8-917-40-06-894.**

**www. afarin-ufa.ru**

ТУҠТА, МӘЛ!

# ТОРАТАУҒА АРТЫЛҒАНДА...

## киләсәк өсөн яуаплылыҡты ла тойҙоҡ

**Ерҙә йәшәгән һәр кемдең яраҡтан төйәге, рухи сығанағы була. Беҙҙең өсөн ул сығанаҡ - мәғрүр Торатау. Изге тауға һәр бер кеше үҙ маҡсаттары аша бара. Кемдер өсөн ул - тәбиғәт һәйкәле, кемдер унан илһам, рух көсө ала, ә кемдер Торатауҙы байлыҡ сығанағылай күрә...**



Бейеклеккә күтәрелеү, уны тойоу, ҡәҙерен белеү тәбиғәт, киләсәк быуындар алдында яуаплылыҡты ла тойорға ярҙам итә. Изге тауға артылыу маҡсаты менән беҙ, "Ашҡаҙар әҙәби-ижад түңәрәге ағзалары", Рита Харис ҡыҙы Фәтҡуллина һәм Илнур Тимерхан улы Дилмөхәмәтов етәкселегендә юрматы еренә, Торатауға юлландыҡ. Сыуаҡ көҙгө көн ҡыҙҙар һәм егеттәр күңелендә аңлатып биргеһеҙ тәьҫораттар ҡалдырҙы. Тауҙы һары-ҡыҙыл төҫкә мансылған урмандар уратып алған. Шул урмандар артында үҙ тормошо менән ҡайнаған ҡалалар. Тау итәгендә ятҡан ап-аҡ ҡар сәйәхәтебеҙгә серлелек өҫтәне.

Етәксебеҙ шихандарҙың - Йөрәктау, Ҡуштау, Шәкетау һәм Торатау, Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғаларының килеп сығыуы тураһындағы легендалар менән күңелебеҙҙе байытты, әүлиәләр ҡәбере хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Тауға артыласаҡ һәр кеше насар уйҙарҙан, ҡара ниәттәрҙән арынырға тейеш, тип иҫкәртте.

"Торатау башында ижад емештәре менән уртаҡлашыу, ҡулға-ҡул тотоноп теләктәр теләү, хыял шарҙарын осороу күңелегеҙҙә ниндәй тәьҫораттар уятты?" тигән һорау менән "Ашҡаҙар"ҙарға мөрәжәғәт иттем.

**Зәлиә ТАЛИПОВА, 3 курс студенты:** Беҙҙең тормошобоҙ әле үҙ яҙын кисерә, йәшлек хистәребеҙ ташып торған мәлебеҙ. Тауҙың үренә менеп, тирә-яҡҡа күҙ һалаһың: һин тәбиғәт менән берләшәһең һәм үҙеңде уның бәләкәй генә бер өлөшө итеп тояһың. Тормошҡа, тәбиғәткә ҡараш формалашып, был донъяла үҙ урының хаҡында уйланғанда, Торатауға менгән һәр кем рухи үҫеш кисергәндер. Кеше нисек кенә тәбиғәтте үҙгәртергә, уға хужа булырға тырышмаһын, ул барыбер Ваҡыт алдында көсһөҙ. Беҙҙән һуң ергә яңы быуын килер, донъялар бөтөнләй икенсе булыр, ә Торатау мәңге торор.

**Зөлфиә СӘЛИХОВА, 4 курс студенты:** Торатау! Беләм, мин һинең яныңа килеүсе беренсе ҡунаҡ түгел. Һинең һыртында таштар менән "Мин башҡорт" тип яҙған ҡыҙҙы иҫләрһеңме? Ә минең хәтеремдә һин оҙаҡҡа ҡалырһың. Һине мин, ниңәлер, сал сәсле бер ҡарт кеүек күҙ алдыма килтерәм. Әгәр һин һөйләй белһәң, беҙгә ни һөйләр инең икән? Тыуған ер өсөн ҡан ҡойған ата-бабаларыбыҙҙың батырлығы, яңы өмөттәр менән төҙөлгән ҡалалар, зәңгәр күккә тәҙрә аша күҙ баҡҡан тотҡондар тураһындамы?..

Мендәрсә кешеләр янына килә, улар араһында минең булғанымды иҫләмәҫһең дә... Мөһим түгел. Иң мөһиме, мин һинең беренсе һәм һуңғы ҡунағың түгел. Бәлки, һине уратып алған ошо ҡалалар урынына яңылар төҙөләр, быуаттар бер- береһен алмаштырыр. Ә һин икенсе быуатҡа, икенсе быуындарға беҙҙең турала ла һөйләр өсөн йәшә...

**Әхнәф Иҫәнбаев, 4 курс студенты:** Ҡайтҡанда мин алыҫлаша барған Торатау һынына оҙаҡ ҡарап барҙым. Заводтар. Фабрикалар. Тормош. Мин борсолмайым. Беҙ ҙә китербеҙ. Заводтар ҙа юғалыр. Ә Торатау һаман торор. Тауҙарҙан башҡа бөтәһе лә Ваҡыттан ҡурҡа. Тик уларға теймәһендәр генә...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Шагирҙар шагирҙарса әйтә инде һәр кисереште. Бына уҡытыусыбыҙ, шағирә Рита Фәтҡуллина апайыбыҙ ҙа Торатауҙа алған тәьҫораттарын яңы шиғыр юлдарына һалды.**

### Торатау менән һөйләшеү

- Һаумы, Торатау!
- Һа-а-ау!

- Иплəп кенə индəрeнə менһəм,
Серен сисер ҙә һуң суйыр ташың?
- Рух ныҡлығын һаҡлар аҡһаҡал ул,
Күҙем өҫтөндәге яҡлар ҡашым.

- Елдәр менән бергә һөйөп үтһәм,
Асыуланмаҫтыр ҙа ҡылған үлән?
- Киреһенсә, күмер күңеленде
Тауҙар ғәме, тауҙар сәме менән.

- Индәренде сая таяу итеп,
Болоттарға ҡарай ҡулым һуҙһам,
Ҡараштарым шул мәл офоҡтарҙы,
Кинлектәрҙе әгәр байҡап уҙһа,
Килешер бит?!

- Мәғрүрлегем, әйҙә, итһен мәғрүр,
Ғорурлығым бирһен ғорурлыҡ,
Был донъяға болот күҙе менән
Болот кимәленән бағырлыҡ.

Юғарыға илтә тауҙар тыны,
Инләр өсөн сикһеҙ кинлекте.
Ғәйрәтләнеп тыуған ерҙе ҡосам,
Ҡосағына ала бейеклек.

**Гөлшат СӘЛӘЙМӘНОВА,**

**Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы студенты.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## БЫЛҠЫ, ТОЛАФ, КЕЛӘНДӘҮ...

◆ "Былҡы" тигән һүҙ "эшкә өйрәнмәгән, һүлпән" тигәнде аңлата. - Атайҙары булған малайҙар күплектә аталарына арҡаланып, былҡы булалар, - тип һөйләгәндәр элек.

◆ "Толаф" һүҙе "ҡыялҡы, бол" тигәнде аңлата булыр. Ярҙамсыл ғына инәй тураһында әләсәй: "Толаф ҡына йәшәһәләр ҙә, хатта ярҙамсыл булды кешегә", - тип әйтеп һалғайны.

◆ "Келәндәү" балсыҡ менән ҡомдо бергә ҡушып, һылауҙы аңлата. - Өй нигеҙен келәндәп алдыҡ әле, - тиҙәр Бөрйән яҡтарында. Өйҙәң нигеҙен балсыҡ менән йәбештергәс, "келәндәү" "келейләү", "йәбештереү" һүҙенә яҡынмылыр инде. Балсыҡҡа ат тиҙәге ҡушып һылауҙы ла улар "келәндәү" тип атай. Ә ейәнсуралар был эште "шыйыҡлау" ти.

**Земфира АҠБУТИНА.**

**Ейәнсура районы Ибрай ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БЕР ТАМСЫ ҺЫУҘА ЛА,

### туҙан бөртөгөндә лә ул Хоҙай

Өйләнеү - үҙеңдең ахмаҡлығыңды белеү өсөн иң яҡшы ысул.

**(Оскар Уайльд).**

Хоҙай бер тамсы һыуҙа ла, бәләкәй генә туҙан бөртөгөндә лә ул.

**(Махатма Ганди).**

Хәүеф һәм һоҡланыу бер ботаҡта үҫә.

**(Немец халыҡ мәҡәле).**

Күп әйберҙәр яҡшыра бара, тик кеше асылы ғына үҙгәрмәй.

**(Уильям Моэм).**

Беҙҙең һәр беребеҙ - үҙ ҡылыҡтарыбыҙҙың улы.

**(Мигель Сааведра).**

Тормошта йәшәүҙең ике ысулы бар: барыһына ла ышаныу йәки бер нәмәгә лә ышанмау - икеһе лә һине баш ватыуҙан ҡотҡара.

**(Альфред Корзбски).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше ҡорбанға килтерәсәк кәзәне елкәһенә һалып, өйөнә ҡайтып бара икән. Юлда уны "Их, бөгөн ошо кәзәне ашарға ине бит әле..." тип ҡыҙыҡҡан өс мут егет күҙәтеп тора. Шунан улар кәзәне ҡулға төшөрөү өсөн хәйлә уйлап таба. Тәүҙә был кәзә хужаһының ҡаршыһына егеттәрҙең береһе осраған була һәм:"Һин елкәңә йөкмәп баргас, был эт, һис һүҙһеҙ, бик ҡәҙерлелер. Ул, моғайын, хайуандарҙы шәп ҡыуалыр..." - ти ҙә, шәп-шәп атлап, уҙып китә. Кәзә хужаһы уның артынан:"Ҡара, нимә һөйләй бынау йүнһеҙ, мин ниңә этте елкәмә йөкмәп барайым инде? Был һис булмай торған хәл!" - тип уйлап ала ла, ары китә.**

**Бына мут егеттәрҙең икенсеһе уның ҡаршыһына сыға һәм:"Һин ни уйлап сығарҙың, ә? Үҙең арыу ғына кешегә оҡшағанһың, ә үҙең эт йөкмәп алғанһың. Бәлки, ул ҡуянды шәп ҡыуалыр?" - ти. "Бына иҫәрҙәр! - тип уйлай кәзә хужаһы уның артынан. - Кәзәне эттән айыра белмәйҙәр..."**

**Кәзә йөкмәп килгән ирҙең ҡаршыһына баяғы муттарҙың өсөнсөһө килеп сыға һәм: "Уй, миңә ҡағыла күрмә. Эт күтәреп йөрөгәс, һинең кейемдәрең дә, күңелең дә таҙа түгелдер..." - ти. "Был нимә була инде? - тип ҡыҙып китә кәзә хужаһы. - Нисәмә кеше әйткәс, был дөрөҫ була түгелме? Бәлки, мин, ысынлап та, кәзә һынындағы шайтанды йөкмәп китеп барамдыр?" Шулай уйлап та өлгөрә, кәзәһен ергә атып бәреп, йүгереп тә китә. Ә муттарға шул ғына кәрәк була ла инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 4845